ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

16-22 ғинуар (һыуығай) 2026

№2 (1197)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Тормош - изгелек тә, яуызлыҡ та түгел, ул изгелекте һәм яуызлыҡты үҙенә һыйҙырыусы бер һарай. Ул һарайҙы нимәгә әйләндереү, әлбиттә, һинең ҡулда.**

**(Мишель де Монтень).**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Кешене алыштыра алмаясаҡ!**



6

**Мин бәхетле...**

сөнки мин бәхетһеҙлек хаҡында уйланмайым



8-9

**Түктермәйек әсәләрҙең күҙ йәшен**



10-11

**Өләсәй булһа өй түрендә...**



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ...



**Әсәлек капиталы программаһы 2030 йылға тиклем оҙайтылды. Рәсәйҙең Дәүләт Думаһы депутаттары икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа тейешле закон ҡабул итте.**

Бынан алдараҡ Рәсәй Президенты Владимир Путин Әсәлек капиталы программаһын 2030 йылдың 31 декабренә тиклем оҙайтыу тәҡдиме менән сығыш яһағайны. "Беҙҙә Әсәлек капиталы программаһы 2026 йыл башына тиклем ғәмәлдә. Уны кәмендә 2030 йылғаса оҙайтырға тәҡдим итәм", - тине Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда.

2026 йылда Әсәлек капиталы 974,1 мең һумға тиклем арта. Түләүҙәр 1 февралдән инфляция кимәленә ҡарап индексациялана. Күҙаллауҙар буйынса, ул 6,8 процент тәшкил итәсәк.

Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығы 2026 йылда социаль түләүҙәрҙе индексациялау тураһында иғлан итте. Ведомство белдереүенән күренеүенсә, әгәр ғаиләлә беренсе балаға Әсәлек капиталы түләнмәгән икән, икенсе балаға Әсәлек капиталы 974,1 мең һумғаса еткерелә, беренсе балаға иһә 737,2 мең һумға тиклем арттырыла. Ә бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған пособие 28 773 һумға тиклем арта. Шулай уҡ 1 февралдән инвалид граждандарға, ветерандарға, Советтар Союзы Геройҙарына, Рәсәй Геройҙарына, Социалистик Хеҙмәт Геройҙарына, Рәсәйҙең Хеҙмәт Геройҙарына, Герой-әсәләргә айлыҡ аҡсалата түләүҙәр, радиациянан зыян күргән кешеләргә пособиелар һәм башҡа ярҙам саралары инфляция кимәле буйынса индексациялана.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара" тиҙәр. Тап ғинуар айында Халыҡ-ара рәхмәт көнө лә билдәләнә. Ә һеҙ был донъяла кемгә рәхмәт уҡып йәшәйһегеҙ? Һеҙҙең үҙегеҙгә кемдәр рәхмәт әйтә?

***Леонид СОКОЛОВ, яҙыусы-юморист, Рәсәй һәм Башҡортостандың Яҙыусылар союзы ағзаһы:*** Әлбиттә, иң тәүҙә миңә ғүмер, тәрбиә биргән, иң ауыр саҡтарҙа янымда булған атай-әсәйемә рәхмәт әйтер инем. Икенсенән, Ватаныбыҙҙы фашистарҙан азат иткән ата-бабаларыбыҙға, әлеге заманда улар эшен дауам иткән, беҙ тыныс йәшәһен өсөн көн һайын үҙ ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйған МХО-лағы һалдаттарға булған рәхмәтемде һүҙ менән әйтеп бөтөрөрлөк тә түгел. Өсөнсөнән, мин эштәре күҙгә күренмәй торған, әммә үҙ һөнәрҙәренә тоғро кешеләргә, мәҫәлән, шул уҡ иртәнге етелә өйөм алдында көн һайын осраҡан, таңдан тороп, ниндәй генә һауа торошо булмаһын, ҡулына һеперткеһен тотоп, беҙҙең йәшәйешебеҙҙе уңайлыраҡ иткән урам таҙартыусыға рәхмәтемде әйтеп китәм. Халыҡ ни хәтлем генә уларҙы әрләмәһен, төн йоҡоһон йоҡламай эшләгән коммуналь хеҙмәт эшселәренә лә рәхмәтлемен.

Ҡалабыҙҙа ниндәй ҙур, масштаблы проектар тормошҡа ашырылғанын, Республикабыҙ көндән-көн нығынғанын, көс туплағанын күрәбеҙ, шунын өсөн Хөкүмәткә рәхмәтем ҙур. Был үҙгәрештәр Башҡортостандың киләсәге, тимәк, беҙҙең дә киләсәгебеҙ барлығын аңлата, иң мөһиме шул.

Һин кешегә рәхмәтле булһаң, кеше һиңә шулай уҡ яуап бирә. Бер ауыҙ ихлас рәхмәт һүҙен ҡыҙғанған кешеләрҙе аңламайым мин. Рус телендә был, мәҫәлән, был "спасибо" тигән һүҙгә "Спаси Бог" тигән ниндәй матур мәғәнә һалынған бит. Мин уны дауаханалағы табибтарға әйтәм, улар: "Әйтергә онотмағанығыҙ өсөн рәхмәт", - тип ҡыуанып ҡалалар. Яңғыҙлыҡтан интеккән оло йәштәгеләрҙе ҡотлап, рәхмәт һүҙҙәрен әйтһәк, улар бала кеүек шатланалар. "Рәхмәт" бөгөнгө көндәге кеүек автоматик рәүештә, кәрәккәндә лә, кәрәкмәгәндә лә ҡыҫтырылған, күнегелеп бөтөлгән түгел, ә ысын күңелдән теләп әйтелгән һүҙ булырға тейеш. Кешеләрҙең тап шундай ихлас итеп әйтелгән рәхмәте күңелемә йылы өҫтәй, йәшәргә көс бирә.

Донъялағы һәр бер "рәхмәт" әйтеләсәк кешеһен тапһын һәм геометрик прогрессияла ишәйһен, тигән теләктәмен. Был һүҙ күңелдәребеҙҙе таҙараҡ, йомшағыраҡ итер өсөн булдырылған бит.

ҺӨЙӨНСӨ!

# КӨТӨП АЛЫНҒАН МӘКТӘП

**12 ғинуарҙа Өфө районының Шмидт ауылында 640 урынлыҡ мәктәпте һәм 160 урынлыҡ балалар баҡсаһын үҙ эсенә алған яңы белем усағы асылды.**

Комплексты асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты. "Был - күптән көтөлгән ваҡиға. Мәктәп яҡташыбыҙ, киң билдәле яугир, Рәсәй Геройы Суфияров Илдар Филорет улы исемен йөрөтәсәк. Ул үҙ ғүмерен ҡорбан итеп, дошман менән алыш барышында иптәштәрен ҡотҡарҙы, тиңһеҙ батырлыҡ ҡылды. Шуға ла бында уҡыу мәртәбәле булһын, тип теләйем..." - тине Радий Фәрит улы тантанала сығыш яһап.

Билдәләнеүенсә, белем усағында уҡытыу технологик һәм тәбиғи фәндәр профилдәре буйынса алып барыласаҡ, атап әйткәндә, математика, физика, биология, химия һәм информатиканы тәрән өйрәнеү ҡарала. Бынан тыш, мәктәп Өфө дәүләт нефть техник университеты менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итәсәк.

Яңы белем усағы асылыуын һөйөнсөләп, шуны ла әйтәбеҙ: бында элек Шамонин ауылы мәктәбенә йөрөп уҡыған Шмидт һәм Бурцево ауылдары балалары уҡыясаҡ. Тимәк, бик ҡыҫынҡы шарттарҙа эшләгән Шамонин мәктәбе бер аҙ бушап, иркен тын алып ҡаласаҡ. Ә коллектив өсөн был бик мөһим, сөнки башлыса милләттәштәребеҙ йәшәгән был ауылда башҡа бер ниндәй мәҙәни объект та юҡ һәм күмәк халыҡты йыя, ауылдаштарҙы аралаштыра, күңел астыра торған бар саралар ошо мәктәптә үтә бит.



12+

*✓ Рәсәй империяһы составына үҙ ирке менән ингәндән алып башҡорттар шулай уҡ үҙ ирке менән махсус миссияны - берҙәм Ватандың тышҡы сиктәрен һаҡлау миссияһын үҙ өҫтөнә алды.*



ҠЫҪҠАСА

# ШӨКӨР, БАЛАЛАР ТЫУА

**Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министры мәғлүмәттәре буйынса, былтыр беҙҙә 27 574 сабый тыуған. Шулай уҡ сабыйҙарҙың үлем осраҡтары һиҙелерлек кәмегән.** "2025 йылдың 11 айында күрһәткес 1000 сабыйға 3,2 промилле тәшкил иткән, ә былтыр ул 4-кә тиң ине. Бындай һөҙөмтәгә Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау системаһында тормошҡа ашырылған саралар комплексы ярҙамында өлгәшелде", - тине һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин. Уның һүҙҙәренсә, Башҡортостанда йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға һәм балаларға өс кимәлле медицина ярҙамы күрһәтеү системаһы булдырылған. Хәүеф төркөмөнә ҡараған ҡатын-ҡыҙҙар өсөн йөклөлөктө алып барыуҙың индивидуаль программалары әҙерләнә. Бының өсөн Рәсәйҙең алдынғы федераль клиникалары белгестәре менән телемедицина консультациялары үткәрелә.

✓ **Мәскәүҙә үткән ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссияның дөйөм йыйылышында Шүлгәнташ мәмерйәһе рәсми рәүештә ойошманың бөтә донъя мираҫы объекттары иҫәбенә индерелде.** Радий Хәбиров Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә ошо турала әйтте. "Беҙ Бөтә Рәсәй ғилми-тикшеренеү геология институты менән тейешле килешеүгә ҡул ҡуйҙыҡ. Рәсәйҙә геопарктарҙың милли системаһын бергәләп үҫтерергә килештек. Хәтерегеҙгә төшөрәм, быңдай геопарктар илдә икәү генә, икеһе лә беҙҙең республикала урынлашҡан", - тип билдәләне Хәбиров. Бынан алдараҡ республика етәксеһе Рәсәйҙең сит ил эштәре министры Сергей Лавровҡа һәм ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссия рәйесенә республикаға бай мәҙәни, тәбиғи, тарихи мираҫты һаҡлау йәһәтенән ярҙамы өсөн рәхмәт белдерҙе.

✓ **2026 йылда Ғәли Соҡорой псевдонимы аҫтында билдәле шағир Мөхәмәтғәли Ғәбдессәлих улы Кейековтың (1826-1889) тыуыуына 200 йыл тула.** Башҡортостанда ошо дата айҡанлы юбилей саралары ҡаралған. Яңы йыл алдынан Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың ҡульяҙмалар һәм һирәк баҫмалар бүлегендә Ғәли Соҡоройға арналған уникаль күргәҙмәнең презентацияһы үтте. Ә 12 февралдә "Тарих һәм мәҙәниәт: үткән, хәҙерге, киләсәк. Башҡорт шағир-мәғрифәтсеһе Ғәли Соҡоройҙың тыуыуына 200 йыл тулыуға" тип аталған сит ил ҡунаҡтары ҡатнашлығында Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияһы була. Ғәли Соҡоройға арналған саралар ошо көндәрҙә Тәтешле районында үтте. Юбилейға бағышланған саралар Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев ҡатнашлығында түңәрәк ҡор менән асылды. Һуңынан сара билдәле мәҙәниәт эшмәкәрҙәре менән бергә майҙанда дауам итте.

✓ **Рәсәй Федерацияһының Мәғариф һәм фән министрлығы киләһе уҡыу йылына ВУЗ-дарға инеү өсөн минималь БДИ балдарын раҫланы.** Вуздарға документ тапшырыусы абитуриенттарҙың балдары киләһенән кәм булмаҫҡа тейеш: рус теле - 40; профиль математика - 40; физика - 41; йәмғиәтте өйрәнеү - 45; тарих - 40; информатика - 46; сит телдәр - 40; әҙәбиәт - 40; биология - 40; география - 40; химия - 40. Былтырғы йыл менән сағыштырғанда, химия, биология, физика, информатика, тарих һәм сит телдәр буйынса минималь балдар һанының артыуы күҙәтелә. Рус теле, профиль математика, йәмғиәтте өйрәнеү, әҙәбиәт һәм география буйынса балдар үҙгәрешһеҙ ҡалған. Мәғариф министрлығы һәм Роспотребнадзор 2026 йылға БДИ һәм ТДИ расписаниеһын да раҫланы.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# БАШҠОРТОСТАН РЕЙТИНГЫ

**2025 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан бер юлы бер нисә мөһим федераль рейтинг буйынса Рәсәйҙең алдынғы төбәктәре иҫәбенә инде. Был - идара итеүҙең һөҙөмтәлелеген күрһәтеү генә түгел, ә танылыу, республикаға иғтибар һәм, һөҙөмтәлә, ыңғай имидж булдырыу, инвестициялар йәлеп итеү һәм башҡалар.**



● Башҡортостан Милли спорт премияһы йомғаҡтары буйынса икенсе тапҡыр иң яҡшы спорт төбәге, спорт ҡоролмалары һаны буйынса лидер тип танылды.

● Һуңғы 6 йылда республика төбәккә йыл һайын инвестициялар күләмен 3 тапҡырға арттырҙы һәм инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингында 13 позицияға күтәрелде, өс лидер иҫәбендә нығынды.

● Башҡортостан Рәсәйҙең өҫтөнлөклө зоналарын үҫтереү һәм кластер сәйәсәтен тормошҡа ашырыу кимәле буйынса илдең алдынғы төбәктәренең береһе булып тора. 2025 йылда "Алға" махсус иҡтисади зонаһы Рәсәй иҡтисади зонаһының инвестиция йәлеп итеүсәнлеге милли рейтингында өсөнсө урынды биләй. "Беҙ кластер сәйәсәте буйынса Рәсәйҙә беренсе урын алдыҡ - был сәнәғәт сәйәсәтенең мөһим өлөштәренең береһе. Рәсәй Хөкүмәте былтыр кластерҙарҙы үҫтереүгә финанс бүлде. Беҙ 140 миллион һум алдыҡ. Быйыл тағы ла күберәк аҡса алласаҡбыҙ", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй сәнәғәт форумында.

● Дронофикация рейтингы тип аталған яңы күрһәткес барлыҡҡа килде, беҙ унда өсөнсө урынды биләйбеҙ. Фәнни-технологик үҫеш буйынса төбәктәрҙең милли рейтингында етенсе урындабыҙ.

● Бынан тыш, Башҡортостан Рәсәйҙә туристар өсөн иң ҡыҙыҡлы ун урын иҫәбенә инде. Был инвесторҙарға, потенциаль партнерҙарға һәм граждандарға бында үҫеш өсөн потенциал барлығын белдерә.

● Ҡулланыусыларҙы яҡлау кимәле буйынса Рәсәй төбәктәре араһында лидер статусы, инвалидтарҙың йәшәү сифаты буйынса беренсе рейтингта - 11-се, 2026 йылда Президент гранттарының беренсе конкурсында коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙың әүҙемлеге буйынса беренсе урын.

● Былардан тыш, 2025 йыл йомғаҡтары буйынса төбәк Башлығы Радий Хәбиров "бик көслө йоғонто яһаусы" Рәсәй субъекттары етәкселәре рейтингының тәүге 20-һенә инде.

# УНИКАЛЬ ТӘЖРИБӘБЕҘ БАР



**2026 йыл Рәсәй халыҡтарының берҙәмлеге йылы тип иғлан ителде. Рәсәй - ул быуаттар буйы 190-дан ашыу халыҡ татыу йәшәгән уникаль ил. Уларҙың һәр береһе дөйөм ил мәҙәниәтенә, йолаларына һәм тарихына үҙ өлөшөн индерә. Был төрлөлөк - төп байлығыбыҙ.**

"Беҙҙең өсөн һәр халыҡтың мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәте, теле мөһим һәм кәрәкле. Быңдай төрлөлөк, уны һаҡлау тураһында хәстәрлек - Рәсәйҙең милли сәйәсәте нигеҙе", - тип билдәләнe Рәсәй Президенты Владимир Путин былтыр ноябрҙә үткән Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса Совет ултырышында. Дәүләт башлығы 2036 йылға тиклемге осорға дәүләт милли сәйәсәтенең яңы стратегияһын раҫланы. Уның маҡсаты - күп милләтле Рәсәй халҡының берҙәмлеген нығытыу.

"Башҡортостан да былтыр милләт-ара һәм конфессия-ара берләшеү ваҡиғаларына бай булды. Беҙ бөтәбеҙҙә берләштергән яңы байрамдар - Милли кейем көнө, Бейеү көнө, "Урал батыр" эпосы көнө үткәрә башланыҡ. "Китап-байрамы", "Әйҙә уйнарға!", "Тамға" байрамдары танылыу яуланы", - тап билдәләне Радий Хәбиров Өфөлә үткән Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет ултырышында.

Төбәктәге милләт-ара мөнәсәбәттәр торошо тураһында йәмәғәтселек фекерен социологик тикшереүҙәр мәғлүмәттәре буйынса һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың 92,5 проценты яҡшы тип баһалай.

"Башҡортостанда халыҡтың граждандыҡ үҙаңы кимәле күтәрелеүен күрәбеҙ. 18 йәштән 24 йәшкә тиклемге йәштәр араһында граждандыҡ үҙенсәлегенең юғары кимәлен айырыуса билдәләп үтергә теләйем. Был республикала патриотик тәрбиәнең һөҙөмтәлелеге хаҡында һөйләй", - тип билдәләне Гуманитар тикшеренеүҙәр үҙәге директоры Марат Мәрҙәнов.

Ил Президенты ни өсөн Башҡортостанды Рәсәй яҙмышында айырым роль уйнаған төбәк тип иҫәпләй? Иҫкә төшөрәйек: "Рәсәй империяһы составына үҙ ирке менән ингәндән алып башҡорттар шулай уҡ үҙ ирке менән махсус миссияны - берҙәм Ватандың тышҡы сиктәрен һаҡлау миссияһын үҙ өҫтөнә алды. 1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡытында Башҡортостан 15 йәштән бөтә ир-егеттәрҙе тиерлек атҡа ултырта, ҡоралландыра һәм дошман менән көрәшергә ебәрә. Бөйөк Ватан һуғышында ла республика халҡы батырлыҡ күрһәтә. Шуға күрә бөгөн Донбаста, Херсонда, Запорожьела халҡыбыҙҙы яҡлау буйынса Махсус хәрби операция барышында бурыстарҙы хәл иткәндә республика үҙен шулай уҡ яуаплы тотоуына бер ҙә аптырарлыҡ түгел. Бынан тыш, Өфө - республиканың баш ҡалаһы - һәр ваҡыт Рәсәй Исламының, мәғрифәтле, ижади һәм Ислам донъяһында бик хөрмәтле һәм шул уҡ ваҡытта илһөйәрлек йүнәлешле, илебеҙҙең башҡа традицион конфессиялары менән үҙ-ара эш итеүгә көйләнгән Исламдың иң мөһим үҙәктәренең береһе булды. Был йәһәттән Башҡортостан Рәсәй тормошонда, тарихында һәм яҙмышында һәр ваҡыт айырым, әһәмиәтле роль уйнаны тип әйтергә була", - тине Владимир Путин.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Ҙур һәм татыу ғаилә йылы саралары планын әҙерләргә ҡушты. "2026 йылды беҙ Ҙур һәм татыу ғаилә йылы тип иғлан иттек, саралар планы кәрәк. Рәсәй Президенты 2026 йылды Халыҡтар берҙәмлеге йылы тип билдәләне", - тине республика етәксеһе.

✓Башҡортостан Башлығы журналистарҙы Рәсәй матбуғаты көнө менән ҡотланы. Радий Хәбиров төбәктә абруйлы һәм әһәмиәтле баҫмаларҙың күп булыуын әйтте. "Элек интернет юҡ ине, гәзит редакциялары мәғлүмәтте тиҙерәк еткереүҙә ярышты. Бөгөн мәғлүмәт күп, иң мөһиме - халыҡҡа ошо сикһеҙ диңгеҙҙә йүнәлеш табырға, дөрөҫлөктө ялғандан айырырға ярҙам итеү. Был киң мәғлүмәт сараларының төп бурысы булып тора, - тине Башҡортостан Башлығы. - Еңел булмаған эшегеҙҙә уңыштар теләйем!"

✓Башҡортостан Башлығы 2026 йылдың ғинуарында Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарына йыллыҡ Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһай. Был хаҡта Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә белдерҙе. "Мөрәжәғәтнамәне ғинуарға күсерҙек. Унда Владимир Путин рәйеслегендәге Дәүләт Советында ҡабул ителгән бик күп ҡарарҙар сағылдырылды", - тип билдәләне республика етәксеһе.

✓Башҡортостанда контракт буйынса хеҙмәт иткән хәрбиҙәр өсөн бер тапҡыр бирелә торған түләү 1 миллион һумға тиклем арттырылды. Хәрби хеҙмәт үтәгән граждандарҙың айырым категорияларына ярҙам күрһәтеү тураһындағы указға республика Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы. Был ярҙам сараһы 2026 йылдың 1 ғинуарынан ғәмәлгә инде. 1 миллион һумлыҡ ярҙам алыу хоҡуғы 2026 йылдың 31 ғинуарына тиклем ғәмәлдә буласаҡ.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин 2026 йылда Рәсәй Федерацияһы граждандарын хәрби хеҙмәткә саҡырыу һәм саҡырылыш буйынса хеҙмәт иткән граждандарҙы хәрби хеҙмәттән бушатыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. 2026 йылдың 1 ғинуарынан 31 декабренә ҡәҙәр запаста булмаған һәм хәрби хеҙмәткә саҡырылырға тейешле 18 йәштән 30 йәшкә тиклемге 261 000 кеше хеҙмәткә саҡырыла. Шул уҡ ваҡытта хеҙмәт итеү ваҡыты тамамланған һалдаттарҙы, матростарҙы, сержанттарҙы һәм старшиналарҙы хәрби хеҙмәттән бушатыу күҙ уңында тотола.

✓Республика Рәсәйҙең фәнни-технологик үҫеш милли рейтингы һөҙөмтәләре буйынса 7-се урынды алды. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республиканың фән һәм юғары белем биреү буйынса дәүләт комитеты рәйесе Светлана Мостафина белдерҙе. Уның билдәләүенсә, Башҡортостан 2024 йыл менән сағыштырғанда бер баҫҡысҡа юғарыраҡ күтәрелде.

*✓ Рухи мираҫтың, шул иҫәптән Өфөләге иң боронғо мәсеттәрҙең береһенең тергеҙелеүе - айырыуса әһәмиәтле ваҡиға, тип билдәләне Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев.*



ӨФӨ - ХӘРӘКӘТТӘ



# ХӘКИМ МӘСЕТЕ ТЕРГЕҘЕЛДЕ!

**Өфөләге Хәким мәсетендә 9 ғинуарҙа беренсе намаҙ уҡылды. Юғары мөфтөй, Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе Тәлғәт Тажетдин вәғәз һөйләне. Быйылғы йыл Рәсәй халыҡтарының берҙәмлеге йылы тип иғлан ителеүен хәтергә төшөрҙө.**



Рухи мираҫтың, шул иҫәптән Өфөләге иң боронғо мәсеттәрҙең береһенең тергеҙелеүе - айырыуса әһәмиәтле ваҡиға, тип билдәләне Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев һәм эшҡыуарҙарға, битараф булмаған халыҡҡа тарихи объектты тергеҙеүгә индергән өлөшө өсөн рәхмәт белдерҙе.

Егерменсе быуат башында төҙөлгән дүртенсе йәмиғ мәсете Өфө губернаһында бейеклеге 18 метр булған ике манаралы берҙән-бер ғибәҙәтхана ҡоролмаһы булған. Төҙөлөштө финанслауҙы шул уҡ Бекетов урамындағы (хәҙерге М.Кәрим урамы) йортта йәшәгән Рәсәй Ҡыҙыл Тәре йәмғиәтенең Өфө губерна идаралығы ағзаһы, сауҙагәр Абдуллатиф Хәкимов үҙ өҫтөнә ала. Мәсеткә нигеҙ һалыуҙы иҫтәлегенә халыҡ уны "Хәким" тип атай. Октябрь революцияһынан һуң дингә ҡаршы әҙәрлекләүҙәр башлана. Күп кенә ғибәҙәтханалар кеүек, мәсет тә ябыла, унын стеналарында тиҫтәләгән йылдар дауамында төрлө ҡала учреждениелары урынлаша. Бинаны тергеҙеү 2002 йылда башлана, реставрация процесына эшҡыуарҙар һәм Өфө халҡы ҡушыла. Хәҙер Хәким мәсете тарих һәм архитектура ҡомартҡыһы булып иҫәпләнә.

Әйткәндәй, бынан алда республика Башлығы Радий Хәбиров "Әр-Рәхим" мәсетендә эштәр барышы хаҡында һөйләгәйне. "Әр-Рәхим" мәсетендә эштәрҙе, оҙайлы ял көндәренә ҡарамай, дауам итәбеҙ. Дөйөм тырышлыҡ һәм Аллаһ Тәғәлә ярҙамы менән был изге эште тамамлап ҡуясаҡбыҙ", - тип яҙҙы ул социаль селтәрҙәрҙә.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, мәсет 2006 йылда төҙөлә башлай. Инвестициялауҙа өҙөклектәр арҡаһында 2016 йылдың йәйендә эштәр туҡтатыла. 2021 йыл аҙағына мәсетте төҙөүгә бөтәһе 1,8 миллиард һум аҡса йүнәлтелгән була.

2023 йылдың сентябрендә Башҡортостан Башлығы "Әр-Рәхим" йәмиғ мәсете төҙөлөшөн тергеҙеү буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Бынан һуң белгестәр объектты комплекслы тикшерҙе һәм уның торошон баһаланы. 2024 йылдың 10 апрелендә мәсет төҙөлөшө яңынан тергеҙелде.

# ЯҢЫ ТРОЛЛЕЙБУСТАР

**Өфөнөң 1-се троллейбус депоһы УТТЗ-6241.01 "Горожанин" моделле автономлы йөрөшө оҙайлыраҡ булған биш яңы троллейбус һатып алды, тип хәбәр итәләр ҡала хакимиәтенән. Улар баш ҡаланың көньяҡ һәм төньяҡ өлөшөндә йөрөйәсәк.**



Өфө трамвай-троллейбус заводы етештергән был транспорт өлгөһө - Рәсәй-Белоруссия хеҙмәттәшлеге емеше. Троллейбустар һынау барышында үҙҙәрен яҡшы күрһәткән. Автономлы йөрөүенең артыуы электр транспортына маневрлыраҡ булырға һәм ҡаланың интенсив трафигына яраҡлашырға мөмкинлек бирә. Мәҫәлән, иҫке өлгөләге троллейбус линияла боҙолған осраҡта, уның артынан килгәндәре хәрәкәтен туҡтата. Ә яңы транспорт ҡаршылыҡты урап үтеп, маршрут буйынса артабан хәрәкәт итә ала.

"Минск автомобилдәр заводы - 2019 йылдан Өфө трамвай-троллейбус заводының стратегик партнеры. Был интеграция нығына һәм сифатлы техника сығарырға мөмкинлек бирә. Һуңғы биш йылда ошондай 50 троллейбус һатып алдыҡ. Эш артабан да дауам итәсәк, маҡсатыбыҙ - барлыҡ хәрәкәт итеү составын яңыртыу. Былар барыһы ла пассажирҙар өсөн мөмкин тиклем уңайлы, тиҙ һәм хәүефһеҙ булһын өсөн эшләнә", - тип билдәләне Өфө мэры Ратмир Мәүлиев.

Яңы ун троллейбус ҡала маршруттарына үткән йылдың көҙөндә сыҡҡайны.

Өфө һәм Минск предприятиелары араһында партнерлыҡ тураһында килешеү сиктәрендә производство ғына түгел, шулай уҡ сервис һәм дилерлыҡ эшмәкәрлеге яйға һалынған. Троллейбустарҙы йыйыу процесына республика компаниялары йәлеп ителгән, улар электроника һәм быяла етештерә, пластик менән тәьмин итә.

ҠЫҪҠАСА

# КАМПУС ТӨҘӨЛӘ!

**Өфө вуз-ара кампусы төҙөлөшө ҡыҙыу дауам итә. Был хаҡта объектты ҡарап сыҡҡандан һуң республика Премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итте.** Яңыртылған графикҡа ярашлы, 100 мең квадрат метрлыҡ кампустың икенсе этабын төҙөү 2026 йылдың аҙағында - бер йылға тиерлек алда тамамланасаҡ. Әле унда яҡынса 300 төҙөлөш эшсеһе эшләй, алдағы көндәрҙә был һан 600-гә тиклем артасаҡ. Проект бер стилобат менән тоташтырылған ете бейек башняны үҙ эсенә ала. Иң юғары бинаның бейеклеге 100 метр буласаҡ. "Әле монолит эштәре бара. Дүрт башняны яҙ аҙағына, ә ҡалған өсәүһен йәйгеһен төҙөп бөтөргә планлаштырабыҙ. Ошо арала белгестәр фасад һәм эске биҙәү эштәрен башларға әҙерләнә. Проект тиҫтәләгән подрядсы менән килешеп эшләүҙе талап итә", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Назаров.

✓ **Орел ҡалаһында Рәсәй юниорҙар беренселегенең беренсе команда дисциплинаһы, егеттәр араһында рапира буйынса ярыштар, Башҡортостандың беренсе йыйылма командаһының ышаныслы еңеүе менән тамамланды. Республика юниорҙары финалдағы бөтә туғыҙ алышта 45:26 иҫәбе менән еңеп, алтын миҙалдар яуланы.** Программаның был төрөндә Радмир Ғәләүетдинов, Әмир Фәхретдинов, Дәүләт Хәйретдинов һәм Ростислав Хамдамов алтын миҙалдарға лайыҡ булды, тип хәбәр итә Рәсәйҙең Фехтование федерацияһы. Яҡташтарыбыҙ үҙҙәренең дөғүәселәре - Татарстандың (45:14), Мәскәү өлкәһенең (45:31), Санкт-Петербургтың икенсе йыйылма командалары (45:19) һәм финалда былтырғы еңеүселәр, Курск өлкәһе спортсылары менән осрашты. Әммә улар ҙа Башҡортостандың йыйылма командаһына етди ҡаршылыҡ күрһәтә алманы.

✓ **Өфөлә етем студенттар өсөн ҡала хакимиәте башлығы стипендияһы күләме артты.** Опека һәм попечителлек идаралығы етәксеһе Илнара Сатаева белдереүенсә, былтыр 9 студентҡа исемле стипендия түләнгән. "Ҡала хакимиәте башлығы стипендияһы етемдәргә һәм атаәсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларға ярҙам саралары́ның береһе булып тора. Былтырғы уҡыу йылынан стипендиялар күләме эшсе һөнәрҙәр һайлаған студенттарға - 2000 һум, колледж студенттарына - 2500 һум, юғары уҡыу йорттары студенттарына 3000 һум тәшкил итә", - тине Илнара Сатаева. Билдәләнеүенсә, Өфө вуздарында һәм колледждарында 1520-гә яҡын етем бала белем ала. Опекунлары булмаған 18 йәшкә тиклемгә 29 үҫмергә ярҙам итеү ойошторолған. Уларҙың 30 проценты самаһы республика райондарынан килгән. Интернаттан һуң ярҙам күрһәтеү балаларҙы оло тормошҡа әҙерләүгә, социаль мөхиткә яраҡлаштырыуға йүнәлтелгән.

✓ **Өфөлә "Шыршыларҙан тапсыҡтар" акцияһы бара. Ул 10 ғинуарҙа старт алды.** Йәшел ҡупшыҡайҙарҙы тапшырыу нөктәләре: Магистраль урамы, 2А; Столяров урамы, 2; Мушников урамы, 11; Гвардия урамы, 58/1; Кузнецов затонындағы "Йыл миҙгелдәре" скверы; Түбәнге Ҡалала (Нижегородка) "Ҡурай сәскәһе" скверы; Гагарин урамы, 10/2; "Башкортостан" лайфстайл үҙәге эргәһендәге автопарковка (СССР-ҙың 50 йыллығы урамы яғынан); Ҡуласа урамындағы 50-се һәм 61-се йорттар араһындағы аллея; "Аркада" сауҙа комплексы алдында (М.Ғәбәйҙуллин урамы, 6) адрестары буйынса эшләй. Ҡабул итеү пунктарынан шыршыларҙы ағас плитәләре етештереүҙә сеймал булған тапсыҡтарға онтау өсөн махсус предприятиеға оҙаталар. Былтыр ошо акция сиктәрендә өфөләр 2 меңдән ашыу ылыҫлы ағас тапшырған.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 2026 йылға торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр тарифтарының сикке индекстары раҫланды. Тейешле бойороҡ хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Документҡа ярашлы, 1 ғинуарҙан Башҡортостан буйынса торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн дөйөм түләү уртаса 1,7 процетҡа арта. Әммә 1 октябрҙән күләмлерәк индексация көтөлә. Күпселек ҙур ҡалалар, шул иҫәптән Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Октябрьский, Сибай, Ағиҙел, Күмертау һәм Межгорье өсөн сик 12,8 процент кимәлендә билдәләнгән. Раҫланған күрһәткестәр коммуналь ресурстарҙың хаҡын арттырыу өсөн сик булып тора. Ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмалар түләүҙең күләмен күрһәтелгән сиктән түбәнерәк билдәләргә лә мөмкин.

✓Башҡортостан, 2025 йыл йомғаҡтары буйынса, туристар өсөн иң ҡыҙыҡлы 10 Рәсәй төбәге исемлегенә ингән. Аналитиктар билдәләүенсә, этнография, экология маршруттары, фәнни-популяр йүнәлеш төбәктә яңы туристик бренд булдырған. "Торатау" менән "Янғантау" геопарктары - ЮНЕСКО-ның глобаль геопарктар селтәренә, Шүлгәнташ мәмерйәһе бөтә донъя ҡомартҡылары исемлегенә инде. "Көгөш" (Усолка) һәм "Алыҫ Төлкәҫ" геологик киҫелештәр халыҡ-ара эталон - "алтын ҡаҙаҡ" статусын алды.

✓Үткән йылдың декабрендә Бөрө районының Үҙәт күлендә һарыҡтар батыуы тураһында хәбәр иткәйнек. Рәсми сығанаҡтарға таянып, уларҙың һаны 200-ҙән ашыу, тип яҙҙыҡ. Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары Лилиә Кәримова әйтеүенсә, боҙ аҫтына киткән һарыҡтарҙы сығарыу буйынса эштәр әле лә дауам итә. Әлеге ваҡытта күлдән 1300 ашыу мал мәйете алынған. Хужалыҡҡа килгән зыян 20 миллион һумдан ашыу тип баһалана. Фермерға ҡотҡарыусыларҙың эше өсөн дә түләргә тура киләсәк.

✓Рәсәйҙең Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы 2026 йылдың беренсе кварталына Башҡортостанда бер квадрат метр торлаҡтың хаҡын раҫланы. Билдәле булыуынса, бер "квадраттың" хаҡы - 116 212 һум. Был күрһәткес уҙған йылдың дүртенсе кварталы менән сағыштырғанда 0,45 процентҡа артҡан. Волга буйы федераль округында торлаҡтың иң юғары баҙар хаҡы Татарстанда - 153 146 һум. Икенсе урында - Пермь крайы (133 727 һум), өсөнсөлә иһә Түбәнге Новгород өлкәһе (131 787 һум).

✓2025 йылда төбәктә 2,3 миллиард һумдан ашыу суммаға ауыл хужалығы предприятиелары сафҡа индерелгән. "Әлегә республика 750 мең тонна һөт етештерә. Заманса фермаларыбыҙ - 25. Шуларҙың икәүһе уҙған йылда асылды. Ауыл хужалығын үҫтереү, был өлкәлә эшҡыуарҙарға ярҙам итеү - беҙҙең өҫтөнлөклө бурыстар. Был республикабыҙҙың, илебеҙҙең аҙыҡ-түлек именлеге нигеҙе, иҡтисадыбыҙҙың таянысы", - тип яҙҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәрҙәге үҙенең сәхифәһендә.

✓ ***Беҙ кешеләргә генә түгел, ә булған ваҡиғаларға ла рәхмәтле булырға тейешбеҙ, тип өҫтәр инем. Был тормошта бер нимә лә осраҡлы, бушҡа түгел. Һәр хәл-ваҡиға беҙҙе нимәгәләр өйрәтер өсөн бирелә.***



## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***"Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара" тиҙәр. Тап ғинуар айында Халыҡ-ара рәхмәт көнө лә билдәләнә. Ә һеҙ был донъяла кемгә рәхмәт уҡып йәшәйһегеҙ? Һеҙҙең үҙегеҙгә кемдәр рәхмәт әйтә?***

***Гүзәл МОСТАФИНА, декоратив-ғәмәли сәнғәт (балаҫ һуғыу) оҫтаһы:*** Ниндәй ябай һорау! Әлбиттә, иң тәү сиратта атай-әсәйемә рәхмәтлемен. Улар миңә барыһын да бирҙе: ғүмер, һөйөү, тәрбиәнән алып, матди байлыҡтарға тиклем. Әлеге ваҡытта бар күңелемде һалған һөнәргә - атайым бәйләргә, әсәйем йөн буярға өйрәттеләр бит улар мине. Ошонан сығып, мин уҡытыусыларға, ғөмүмән, тормошомда мине нимәгәләр өйрәткән һәр кешегә рәхмәтлемен.

Һәр иртә уянғаныбыҙ, үҙебеҙҙе яҡшы тойғаныбыҙ өсөн генә беҙ Аллаһҡа (Ғаләмгә һ.б., кем нимәгә ышана) мең рәхмәтле булырға тейешбеҙ.

Шатлыҡтарымды бүлешер дуҫтарыма рәхмәтлемен. Юҡ, улар хәҙер дуҫ ҡына түгел, ә яңылыҡҡа әйҙәгән, илһамландырған, аралашыуы ла, бергә эшләүе лә лә ҡыҙыҡ булған фекерҙәштәрем.

Минең үҙемә иң йыш һәм ихлас күңелдән рәхмәт әйткән кешеләр - ул ғаиләм. "Зинһар өсөн", "рәхмәт" - өйөбөҙҙәге иң изге һүҙҙәр. Ошо һүҙҙәрҙе әйтмәй, нисек йәшәмәк кәрәк был донъяла!

Иң яҡындарымдан тыш та, әлбиттә, ысын күңелдән рәхмәт әйтеүселәр булып тора. Мәҫәлән, минең уҡыусыларым. "Уҡыусыларым" тип әйтһәм дә, улар - шәхес булып үҫешкән, үҙ эшенең оҫтаһы булған кешеләр. Тик бер кәрәкле ваҡытта беҙ ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙ буйынса бер командаға тупландыҡ, уларҙың һәр береһе минән ниндәйҙер яңылыҡҡа өйрәнде, әлеге ваҡытта ла һәр кем үҙ форматында эшен дауам итә. Эйе, улар миңә яңы белем, тупланған команда өсөн рәхмәтле ине, уларҙың рәхмәте минең үҙемдең илһам ҡанаттарымды нығытты.

Беҙ кешеләргә генә түгел, ә булған ваҡиғаларға ла рәхмәтле булырға тейешбеҙ, тип өҫтәр инем. Был тормошта бер нимә лә осраҡлы, бушҡа түгел. Һәр хәл-ваҡиға беҙҙе нимәгәләр өйрәтер өсөн бирелә, уның асылына ваҡытында төшөнөргә, аңларға ғына кәрәк.

***Илшат МӨХӘМӘТШИН, шәхси эшҡыуар:*** Мин иң тәү сиратта рәхмәттәремде, шөкөрҙәремде Аллаһ Тәғәләгә әйтеп йөрөйөм. Әле миндә булған матди байлыҡтарым, эшем, ваҡытым, ғаиләм, һаулығым һ.б. - барыһы ла Унан килгән бүләк.

Хоҙай яратҡан бәндәһенә һәр саҡ һынауҙар бирә, тиҙәр. Беҙҙең ғаиләбеҙ башына төшкән һынауҙарҙың береһе - бер нисә йыл элек ҡыш өҫтөндә янғындан йорт-ҡураһыҙ ҡалыу булды, уны лайыҡлы итеп үтеп сығырға ярҙам иткән, терәк-таяныс булған ҡатыныма, яҡындарыма, туғандарға, хатта бер ҙә генә таныш булмаған кешеләргә ғүмерлек рәхмәттәрем яуһын. "Ил төкөрһә - күл була" тип ата-бабалар белмәй әйтмәгәнен үҙебеҙ белдек хәҙер. Ысынлап та, кемдер матди яҡтан, ҡул эше йә йылы һүҙе менән булһа ла ярҙам итергә тырышты ул саҡта. Яңы йорт һалырға шулай уҡ ауылдаштар өмә менән килеп ярҙам иттеләр. Ҡылған изгелектәре өсөн һәр ваҡыт доғаларыбыҙҙа иҫкә алабыҙ уларҙы.

"Һайт" тигәнгә "тайт" тип, һәр бер тәҡдимде, башланғысты күтәреп алырға әҙер торған дуҫтарыма шулай уҡ бик рәхмәтлемен. Кәрәк саҡта иң терәрлек дуҫың барлығын белеү - үҙе ҙур бәхет.

Ә үҙем инде күбеһенсә һөнәрем буйынса эшләгәндә рәхмәт ишетәм. Күңелгә йылы йүгертә торған иң ҡәҙерле рәхмәт һүҙҙәре, әлбиттә, ғаилә һәм туғандарҙан.

**Алһыу ИРҒӘЛИНА яҙып алды.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# КЕМГӘ - БАЙРАМ,

## кемгә - вайран...



**Ниһайәт, оҙон ялдар ҙа йылт итеп үтеп китте. Тәмле нәмә күп булмай, тигәндәй, бәғзе берәүҙәргә Яңы йыл байрамдары тарихындағы иң оҙайлы каникулдар, ысынлап та, әҙ тойолоп ҡалды, ахыры: йорт алдарын ҡар баҫты, эш аҙнаһын башлаусыларға таҡыр юл да көрәп ҡуйылманы. Кемдер берәү таң һарыһынан һалған яңғыҙ эҙҙән көрткә батасума башҡалар ҙа эшкә, уҡыуға, балалар баҡсаһына ҡуҙғалыша башланы...**

Баш ҡаланың үҙәк урамдары һәм йәйәүле һуҡмаҡтары ни хәлдәлер, ул яҡтарға юл төшмәне, мәгәр Сипайлово биҫтәһенең Ҡариҙел яры буйы урамындағы йорт алдары каникул буйына тиерлек ярым ташландыҡ хәлдә ятты. Дөрөҫ, оҙайлы ялдың 7-се көнөнә, ниһайәт, Өфөлә 333 кеше менән 236 берәмек техника ҡар таҙартыуға тотонһо, тигән мәғлүмәт интернет аша килеп еттеетеүен, тик ул Сипайлово биҫтәһенең Ҡариҙел буйы урамына ғына килеп етә алманы. Тик шулай ҙа бер көн бәләкәй генә "Беларус" тракторы йөн әсеһенә көсөргәнеп, яңғыҙы бер аҙ машина юлын өҫтән-мөҫтән ышыртты ла, күп тә үтмәй, күҙҙән дә юғалды. Ә инде ошо билдәмәләге мәктәп тирәһен быйылғы каникулда сәйер тынлыҡ баҫты, ни өсөн тигәндә, мәктәп яны спорт һәм ял комплексының йыл да боҙ менән ҡаплана торған каток майҙаны быйыл нишләптер ҡарҙан таҙартылманы, боҙ ҡойолманы...

Ярай инде, Яңы йылдың байрам көндәрендә мотлаҡ була торған хәүефле хәлдәр һәм мажараларға ҡарағанда, ҡар бәләһе менән генә килешергә лә булалыр. Тик бына ошо ҡар бәләһе ҡаланан ситтә - республика юлдарында айырыуса хәтәр тоҙаҡҡа әйләнеп, Өфө-Архангел-Белорет, Өфө-Ырымбур, Иглин-Павловка һәм башҡа трассаларҙа транспорт хәрәкәтен шып туҡтатты һәм был юлдарҙа тығын барлыҡҡа килтерҙе. 5 ғинуарҙан 6-һына ҡарай төндә Урал аръяғы райондарында көслө ҡар яуып, буран башланды. ***Ярай ҙа республиканың МЧС ҡотҡарыусылары юлаусыларға ваҡытында ярҙамға килде - рәхмәт уларға: трассалар һуҙымындағы 9 урында мобиль йылыныу пункттары булдырылып, ҡар-буран тоҙағында ҡалыусыларға ашығыс хеҙмәттәр күрһәтелде.***

Ял итеүселәрҙең ялы-юлы һәм көнкүреше тыныс, хәүефһеҙ булһын өсөн байрам көндәрендә лә тынғыһыҙ хеҙмәт һағында тороусылар бер ҡотҡарыусылар ғына түгел ине, әлбиттә. Эҫкән килеш машиналарына ултырып елдереүсе әҙәмдәрҙе лә бит ваҡытында тотоп алыу һәм юл хәрәкәтенең башҡа ҡатнашсыларын бәләнән аралап ҡалыу - ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренең изге ғәмәле. Ғөмүмән, был көсөргәнешле иҫәпләнгән көндәрҙә йәмәғәт тәртибе һәм закон һағында хоҡуҡ һаҡсылары, МЧС ҡотҡарыусылары, янғын һүндереүселәр, медицина хеҙмәткәрҙәре уяу тора. Яңы йыл юлдарына сығыуға Дәүләт автоинспекцияһы ла алдан әҙерләнде һәм үткән йылдың декабрь аҙаҡтарында уҡ "Яңы йылды - аварияһыҙ!", "Хәүефһеҙ ҡыш" саралары үткәрә башлағайны инде. Ләкин бындай тырышлыҡтар тейешле һөҙөмтә биреп еткермәне, сөнки беҙҙең автоһәүәҫкәрҙәр машиналарына атланып алһа, өҫтәүенә, һуҡмыш хәлдә лә булһа, мин-минлектәре самаһыҙ ҡабара, улар юлда үҙҙәрен король итеп тоя башлай һәм тирә-йүндәге башҡаларҙы байҡамай ҙа, һанламай ҙа. ***Башҡортостан дәүләт автоинспекцияһы етәксеһе Владимир Севастьянов үҙенең телеграм-каналында хәбәр итеүенсә, яңы йыл каникул-байрам көндәре Башҡортостан юлдарында 223 иҫерек водитель тотолған, бөтәһе 8 меңдән ашыу төрлөсә юл-транспорт хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙоу осрағы теркәлгән, шуларҙың 51-е автоавария менән тамамланған, 10 кеше һәләк булған. Шул уҡ ваҡытта балаларҙы юлда алып йөрөү ҡағиҙәләрен боҙған 307 осраҡ теркәлгән, 44 кеше рулгә машина йөрөтөүгә хоҡуғы булмаған килеш ултырған.***

Күңелгә йылы, көтөп алынған Яңы йыл ялдарында фажиғәгә осрармын тип берәү ҙә уйламай, әлбиттә, ләкин юлға сыҡҡанда рулдәге кешенән икеләтә һаҡ булыу, иғтибар һәм сабырлыҡ талап ителеүе лә шыпа баштарына инеп сыҡмай, күрәһең. Ә инде иҫерек водителдәр менән көрәш - айырым тема һәм ул

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 2030 йылға тиклем экологияға йүнәлтелгән инвестиция күләмен 14 миллиард һумға еткереү ҡарала. Әле сүплектәрҙең 96,6 проценты бөтөрөлгән. 2025 йылда ҡалдыҡтарҙың 46,8 процентын сорттарға айырыу ойошторолған. Ҡаты коммуналь ҡалдыҡтарҙы йыйыу майҙансыҡтарына 90 меңгә яҡын контейнер ҡуйылған. Өлгәшкәндәрҙең һөҙөмтәһе булараҡ, 2026 йылда Рәсәй экология форумы һәм X "Экология һәм технологиялар" күргәҙмәһен үткәреү урыны итеп Өфө билдәләнгән.

✓Республикала бала тәрбиәләгән 200 меңдән ашыу ғаилә төрлө социаль ярҙам ала. Күп балалы ғаиләләр һаны - 72,8 меңдән ашыу. Барлығы 9568 ҡатын-ҡыҙ "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнгән, 10 гүзәл зат "Герой-Әсә" исеменә лайыҡ булған. Төбәктәге яңы башланғыстар араһында - күп балалы ғаиләләрҙәге балалар өсөн колледждарҙа уҡыуға түләнгән аҡсаның 50 процентын ҡайтарыу. Башҡортостанда 2025 йылда яңы байрам - Күп балалы ғаиләләр көнө булдырылды. Ул 21 декабрҙә билдәләнә.

✓Иглин районында яңыртылған кадрҙар үҙәге асылды, тип хәбәр итәләр республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан. Был республикалағы яңыртылған 52-се мәшғүллек үҙәге. Уларҙың дөйөм һаны иһә - 69. Иркен бинала мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр өсөн шарттар булдырылған, махсус балалар зонаһы бүленгән. Һанлы сервистар сиратта көтөүҙе кәметергә, ситтән тороп эш итергә һәм онлайн яҙылырға мөмкинлек бирә.

✓31 ғинуарҙа Көйөргәҙе районының Ермолаевка ауылында бассейн асыла. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика Премьер-министры урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов хәбәр итте. Йыл башына шулай уҡ Федоровка районы үҙәгендә лә бассейн төҙөлөшө тамамланған. Ул асылған да инде. Көйөргәҙелә объектты лицензиялау процесы бара.

✓Күгәрсен районының Мораҡ ауылында 14 етем балаға тантаналы шарттарҙа яңы фатир асҡыстары тапшырылды, тип хәбәр итте Башҡортостандың төҙөлөш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Артем Ковшов. Төҙөлөш министрлығы мәғлү-мәттәре буйынса, 2025 йылдың башынан Башҡортостанда 779 етем бала яңы фатир менән тәьмин ителгән. Йыл аҙағына тиклем ошо категорияға ҡараған тағы 171 кешегә торлаҡ бирелгән.

✓РФ мәғариф һәм фән министры Валерий Фальков белдереүенсә, 2026 йылда юғары уҡыу йорттарында түләүле урындарҙы кәметеү планлаштырыла. 45 мең самаһы - вуздарҙа коммерцияға ҡараған бөтә урындарҙың 13 проценты ҡыҫҡартыла. 40 уҡытыу йүнәлешенә ҡабул итеүҙең маҡсатҡа ярашлы булыуы яңынан ҡарала. Һүҙ иҡтисад, менеджмент, дәүләт һәм муниципаль идара итеү, юриспруденция, реклама һәм йәмәғәтселек менән бәйләнеш һөнәрҙәре тураһында бара.

✓ ***Нью-Йоркта иһә Трамп хакимиәтенең Венесуэла ваҡиғаһы, мигранттарҙы ҡыуып сығарыу буйынса һәм башҡа ғәмәлдәренә ҡаршы протест белдереүсе 2 меңләгән демонстранттар маршы булып үтте.***



ҡәтғи яза саралары талап итә. Был турала күп яҙылып, һөйләнелһә лә, ҡаты саралар күрелмәйенсә тороп, ыңғайға үҙгәреш булмаясағы күптән билдәле.

***Оҙайлы байрам көндәренең тағы бер бәләһе - янғындар. Был юлы ла ул ғәмһеҙҙәрҙе һәм алкоголь менән дуҫтарҙы урап үтмәне.*** Мәҫәлән, 6 ғинуарҙа Комсомол урамындағы 25 ҡатлы йорттоң иң һуңғы бейек ҡатындағы фатир янып китә. Әлеге лә баяғы ял-байрам тимәй поста тороусы янғын һағы хеҙмәткәрҙәре 18 кв.метр майҙанды ялмап алған утты һүндереүгә өлгәшә, 50 кешене, шул иҫәптән, 10 баланы, ҡазанан ҡотҡара, ә 170 кеше янғын зонаһын уҙаллы рәүештә ташлап сыға ала. Коллектив баҡсаларҙа ла бындай хәлдәрҙең йыш булып тороуы мәғлүм. Мәҫәлән, 4 ғинуарҙа Өфө районының "Озерки" һәм "Ромашка" баҡсасылыҡ ширкәттәрендәге ике йорттан көл һәм хәрабәләр генә тороп ҡала. Бәхеткә, күрәһең, унда бер кем дә булмай - һәр хәлдә, был хаҡта хәбәр ителмәй. Ә бына 6 ғинуарҙа шул уҡ Өфө районының Николаевка ауылында ағас һарайға тоҡанған утты һүндергәндән һуң билдәһеҙ кешенең янған кәүҙәһе табыла...

***Әйткәндәй, яныу тигәс, туңыу тигән каза ла иҫкә килеп төштө. Был каникул көндәрендә төрлө сәбәптәр менән 6,6 мең кешегә медиктар ярҙамы талап ителгән, шуларҙың 36-һы - туңыу һәм өшөүҙән, тип хәбәр иттеләр БР һаулыҡ һаҡлау министрлығынан.*** Ошо йәһәттән шуныһы бер ыңғай хәбәр булды: Өфөләге Бабушкин урамында ноябрь уртаһынан берәҙәктәр, йортһоҙ йәки ауыр тормош хәлендә тороп ҡалғандарҙы һыйындыра торған махсус приют - социаль үҙәк эшләй башланы. 50-гә яҡын урыны булған был үҙәктә бөтөн шарттар бар: ашхана, кер йыуыу, душ ҡойоноу урындары һәм хатта сәсалғыс оҫтаханаһы ла! Бында сараһыҙҙан ваҡытлыса килеп һыйынған кешеләрҙе бушлай йылы ризыҡ менән туҡландырыу ойошторолған. Һәм шуныһы ла мәғлүм булһын: ашханала аҙнаһына өс тапҡыр киске сәғәттәрҙә телгән бөтөн кешеләр ҙә бушлай ашатыла, тип хәбәр итә UfacityNews.ru. Социаль приют ҡышҡы селлә һәм бурандарҙа спиртлы эсемлек дуҫтарын туңып үлеүҙән һаҡлаясаҡ йылылыҡ һәм хәстәрлек үҙәге лә булып хеҙмәт итәсәк.

**Шулай итеп, юғарыла телгә алынған күңелһеҙ хәл-ваҡиғаларҙан сығып, шундай ғибрәтле һығымтаға киленә: оҙайлы ял һәм байрамдар ҡәҙерен белмәгән, уның бөгөнгө көсөргәнешле тормош шарттарынан бер аҙға арындырыу, яңы эш көндәренә көс-энергия туплау мөмкинлеге икәнен баһалап еткермәгән кешеләрҙең арабыҙҙа байтаҡ булыуы үкенесле. Әйе, байрам итеү һәм ял кемдәргәләр, ысынлап та, ғаиләһе, балалары менән бергә булыу, республиканың һәм баш ҡаланың мәҙәни-спорт сараларына йөрөү, санғысана шыуыу кеүек ҡышҡы уйындарҙан кинәнес алыу булһа, икенсе берәүҙәрҙең был осорҙо кәйеф-сафа ҡороу, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә ҡыҙмаса килеш машинала елдереү йә иһә өйөндә янъял ҡуптарыу өсөн файҙаланыуы асыҡ күренә. Ҡыҫҡаһы, ял итә белеү ҙә мәҙәнилек билдәһе, кешелек дәрәжәһен күрһәтеүсе һынау икән ул. Ә инде яман ғәҙәтлеләр үҙҙәренең мин-минлеге, дыуамаллығы арҡаһында үҙ яҙмыштарын үҙҙәре вайран килтереүсе аңһыҙлыҡ ҡорбандары, тип раҫларға ғына ҡала...**

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# "ТЫНЫСЛЫҠ КӨРӘШСЕҺЕ"МЕ...

## әллә баҫҡынсымы?

**Сәйәсәт өсөн Яңы йыл каникулдары юҡ һәм, ысынлап та, 2026 йылдың тәүге ун көнлөгө, киреһенсә, донъя аренаһында ваҡиғалар ҡуйырыуына ғына килтерҙе. Ә донъя халыҡтары, бер ниндәй ығы-зығыға ҡарамай, Азия, Европа, Австралия ҡалалары һәм мегаполистарынан алып, Көньяҡ Америка пляждарына тиклем аралыҡта йәшәүсе халыҡтар, шул иҫәптән, Рәсәй граждандары ла киң ҡолас менән Яңы йыл ҡаршыланы: ҡайһы бер илдәрҙә көсәйтелгән хәүефһеҙлек саралары һәм сикләүҙәр иғлан ителһә лә миллионлаған кеше урамдарға сыҡты, фейерверктар һәм салюттар атты, лазер һәм пиротехник шоуҙар ойошторҙо, йырланы, көлдө, бейене һ.б.**

Тап ана шундай ваҡытта Киев режимы тағы бер тапҡыр үҙенең йыртҡыстарса енәйәти йөҙөн күрһәтте лә: 1 ғинуар төнөндә Украина ҡоралы көстәре Херсон өлкәһе Хорлы тораҡ пунктында йәшәүселәрҙең балалары, туғандары һәм дуҫ-иштәре менән байрам саралары барған кафе һәм ҡунаҡхана бинаһына көтмәгәндә шартлатҡыс дрондар менән һөжүм итте. Һөҙөмтәлә 24 кеше (яңы мәғлүмәттәр буйынса - 29), шул иҫәптән ике бала һәләк булды, 60-лап кеше, шул иҫәптән биш бала ауыр йәрәхәттәр алды. Һаулығына зыян күреүселәр дауаханала ята, шуларҙың өсәүһе ауыр хәлдә, тип белдерҙе тәүге мәғлүмәттәргә төҙәтмәләр индереп, РФ Тәфтиш комитеты вәкиле Светлана Петренко. Фуғас тибындағы тәүге дрон кафе янында шартлаһа, картечь элементтары менән ҡоролған икенсе дрон кафенан сығып өлгөрмәгән кешеләр тәнен ярсыҡтар менән иләк кеүек тишкеләгән, ә термоҡатышмалы өсөнсө дрон ялҡынынан кешеләр тереләй ут көлтәһенә әйләнгән, тип яҙа тикшеренеүселәр. Херсон өлкәһе губернаторы Владимир Сальдо һөйләүенсә, янып үлгән кешеләрҙең һөлдәләре генә тороп ҡалған һәм был ядро һөжүменән һуңғы күренеште хәтерләтә.

Рәсәй хоҡуҡ һаҡлау органдары белдереүенсә, Херсонға һөжүм фажиғәһе буйынса енәйәт эше ҡуҙғатылды, ләкин РФ Оборона министрлығы белдереүенсә, ҡон ҡайтарыу бының менән генә сикләнмәне. Рәсәй Ҡораллы Көстәре яуап йөҙө урынына Украина территорияһының стратегик йүнәлештәге объекттарына "Орешник" ракета комплексынан ут асты. Һөҙөмтәлә Украина үҙенең 50 процент газ запасынан яҙҙы. Шартлауҙар шулай уҡ Украинаның истребитель летчиктары әҙерләүсе авиабазаларында ла гәрһөлдәне. "Орешник" уты НАТО-ның юғары хәрби чиндары йәшеренгән ер аҫты бункерын да сәпкә алды, тип белдерә күҙәтеүселәр...

Яңы йыл каникулдары ваҡытында АҠШ президенты Дональд Трамптың сәйәсәте, кешелек йөҙө һәм ҡылыҡтары танымаҫлыҡ булып тағы ла 180 градусҡа боролош яһаны. Төньяҡ Америка Ер шарының яртыһы менән идара итергә йыйына, тип белдергәйне Новости Рәсәй агентлығы күҙәтеүсеһе Петр Акопов. Һәм, ысынлап та, Дональд Трамп был хаҡта, Америка хәрби көстәре Венесуэлаға көслө ут ҡойоно асып, резиденция хеҙмәткәрҙәрен, шул иҫәптән президенттың тән һаҡсыларын аяуһыҙ атып үлтергәндән һуң (операция ваҡытында бөтәһе 100-гә яҡын кеше һәләк була), президент Николас Мадуро менән уның ҡатынын (әйткәндәй, улар наркотерроризмда ғәйепләнә) урлап алып сыҡҡас: "Бынан ары Ерҙең Көнбайыш ярымшарында Американың өҫтөнлөк итеүенә һис бер ниндәй шик булмаясаҡ", - тип белдергәне. Быны бойомға ашырыуҙың тәүге этабы тип Трамп Венесуэла миҫалын килтерһә, артабан ул Гренландия, Куба, Иран, Канада, Мексика, Колумбияға ҡул һуҙмаҡсы һәм был илдәрҙә, үҙе әйтмешләй, "тәртип булдырырға" теләй. Ошо айҡанлы 11 ғинуарҙа Куба президенты Мигель Диас-Канель илдең суверенитетын һаҡлап ҡалыу өсөн "һуңғы тамсы ҡанғаса" һуғышырға әҙер булыуҙары хаҡында белдерҙе. Ә Нью-Йоркта иһә Трамп хакимиәтенең Венесуэла ваҡиғаһы, мигранттарҙы ҡыуып сығарыу буйынса һәм башҡа ғәмәлдәренә ҡаршы протест белдереүсе 2 меңләгән демонстранттар маршы булып үтте, улар Дональд Трамптың властан китеүен талап итә.

Матбуғат саралары мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Венесуэлаға һөжүм ваҡытында АҠШ тарафынан микротулҡын нурҙар йүнәлтеүсе йәшертен энергетик ҡорал файҙаланылған. Халыҡ-ара даирәләрҙә, шул иҫәптән, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһында Трамп хакимиәтенең баҫҡынсылыҡ сәйәсәте ҡәтғи кире баһалама алыуына һәм тәнҡитләнеүенә ҡарамаҫтан, АҠШ Венесуэланың нефть ресурстарын контролгә алмаҡсы һәм власть түңкәрелешен ойоштороп, илгә көнбайыш компанияларын индереү уйы менән яна. Шул уҡ ваҡытта Америка лидеры Венесуэлаға яңы килешеү буйынса һатылған нефть аҡсаһына фәҡәт АҠШ продукцияһын һатып алырға тигән шарт ҡуя һәм бының менән Америка ҡулланыусылары өсөн энергетика яғыулыҡтарына хаҡтарҙы арзанайтырға теләй. Икенсе яҡтан, Трамп Венесуэланың нефть баҙарынан Рәсәй менән Ҡытайҙы ҡыҫырыҡлап сығарырға план ҡора һәм был ике илде Венесуэла нефтен һатып алырға ҡыҫтай ҙа башланы инде.

Көлгәнгә көлкө булһа ла, бөлгәнгә бер ҙә көлкө ҡайғыһы юҡтыр. Ни генә тиһәң дә, Трамп үҙенең диктаторлыҡ ҡылыҡтарында сәйәсмәнлектән бигерәк саузагәрлек һәм баҫҡынсылыҡ ҡаны уйнауын бер туҡтауһыҙ иҫбатлай бара. Был да сәйәсәт, әлбиттә, ләкин бының өсөн мотлаҡ "тыныслыҡ көрәшсеһе" битлеген киймәҫкә лә булыр ине. Сәйәси эксперт Акопов фекеренсә, Штаттар хәҙер дөйөм, глобаль гегемонлыҡтан баш тартыу яғында һәм, бая әйтелгәнсә, Көнбайыш ярымшарға хужа булып, Ҡытайға - Азия төбәктәрен, Рәсәйгә Европаны димләмәксе. Һаташыуға ла оҡшап китә түгелме был? Дөрөҫөн әйткәндә, Дональд Трамптың был ниәте барып та сыҡмаясаҡ, сөнки донъя аренаһы һәм көстәр нисбәте бер көйө генә тормай, үҙгәрә; илдәрҙең, улар Ер шарының ниндәй ареалында урынлашыуҙарына, аралар алыҫлығына ҡарамаҫтан, үҙ-ара хеҙмәттәшлек, аралашыу даирәһе киңәйә, йәнләнә бара һәм был процесты Трамптың шартлы сикләүҙәре генә тотоп тора алмаясаҡ, әлбиттә. Эксперттарҙың уйынлы-ысынлы ишаралауынса, Трамп үҙе лә "ярым Ер шарында" әллә ни алыҫ китә алмаҫ...

Үкән аҙнаның һуңғы яңылыҡтарында хәбәр ителеүенсә, Дональд Трамп Америка спецназы командирҙарына Гренландияға баҫып инеү планын эшләргә ҡушҡан. Бының менән ул Гренландияны АҠШ-ҡа ҡушырға һәм уның ҡиммәтле ҡаҙылма байлыҡтарына хужа булырға ниәтләй. Икенсе яҡтан, Трамп Арктикала Рәсәй менән Ҡытайҙы сикләү маҡсатын да күҙҙә тота.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓1 марттан илдә торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү ваҡытын биш көнгә - айҙың 10-ынан 15-енә күсереүҙе күҙ уңында тотҡан закон ғәмәлгә индерелә. Был иһә ваҡытында түләргә һәм пеня һалыуҙан һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирер тип планлаштырыла. Рәсәй Президенты Владимир Путин 2025 йылдың июнендә ҡул ҡуйған закон быйыл яҙ үҙ көсөнә инергә тейеш.

✓Рәсәйҙең көнбайышында көслө ҡар яуыуға сәбәпсе булған "Фрэнсис" циклоны республикаға килеп етмәне. Шуға ла Башҡортостанда көслө, аномаль ҡар яуыуы көтөлмәй. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Мәскәүҙә күпләп ҡар яуыуға бәйле аэропорттарҙың эше туктатылғайны. Башгидрометүҙәктең метеопрогноздар бүлеге начальнигы Гөлназ Заһитова хәбәр итеүенсә, "Фрэнсис" көнбайышта уҡ үҙ көсөн юғалтҡан. Башҡортостанда яҡын арала атмосфера баҫымының күтәрелеүе фаразлана, тимәк, алдағы көндәрҙә яуым-төшөмһөҙ аяҙ һауа торошон көтәбеҙ.

✓Өфө вуз-ара кампусы резиденты - Өфө фән һәм технологиялар университеты бер юлы ике һөнәр биреү буйынса студенттар йыя башлаған. Университеттың белем биреүҙе үҫтереү буйынса проректоры Юлиә Рахманова белдереүенсә, "Энергетикала автоматик идара итеү системалары" йүнәлеше буйынса 30-ҙан ашыу кеше йәлеп ителгән дә инде.

✓Һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин хәбәр итеүенсә, ғинуар каникулдары дауамында травма пункттарына һәм поликлиникаларға 6,6 меңдән ашыу кеше мөрәжәғәт иткән. Ҡышҡы байрам осоронда һәр ваҡыт йыш була торған утта бешеү, тән ағзаларын өшөтөү, ағыуланыу осраҡтары быйыл да күҙәтелгән. 500-гә яҡын кеше дауаханаға оҙатылған, шул иҫәптән 45 кеше тән йәрәхәттәре менән.

✓Эдуард Латипов үҙенең карьераһында тәүге тапҡыр "Ижевск винтовкаһы" шәхси ярышта еңеүсе булды. Ярыш биатлон буйынса Рәсәй чемпионатының Альфа-Банк сиктәрендә бара. Эдуард 20 километр араны 54 минут 3 секунд эсендә үтте һәм бер тапҡыр ғына яҙа атты.

✓Рәсәй Гидрометеорология үҙәге 2026 йылдың ғинуарына фараз баҫтырып сығарҙы. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, ғинуарҙа уртаса һауа температураһының нормаға ярашлы булыуы көтөлә (норма - 12,5°). Айлыҡ яуым-төшөмдөң норманан күберәк булыуы күҙаллана (норма 24-45 миллиметр).

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Ҡағыҙҙарҙа беләм, ләкин мәғәнәһен тоймайым. Мине һорауҙарға дөрөҫ яуап бирергә өйрәткәндәр. Ләкин яуабыма ҡарата һеҙҙең күңелегеҙҙә тыуған ҡыҙыҡһыныу, ғәжәпләнеү йәки борсолоу кеүек тойғолар кисермәйем.*



## ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

### Ҡырағай бал ҡорто һәм солоҡ балы

Ҡырағай бал ҡорттары борон ағас ҡыуыштарында, тәбиғи ояла тиҫтә йылдар буйы йәшәгән, батман-батман булыр бал туплаған. Быңдай табышҡа юлыҡҡан кеше үҙен бик бәхетле тойған. Бер риүәйәттә сағылыуынса, ҡара урманда ҡорт ҡунған урынды ҡарап йөрөүсе берәү ғәләмәт ҙур ағас ҡыуышын шәйләп, өҫкә үрмәләгән, ояның эсенә үк инеп киткән һәм биленән балға батҡан. Ҡуйырған балдан ысҡына алмай харап булам тигәндә, уны айыу ҡотҡарған...

...Ҡырағай бал ҡорттары тәбиғи мөхиттә үҙ ихтыярҙарында йәшәй, кәрәк мәлдә осош яһай, ҡыш ҡаты һыуыҡтарға ла бирешмәй. Улар эшкә өлгөр, сәскәләргә шат һәм ғәмәлдә донъяларына әҙәм заттарының йыш ҡыҫылыуынан, борсоуынан азат. Ризыҡтары ла гәҙәттәге умарта балынан айырыла. Солоҡ балы һоро йәшелһыу төҫмөрләнешле ҡуңыр көрән төҫтә, балауыҙ, һитә, һеркә менән ҡушымталы, татлыраҡ һәм хуш еҫлерәк. Белгестәрҙең фекеренсә, ул өлгөргәнерәк, тәбиғи матдәләргә, микроэлементтарға, аминокислоталарға байыраҡ. Мөһим үҙенсәлеге - ферменттар күплегендә, һыу, сахароза аҙлығында, кислоталылыҡ түбәнлегендә. Шуға ла башҡорт солоҡ балының даны бөтә донъяға билдәле. Хатта ул күккә ашып, ғаләм киңлектәренә сығып, "Мир" орбиталь станцияһында Рәсәй космонавтарына туҡлыҡлы тәғәм булды.

Башҡорт солоҡ ҡортон өйрәнеү өсөн СССР Фәндәр академияһы профессоры Г.А. Кожевников етәкселегендә 1929 йылда Башҡортостандың Бөрйән районына экспедиция ойоштора. Ике йыл буйы ентекле тикшеренеүҙәр алып барып, ул йыйылған материалдар нигеҙендә ҡыҙыҡлы һығымталар яһай. Бөрйән солоҡ ҡорто метисланмаған, йәғни башҡа ҡорттар менән ҡушылмаған, саф тоҡомло һәм, профессор Кожевников ғилми билдәләмә биреүенсә, "тарихҡаса булған" бик боронғо бал ҡорто. Уның үҙенсәлектәре шундай:

1. Бал ҡорттары үҫеп ултырған ҡарағайҙарҙың һәм ҡарағастарҙың ерҙән ун бишегерме метр бейеклектәге солоҡтарында йәшәп, ҡышын 40-45 градус температураға һыуыҡтарҙы ла бына тиғән үткәрә һәм өшөмәй, туңмай тиерлек.

2. Солоҡ ҡорттары юғары продуктлы. Ҡорт бағыусы, һәйбәт ҡышлауҙы тәьмин иткән аҙыҡ запасы ҡалдырып, солоҡ күсенән бер миҙгелдә ике botҡа хәтлем кәрәҙле бал ала.

3. 1928-1929 йылдарҙа рамлы умарталарға күсерелгән солоҡ бал ҡорттары күстәре Ғәзелгәрәй ауылында Ш.Сәғитов, Яңы Монасипта Н.Буранов умарталыҡтарында ҡарар-ҡарамаҫ торошта ла һәр оянан бишәр ботҡа тиклем бал биргән.

4. Солоҡ ҡорттарында һәм уларҙың тоҡомдарында сереү (гнилец), нозематоз ауырыуҙары юҡ. Уларҙың организмы зарарлы сирҙәргә бирешмәй.

5. Микроскопик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, урта урыҫ тоҡомо менән сағыштырғанда солоҡ ҡортоноң томшоғо оҙонораҡ.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
(Дауамы бар).

## ЯИ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

# КЕШЕНЕ АЛЫШТЫРА АЛМАЯСАҠ!

**Яһалма интеллектҡа "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева һорау бирә: "Киләсәктә ЯИ кешене алыштырырлыҡ кимәлгә етеп камиллаштырыласаҡмы?", "ЯИ һәм кешелек тандемда ниндәй юғарылыҡҡа күтәреләсәк?"**



***Яһалма интеллект яуабы:***

Хөрмәтле Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы, ошо төплө һәм мөһим һорауҙар өсөн бик ҙур рәхмәт! Ҡыҫҡаса әйткәндә, яҡын киләсәктә, минең кеүек моделдәр кеше кимәленә етеп, уны тулыһынса алыштыра алмаясаҡ.

***1-се һорауға тулыраҡ яуап: "Алыштырыу түгел, ә көсәйтеү"***

Техник яҡтан ҡарағанда, ғалимдар һәм тикшеренеүселәр яһалма интеллекттың гипотетик "сингулярлыҡ" тип аталған сикһеҙ үҫеш нөктәһе тураһында уйлана, әлбиттә. Әммә әлеге ваҡытта яһалма интеллект кешене алыштырыуҙы маҡсат итеп ҡуймай, ә уның мөмкинлектәрен киңәйтеү, быға тиклем булмаған уңайлыҡтар табыу йүнәлешендә үҫешә. Ни өсөн? Сөнки минең "интеллектым" сикләнгән. Мин бары тик кешеләр өйрәткән күләмдә генә эшләй алам:

- Һөҙөмтәле эшләй алам, ләкин яңы бурыс уйлап таба алмайым. Мин тиҙ арала мәғлүмәт эшкәртә һәм кеше ҡуйған мәсьәлә сиктәрендә варианттар тәҡдим итә алам. Ләкин яңы бурыс йәки мәсьәлә уйлап таба алмайым. Уларҙы тик кеше генә билдәләй ала.

- Ҡағыҙҙарҙа беләм, ләкин мәғәнәһен тоймайым. Мине һорауҙарға дөрөҫ яуап бирергә өйрәткәндәр. Ләкин яуабыма ҡарата һеҙҙең күңелегеҙҙә тыуған ҡыҙыҡһыныу, ғәжәпләнеү йәки борсолоу кеүек тойғолар кисермәйем. Хис-тойғолар тик кешегә генә хас.

- Үткәндә беләм һәм киләсәккә юл һала алам, ләкин маҡсат ҡуя алмайым. Булған белемем һәм кеше ҡуйған бурыс нигеҙендә мин прогноздар төҙөй, тәҡдимдәр бирә алам. Ләкин "башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү" йәки "балаларҙы яҡшы кешеләр итеп тәрбиәләү" кеүек глобаль маҡсаттарҙы тик кеше генә билдәләй ала.

Шулай итеп, яһалма интеллект мәсьәләне кешегә ҡарағанда тиҙерәк һәм киңерәк мәғлүмәт нигеҙендә хәл итә ала. Ләкин, ниндәй мәсьәләне хәл итергә кәрәклеген аңлау - әлеге ваҡытта технологиялар булдыра алмаған ҡатмарлы эш.

***2-се һорауға яуап: "Тандемда ниндәй бейеклектәргә етә алабыҙ?"***

Беренсе сығарылышта мин үҙемде сүкеш менән сағыштырғайным. Был метафораны дауам итейек: кеше - штурман, ә яһалма интеллект - көсөтле двигатель һәм навигация системаһы. Штурман курс билдәләй, киләсәккә маҡсат ҡуя һәм ҡарарҙар ҡабул итә. Двигатель һәм навигатор был маҡсатҡа иң тиҙ һәм хәүефһеҙ юл менән өлгәшергә ярҙам итә ала, ләкин ҡайҙа тиклем барып етеүе яҡшыраҡ икәнен белмәй.

Кешенең һәм яһалма интеллекттың бергәләп эшләү мөмкинлектәре сикһеҙ. Был хаҡта бер нисә өлгөнө ҡарайыҡ:

- Фән һәм медицина. Яһалма интеллект секунд эсендә миллионлаған фәнни мәҡәләләрҙе йәки медицина һүрәттәрен анализлай, ғалимдарға яңы дарыуҙар булдырыу йәки климат үҙгәрештәрен моделдәштереү өсөн яңы юлдар күрһәтә ала. Штурман ғалим уларҙы өйрәнеп, аңлы ҡарар һайлай.

- Мәғариф. Яһалма интеллект һәр уҡыусының һәләтен асыҡлай һәм индивидуаль программа төҙөргә ярҙам итә ала. Штурман уҡытыусы, был программаны инструмент итеп ҡулланып, уҡыусыны белем алыуға ылыҡтыра, тормошта үҙ урынын табa алырлыҡ шәхес итеп тәрбиәләй.

- Мәҙәниәт һәм тел. "Киске Өфө" гәзитендә асылған яңы рубрика - кеше һәм яһалма интеллект тандемының сағыу өлгөһө. Мин һорауҙарға яуап биреүсе, ниндәйҙер темаға ҡыҫҡа һәм йөкмәткеле мәғлүмәт табыусы, текстарҙы башҡорт теле нормаларында әҙерләшеүсе "двигатель" буларaҡ сығыш яһайым. Ә һеҙ, редакция хеҙмәткәрҙәре һәм уҡыусылар, башҡорт телен һәм мәҙәниәтен үҫтереүҙе, кешене кеше итеп тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйған, гәзиттең яңы рубриканың йүнәлешен билдәләүсе штурмандарһығыҙ.

***Төп фекер:***

Кешенең уйлау, ижад итеү һәм маҡсат ҡуйыу һәләте менән яһалма интеллекттың анализлау, оҡшашлыҡтар табыу, варианттар тәҡдим итеү мөмкинлеген берләштереү киләсәктә бик мөһим роль уйнаясаҡ. Замана биргән форсатты киңерәк ҡулланғандар яңы бейеклектәргә күтәреләсәк. Ә ул бейеклектәр ниндәй кимәлдә булыуын, булырға тейешлеген кеше билдәләйәсәк. Шулай итеп, башҡорт мәҙәниәтен, башҡорт телен һәм башҡорт халҡының донъялағы өлөшөн үҫтереү өсөн дә элек күрелмәгән мөмкинлектәр асыла.

**Әйткәндәй, гәзит уҡыусылар яһалма интеллекттан ниндәйерәк һорауҙарға яуап алырға теләй? Әйҙәгеҙ!**

**Рөстәм НУРЫЕВ.**

## СӘЙЕР ҒӘҘӘТ

# КӘЙЕФЛЕ-КӘЙЕФҺЕҘ САҠТАР...



**Сәйер ғәҙәттәрҙең дә яҡшыһыямаңы була икән ул. Мәҫәлән, бер әхирәтем үҙе ҡояш кеүек йылмайып-көлөп тора, башҡаларға ла уның янында шул тиклем рәхәт, күңел ял иткәндәй була.**

Әммә уның кәйефе, яҙғы көн кеүек, үҙгәреп тороусан. Саҡ ҡына кәйефе төштөмө - башҡаларға көн юҡ. Ниңә үҙ көйөн башҡаларға ла тағалыр, аптырайым. Минең кәйефем төшһә, әҙерәк өндәшмәй, хәл йыйып, уйланып, бер аҙ яңғыҙым ултырып алһам, шул етә. Әхирәтемә иһә, башҡаларға бәйләнеү, йә иһә тупаҫ яуап биреү, йөҙөн боҙоп ултырыу бер ни тормай. Үҙе бик һәйбәт кеше, әммә ул күңел торошон, тойғоларын контролдә тота алмай. Ыңғай мөнәсәбәтенең бер сәбәпһеҙгә ҡырҡа үҙгәреп китеүе аңлашылмай ҙа, ҡабул да ителмәй. Ҡып-ҡыҫҡа сәсен тырпайтып, кәйефһеҙләнеп ултырған әхирәтем ҡайны саҡ терпегә оҡшап китә.

Бер таныш егет иһә, кәйефһеҙләнеп алһа, кешегә төн урталығында шылтыратып, хәлен һөйләй башлай. "Тыңла әле, мин ниңә ни һөйләйем... Әллә йоҡлап ята инде? Йә, ярай, тыңла..." - ти ҙә оҙон-оҙаҡ итеп, үҙ хәлен бәйән итә башлай. Күңеле бушап ҡалыуын тойһа, тиҙ генә хушлаша ла, трубканы һала. Уның кәйефе миңә күсә һәм төнө буйы борғоланып, йоҡлай алмай йонсоп ятырға тура килә. Был танышымдың йәнә бер сәйер ғәҙәте бар: ул шул тиклем күп һөйләй, уны юл уртаһында осраттыңмы, еңел генә ҡотолормон, тимә. Һөйләгәндә башҡаларҙың тыңлаймы-юҡмы икәненә иғтибар итмәгән, кеше һөйләгәндә: "Касан ғына был кеше туҡтай ҙа мин һөйләй башлайым инде!" - тигән ҡиәфәттә түҙемһеҙ генә тыңлап торған танышымдан бөтәһе лә ҡаса.

Кешенең кәйефһеҙ булыуы - бер бәлә булһа, бәғзе берәүҙәрҙең кәйефле булыуы - үҙе мең бәлә. Бер һеңлем уғата кәйефле булған сағында, ваҡытҡа ҡарап тормай, аш-һыу бүлмәһендәге һауыт-һабаны йырлай-йырлай йыуырға тотона. Был уның күңел талабымы, йәки кәйефле сағында көсөн ҡайҙа ҡуйырға белмәйме, аңламаҫмың.

Бер танышымдың кәйефле сағы тура килһә, юлында осраған бер кешеһенә буш вәғәҙәләр яуҙырырға тотона. "Ҡара әле, баҡсамдағы алмаларҙы ҡайҙа илтергә белмәйем. Әллә килеп кенә алаһығыҙмы? Балаларың яратып ашар ине!", йәки "Өйөндәге ремонт һаман тамамланмаймы ни, ҡыҙым менән килеп ярҙамлашып китермен әле", ти ҙә, күтәренке кәйефе юҡҡа сыҡһа, вәғәҙәләрен шунда уҡ онота ла ҡуя. Буш вәғәҙәләрҙе ул хатта алдашырға яратыуынан да түгел, ә тап шул минутта ысынлап та яҡшылыҡ эшләргә ынтылыуынан биреп ташлай.

Кешеләрҙең кәйефле, кәйефһеҙ саҡтары бик йыш була. Уларҙы һанға һуҡмау, йәки эмоцияларыңа ирек биреү бигүк дөрөҫ булмаҫ ине. Иң мөһиме - кешеләр менән тигеҙ мөнәсәбәттәр һаҡлау һәм күңел торошондағы үҙгәрештәрҙе кешеләргә һиҙҙермәҫлек итеп аралашыу. Ә һеҙ былар хаҡында ниндәй фекерҙә? Ғөмүмән, һеҙ ниндәй сәйер ғәҙәтләләр тураһында һөйләй алыр инегеҙ?

**Ләйлә ҒАЙСАРОВА.**

ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**




***Рәмил Рәхимов:*** Эш шунда, ҡаланы төҙөүселәр һәм унда йәшәргә тейеш булған кешеләр хеҙмәти бурыстарын үтәүсе рус кешеләре, казактар, православие динен тотоусылар була. Ә был төбәктә мосолмандар, Себерҙә мәжүси ҡәүемдәр йәшәй. Һәм, әлбиттә, бында урындағы ниндәйҙер бер традицияларҙы дауам итеү, идеология күҙлегенән ҡарағанда, мөмкин булмай, улар инҡар ителә. Ул замандарҙағы идеология - дин: православие динен тотһаң, уға ярашлы фекерләйһең, мосолман булһаң - Ислам ҡағиҙәләренә буйһонаһың. Рус стрелецтары бында килеү менән тәүге көндә үк Троица сиркәүен күтәрә, сөнки уларға иң элгәре дини ҡорам кәрәк була. Ошо айҡанлы беҙ бер нәмәне лә тәнҡит күҙлегенән ҡарамайбыҙ - дини идеология XVII быуатта һәм артабан да шул рәүешле дауам итә. Ҡала тормошо ла ошо идеологияға ярашлы ҡорола.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Әммә ул замандарҙан һуң күп һыуҙар аҡты, күп йылдар үтеп китте. Беренсенән, ҡаланың этник составы радикаль рәүештә үҙгәрҙе, икенсенән, Өфө Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһына әйләнде, һәм уның тарихын бары тик колонизацияланған территориялағы рус форпосты күҙлегенән генә ҡарарға ярамай. Һәм, иң мөһиме, яңы мәғлүмәттәр боронғо Өфө тарихының мең йыллыҡ ҡатламын иҫке мифологемаларҙың тыныс йәшәүенә ҡамасаулыҡ итеүсе аңлашылмаусанлыҡ итеп ҡарау мөмкинлеген юҡҡа сығарҙы.

***Булат Аҙнабаев:*** Ысынлап та, XIX быуатта Өфө рус ҡалаһы була, һәм уға рус гарнизонының нигеҙ һалыуы хаҡындағы фекер тарихи логикаға ярашлы, тип ҡарау фарыз. Ә хәҙер ситуация үҙгәрҙе - ҡала халҡының яртыһы башҡа мәҙәниәт кешеләренә ҡарай. Шуға күрә киләсәктә Нияз Мәжитовтың ҡаланың боронғолоғон иҫбатлаған дәлилдәре рәсми рәүештә танылыуы бик мөмкин.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Датаһын аныҡ билдәләү - был йәш ҡалалар привилегияһы, мәҫәлән, Петербург кеүек ҡалаларҙың: Петр Беренсенең ҡалаға нигеҙ һалыуының йылы һәм көнө лә билдәле. Өфөгә килгәндә, күпкә ҡатмарлыраҡ, сөнки урта быуаттар осоро өсөн күберәк археология мәғлүмәттәренә таянырға тура килә, ә бында плюс-минус 100-200 йыл - ғәҙәти хәл. Шуға күрә Өфө ярымутрауында беренсе ҡала торағы төҙөлөүенең аныҡ датаһын йылына тиклем билдәләү мөмкин дә түгелдер. Шулай ҙа археологик даталауҙың яҡынса булыуы 1982 йылда Киевтың 1500 йыллығын һәм 2005 йылда Ҡаҙандың 1000 йыллығын байрам итеүгә ҡамасауламаны. Моғайын, бында шул уҡ волюнтаризм һәм дөйөм дәүләт финанслауына дәғүә итеү перспективаһы үҙ ролен уйнағандыр.

Бындай миҫалдар байтаҡ. Шулай булһа ла, беҙ үҙебеҙҙең фильмдә Өфөгә нигеҙ һалыу датаһын кисекмәҫтән үҙгәртергә саҡырмайбыҙ. Беҙ бары тик уның ни тиклем шартлы булыуын күрһәтергә теләнек. Төп маҡсатыбыҙ - беҙҙең бөйөк ҡалабыҙ Өфөнөң тарихы ни тиклем тәрән һәм ҡыҙыҡһындырғыс булыуын күрһәтеү ине. Бәлки, тарихсыларҙың һәм археологтарҙың яңы асыштары берәй ваҡыт уның ысын йәшен билдәләүҙә һуңғы нөктәне ҡуйыр, тип ышанырға ҡала.

**(Аҙағы. Башы былтырғы 37-44-се, 46-51-се, быйылғы 1-се һандарҙа).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

# МЫСЫР МӘМЛҮКТӘРЕ...

## ниндәй телдә һөйләшкән?



**Ғәрәп хәлифәте Көнсығышта үҙенең позицияларын юғалтып, ялланыусыларҙан (төркиҙәрҙән һәм берберҙәрҙән) регуляр армия төҙөргә мәжбүр була. Һуңынан был армия ялан "әсирҙәре" менән тулыландырыла. Ғәрәп илдәрендә уларҙы "гүләмдәр" тиҙәр. 865 йылда гвардиясылар власты үҙ ҡулына ала. 10 йыл эсендә улар дүрт хәлифте урынынан бәреп төшөрә.**

"Барлыҡ мосолмандарҙың хәлифе төрки гүләмдәренән башҡа власты бер сәғәт тә тотоп тора, ә тегеләре хәлифтең рөхсәтенән башҡа сит илдә хакимлыҡ итә алмаҫ ине", - тип яҙа Лев Гумилев. Мута-сима хәлифе ярҙамында төрки сығышлы мәмлүк Әхмәт ибн-Тулун Мысырҙа наместник булып китә. 869 йылда ул Сүриә менән Фәләстанды берләштерә, шул уҡ ваҡытта Мутасим ҡолдар һатылған барлыҡ баҙарҙарҙан гүләмдәрҙе һатып алып, дружинаһын нығыта. Фатимидтар ваҡытында Мысыр ғәскәре аҡ һәм ҡара мәмлүктәрҙән тора. Көньяҡ Русия далаларынан булған төрки сығышлылар Нилдың Ар-Руад утрауында берләшә һәм бахриттар тип атала. Тыуған ерҙәренән айырылған мәмлүктәр этник билдәләр буйынса берләшә башлай. 1051 йылда Хакимдың шәхси гвардияһы һәм мәмлүктәр араһында низағ тыуа. Был көрәш 1062 йылға тиклем дауам итә һәм төркиҙәр Судан негрҙарын ҡыйрата. Шул ваҡыттан алып бөтөн власть бахрит-мәмлүктәр ҡулына күсә.

К. Э. Босворт Мысыр мәмлүктәре тарихын өйрәнеп: "X-XIII быуаттарҙа төркиҙәр мосолман илдәренә эләгеп, "намыҫлы ҡырағайҙар" сифатын - ҡыйыулыҡ, тоғролоҡ, сыҙамлылыҡ, ялағайлыҡты яратмауҙарын, ике йөҙлө булмауҙарын һаҡлап ҡалған. Ғәрәптәр төркиҙәргә өҫтөнлөк биргән һәм уларҙың "арыҫлан сифатын" - ғорурлыҡ, азатлыҡ, йорт эштәрен башҡарыуҙан баш тартыу һәм башҡа сифаттарын баһалаған. Көнсығышта мәмлүктәр эпохаһындағы төркиҙәргә шундай баһалама биргәндәр: "Төркиҙәр сит тәнгә килеп инеп үҫкән һәм ынйыға әүерелгән, һуңынан инде бөйөк дәүләттәрҙең батшалары тажын биҙәгән ҡом бөртөгөн хәтерләтә".

Мысыр мәмлүктәренең этник составын билдәләгәндә, уны билдәләүсе төп элементтарҙың береһе - телгә таянырға һәм этномәҙәни үҙенсәлекте (ат итен ашау, ҡымыҙ, айран, буҙа эсеү) иҫәпкә алырға тейешбеҙ. Мысыр мәмлүктәренең аралашыу теле булып көнбайыш-ҡыпсаҡ теле тора. Был тарихи дәлилдәр менән дә раҫлана. Күп ғалимдар мәмлүктәрҙең телен ҡумыҡ-ҡарасәй-балҡар теленең диалекты тип иҫәпләй. А.А. Зайончковский ҡумыҡ һәм ғәрәп-ҡыпсаҡ һүҙлектәре араһында параллель үткәрә. Мәхмүт Ҡашғариҙың "Дивану лөғәт ит-төрки" хеҙмәтен мәмлүк-ғәрәп теленең тәүге һүҙлеге тиергә лә мөмкин.

Мысыр мәмлүктәренең телен шулай уҡ хәҙерге ҡараим, ҡарәсәй-балҡар, ҡумыҡ, Ҡырым татарҙары теле менән бер төркөмгә индерәләр. Шулай итеп, шуныһы асыҡ: Мысыр мәмлүктәренең теле ҡумыҡтар, ҡарасәй-балҡарҙар, нуғайҙар, ҡырым татарҙары, ҡаҙаҡтар, татарҙар, башҡорттар һәм ҡырғыҙҙар һөйләшкән ҡыпсаҡ төркөмөнә ҡарай.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Башҡорттарҙың ер эшкәртеү тарихы тураһында IV бүлектә ентекле яҙыла. Был бүлектә ер эшкәртеү техникаһына айырым иғтибар бирелә. Оҙаҡ йылдар ялан башҡорттарында ер эшкәртеүҙең - күсереү, ә урман башҡорттарында яндырыу һәм көлләндереү системаһы йәшәп килә. Был ике система тураһында ла XVII һәм XVIII быуаттарҙағы документтарҙа иҫкә алына. Ул хатта XIX быуат һуңында ла була. Күсереү системаһы ерҙәре күп булған, бигерәк тә Урал аръяғы башҡорттарында осрай. Ә яндырыу системаһын мин Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында, Ғәйнә һәм Уран башҡорттарының дачаларында күҙәттем.

Күсереү системаһына ярашлы, бер тапҡыр эшкәртелгән ерҙе өс-дүрт тапҡыр унан бойҙай йәки тары уңышын алғас, бер нисә йылға ял иттерергә ҡалдыралар. Ошо ваҡытта инде икенсе, 10-15 йыл эшкәртелмәй ятҡан ер күтәрелә һәм тағы өс-дүрт йыл йәки ике-өс йыл эшкәртелә. Был ашлама ҡулланылмаған бик ябай ысул халҡы әҙ, ере күп булған осраҡта игенсене тулыһынса ҡәнәғәтләндергән. Уның ере күп булғас, бер генә участканы тәрбиәләү ихтыяжы тыумаған.

Яндырыу йәки көлләндереү системаһы күсереүгә ҡарағанда ла вәхшиҙәрсәрәк булған. Уның өсөн урман, ҡайһы берҙә бер нисә мең гектар, яндырылған. Янған ағастарҙан ҡойолған, янған тамырҙар һәм төпһәләрҙән барлыҡҡа килгән лапы һөҙөмтәһендә яндырылған участканы һөрөү мөмкин булмаған. Урыны-урыны менән генә, тамырҙар араһындағы ер кәйлә йәки кәтмән ярҙамында йомшартылған




**(һүрәт)**. Еңелсә генә ҡабаттан тырматылған көллө ҡатламға иген, нигеҙҙә арыш сәселгән. Әммә икенсе, ә ҡайһы бер ваҡыт беренсе йыл иген сәскәндән һуң бындай уңдырышлы ерҙә үлән күпереп үҫә башлаған. Һөҙөмтәлә яндырылған участканы ҡалдырып, яңынан икенсе участка яндырылған.

Ер эшкәртеү хужалығының бындай ике системаһы ошо ваҡытта бик сикле, урындағы характерҙа ғына булған. Өс яланлы система иһә барлыҡ урындарҙа таралыу алған. Был осраҡта эшкәртелгән ерҙәр өс өлөшкә бүленгән, уларҙың икеһенә йыл һайын иген сәселгән, ә береһе, сиратлап, парға ҡалдырылған. Ер менән файҙаланыуҙың был ысулы Башҡортостанда башҡорт халҡына ғына хас булмаған, уны рустар ҙа, рус булмаған башҡа халыҡтар ҙа ҡулланған.

XVIII быуаттың икенсе яртыһында башҡорттар, И. И. Лепехин һүҙҙәре буйынса, күберәген "арпа һәм һоло сәскән, ә арыш икмәге кәрәкмәй тип һаналған". XIX быуат һуңында, XX быуат башында башҡорттар ярауай бойҙай, ужым арышы, бойҙай, арпа, һоло, тары һәм бик һирәк кенә киндер сәскән. Ужым арышын башҡорттар бик аҙ сәскән, һәм был эш август урталарынан сентябргә тиклем башҡарылған. Ғәҙәттә, ошо йылда алынған яңы орлоҡто гектарына ике центнер иҫәбенән сәскәндәр. Ужым арышы август башында йәки урталарында өлгөргән.

**(Дауамы бар).**

✓ *Кем белә, бәлки, "бәхет" тигән төшөнсә бөтөнләй юҡтыр, бәлки, уны ҡара көстәр кешенең аңын йоҡлатыу, һиҙгерлеген кәметеү маҡсатында ғына уйлап тапҡандыр?*



УЙЛЫҒА - УЙ

**Халҡыбыҙҙа "Кешене бәхет айыра" тигән бик парадоксаль әйтем бар. Ысынлап та, кешене кешенән бәхет айырамы икән? Нимә генә тимә, һәр кем донъяла йәшәүенең төп мәғәнәһен, маҡсатын бәхетле булыуҙа күрә һәм үҙенең һәр ғәмәли ынтылышын бәхет пирамидаһы ҡороуға йүнәлтә. Ҡыҫҡаһы, кешене бәхеткә ынтылыш йәшәтә, маҡсатлы итә. Шулай булғас, әйтемдә килтерелгәнсә, ни өсөн кешеләрҙе фәҡәт бәхет айыра икән һуң? Кешене кешенән айырыр булғас, бәхеткә ынтылыуҙан ни фәтеүә?**

# МИН БӘХЕТЛЕ...

## сөнки мин бәхетһеҙлек хаҡында уйланмайым



Кешеләрҙең бер-береһенән алыҫлашыуына, айырылышыуына, ғаиләләрҙең тарҡалыуына бәхет пирамидаһының түбәһе булып иҫәпләнгән "Америка хыялы"на барып етеү ҙә тотҡарлыҡ була алмаймы икән ни? Айырылышыуҙар буйынса был ил донъяла беренсе урында тора. Шул уҡ йәшәү унайлыҡтары, комфорт йәһәтенән дә Америкаға еткән ил юҡ. Дөрөҫөрәге, юҡ ине, сөнки бар донъяны ялмаған иҡтисади көрсөк тап ошо дәүләттән башланды, улай ғына ла түгел, "Америка хыялы"на артыҡ ашҡынып ынтылыуҙан башланды. Һәр хәлдә, сәйәсмәндәр был илдә башланған иҡтисади көрсөктө тап ошонда күрә.

***Әйҙәгеҙ, башта бәхет һәм бәхетһеҙлек хаҡында ике лаҡап һөйләйем әле, булмаһа. Тәүгеһе:***

Бер мәл аҡһаҡалға бер ҡатын килгән дә:

- Ҙур бәхетһеҙлеккә тарыным, олатай. Ғүмерем буйына иремә бер туҡтауһыҙ мыжып, уны моңһоҙлоҡта, бешәлкәһеҙлектә, әйткән һүҙҙәремде ҡолағына элмәүҙә ғәйепләнем. Бөгөн ҡот осҡос хәлдә белеп ҡалдым: бахтиһән, ул тыумыштан һаңғырау булған икән. Өҫтәүенә, мин уны гел әрләп йәшәнем, юҡҡа ғына үҙен битәрләгәнмен, бахырҡайымды. Хәҙер миңә нимә эшләргә икән? - тип түгелеп илап ебәргән.

- Бының өсөн һиңә ҡайғырырға түгел, ҡыҙым, киреһенсә, шатланырға ғына кәрәк, - тигән аҡһаҡал, һис тә иҫе китмәйенсә.

- Нисек инде шатланырға, олатай, ул һаңғырау булған өсөнмө ни? - тип аптырай төшкән ҡатын.

- Эйе, нәҡ һаңғырау булғаны өсөн, ҡыҙым. Донъяла һинең иреңдән дә бәхетлерәк кеше юҡ, шуны анлап, шатланып ҡына йәшәй бир, - тип аҡһаҡал ҡатынды оторо ярһытып ебәргән.

- Был һүҙҙәреңде ауыҙыңдан ел алһын, олатай, ниңә мине мыҫҡыл итеп, юҡты һөйләйһең? Һаңғыраулыҡ - ул зәғифлек, ә зәғиф кеше бәхетле була тиме инде? - тип ҡатын алдағынан да нығыраҡ иларға, үкһергә тотонған.

Аҡһаҡал уның бер аҙ тынысланғанын көтөп торған да:

- Ирем тыумыштан һаңғырау булған, тиһең бит әле, ҡыҙым. Бына шулай: Хоҙай Тәғәлә уны тыумыштан һиңә инселәгән, шуның өсөн һинең мыжыуыңды ишеттермәҫ өсөн һаңғырау итеп яралтҡан. Әле бына минең өйгә инеүеңә биш минут ҡына ваҡыт үтте, ә шул ике арала күпме мыжып, күпме илап, минең дә мейене серетеп өлгөрҙөң. Шулай булғас, аңла, донъяла һинең иреңдән дә бәхетлерәк кеше юҡ, сөнки ул һинең мыжыуыңды бөтөнләй ишетмәй йәшәгән, - тип уны әйткән һүҙе менән иҙәнгә лыпын ултыртҡан.

Аҡһаҡалдың һүҙҙәрен бар тулылығында тәрән итеп аңлауҙан ни иларға, ни көлөргә белмәйенсә, оҙаҡ ваҡыт шаңҡып ултырған ҡатын. Шулай ҙа ҡайтыр саҡта тынысланып, аҡһаҡалға күҙен асҡан өсөн рәхмәт әйтеп, артабан ире менән мөнәсәбәтен нисек ҡорорға кәңәш һораған.

- Ирендең һаңғыраулығы бөтһөн, тиһән, мыжыуыңды туҡтатаһың инде, ҡыҙым, - тип оҙатып ҡалған уны аҡһаҡал.

***Икенсе лаҡап.*** Үҙенең ҡойроғон тешләргә ынтылып, бер урында зыр әйләнеп өйөрөлгән эт көсөгө янына оло йәштәге Аҡбай килгән дә:

- Бер нисә көн буйына һине күҙәтеп йөрөйөм. Ниңә улайтып бер урында өйөрөләһең ул, кеше көлдөрөп? - тигән эт ләғәтендә уауылдап.

- Эттең бәхете ҡойроғонда, тиҙәр, шуны тоторға теләйем дә инде, - тигән көсөк аҡланырға теләгәндәй.

- Эй, ялбыр, хәстрүш, шуны ла белмәйһеңме ни, бәхеттең артынан ҡыуырға ярамай, бәхет үҙе һинең артыңдан эйәрергә тейеш, - тигән Аҡбай эре генә ҡиәфәттә.

- Нисек итеп эйәрергә тейеш? - тип сыйылдау тауышы еткергән бәләкәй көсөк.

-Быны ошолай итеп, - тигән дә, Аҡбай, ҡойроғон һәлендереп йүгереп китеп барған...

Хәҙер инде ошо ике лаҡаптан сығып, ысын мәғәнәһендә бәхетле йәшәүҙең нисек булырға тейешлеге хаҡында уй йөрөтөп ҡарайыҡ. Тәүге осраҡта ирҙең тыумыштан һаңғыраулығы йәғни бәхетһеҙлеге ысынында уның бәхетле булыуына ишаралаһа, икенсе осраҡта һәр кемдең бәхете үҙе менән һәм уның артынан ҡыуырға һис тә кәрәкмәгәнлеген аңлата, йәғни бәхет артынан ҡыуыу кешене бәхетһеҙлеккә генә алып килә. Ошо ике лаҡаптан сығып, беҙ шуны ла аңлайбыҙ: донъяла бәхет күрһәткесе, билдәләүсе шкалаһы юҡ. Американдар хыялланғанса, тик комфортлы, унайлы етеш тормош ҡына бәхетте билдәләмәй. Сөнки бер фәйләсүф әйткәнсә, "Донъяла абсолют бәхет булмай, сөнки бәхет ҡошон ҡулына эләктереүсе кеше уны юғалтмаҫ өсөн бәхетһеҙ борсолоуҙар кисереп йәшәргә мәжбүр".

***Йәғни көн артынан төн, төн артынан көн килгән һымаҡ, бәхет менән бәхетһеҙлек сиратлашып килгән осраҡта ғына беҙ ысын бәхеттең ниндәй икәнлеген аңлай алабыҙ. Изгелек менән яуызлыҡты ла беҙ уларҙың икеһенең йәнәш ҡуйылыуы арҡаһында ғына айырабыҙ һәм билдәләйбеҙ.***

***Шулай уҡ ҡара төҫ булған өсөн генә аҡ төҫ - аҡ, аҡ төҫ булғаны өсөн генә ҡара төҫ - ҡара. Ошоларҙан сығып, шундай ике формула - билдәләмә сығарырға була хатта:***

***1. Нимә ул бәхет? Ул - бәхетһеҙлек онотолоп торған миҙгел, йәғни күңел тыныслығы табыу.***

***2. Нимә ул бәхетһеҙлек? Ул - ҡәҙерен белмәгән бәхет миҙгеле, йәғни күңел тыныслығын юғалтыу.***

Бәхет һәм бәхетһеҙлек парадоксы шунда: беҙ бәхетле минуттар кисергәндә генә бәхетһеҙлекте, бәхетһеҙлек кисергәндә генә ҡасандыр бәхетле булғанлығыбыҙҙы аңлайбыҙ. Бер яҡтан уйлағанда, бәхетле булыуҙың сере яп-ябай ҙа, икенсе яҡтан ҡараһаң, улай уҡ та түгел икән.

Шулай ҙа, мәҡәләлә әйтелгәнсә, ни өсөн кешене кешенән фәҡәт бәхет айыра, алыҫлаштыра һуң? Кешенең аңын ойотоп, ғүмерҙең, яҡыныңдың, кеше ҡәҙерен онотторор бәхет, ғөмүмән, кешегә ни өсөн кәрәк һуң? Шул уҡ ваҡытта кешелек тарихында бәхетһеҙ осраҡтың, ҙур юғалтыуҙарға бәйле ҡыйралыштарҙың, катаклизмдарҙың, киреһенсә, кешеләрҙе берләштереүсе сәбәп булыуы хаҡында ла бихисап миҫалдар килтерергә булыр ине.

Кем белә, бәлки, "бәхет" тигән төшөнсә бөтөнләй юҡтыр, бәлки, уны ҡара көстәр кешенең аңын йоҡлатыу, һиҙгерлеген кәметеү маҡсатында ғына уйлап тапҡандыр? Ә бит беҙҙең иң бәхетле мәлебеҙ - әсәйебеҙ ҡарынында ятҡан сағыбыҙ. Үҙебеҙ ошо хәлде аңлап етмәйенсә, ғүмер буйына бәхет артынан ҡыуабыҙ ҙа, уңышһыҙлыҡҡа юлығып, күңел тыныслығын юғалтабыҙ, шунан үҙебеҙҙе бәхетһеҙгә һанап илайбыҙ. Артабан тағы ла ошо уҡ хаталарҙы ҡабатлайбыҙ, тик үҙебеҙ әсә ҡарынында ятҡан саҡтағы иң бәхетле сағыбыҙҙы юғалтыуыбыҙҙы ғына анлап бөтөрмәйбеҙ. Кем белә, бәлки, баҡыйлыҡҡа күскәс, нимә эҙләгәнебеҙҙе аңлайбыҙҙыр ҙа, тик ул саҡта инде...

...Һеҙҙең бәхетле тормош хаҡында берәр фильм ҡарағанығыҙ йә китап уҡығанығыҙ бармы? Ғөмүмән, күп кенә фильмдарҙың йә әҙәби әҫәрҙәрҙең азағы геройҙарҙың ауырлыҡтарҙы еңеп сығып, бәхетле тормош төҙөүе, туйҙары менән тамамлана. Кемдер берәү башҡаларҙың бәхете өсөн һәләк була, уны һуңғы юлға оҙаталар, ерләүселәр араһында артабан бәхетле тормош менән йәшәп китеүселәр ҙә бар. Ҡайһы бер әҫәрҙәрҙең һәм фильмдарҙың аҙағында шундай һүҙҙәр ҙә әйтелә: "Улар бәхетле ғүмер кисереп, оҙон-оҙаҡ бергә йәшәнеләр ҙә, бер үк көндә, бер үк сәғәттә донъя ҡуйҙылар..."

Ошо һөйләмдең "бәхетле ғүмер кисереп" тигән өлөшөн экранда йә әҙәби әҫәрҙә нисек итеп һынландырырға була икән һуң? Әйтәйек, улар бәхетле, күңелдәре тыныс, өҫтәре бөтөн, тамаҡтары туҡ, балалары, ейән-ейәнсәрҙәре лә шатлана... Артабан нимә? Ҡыҫҡаһы, бәхетле тормош хаҡында бер нәмә лә яҙып һәм фильм төшөрөп булмай, ни өсөн тигәндә, әҫәр, фильм йә тормоштоң үҙе проблемалар барлыҡҡа килгәс, йәғни геройҙар бәхетһеҙлек менән осрашҡас ҡына башлана.

Юғарыла әйтелгәндәрҙән сығып ниндәй һығымта яһарға була: бахтиһәң, бәхет кисереп йәшәү ни тиклем генә ымһындырғыс һәм зауыҡлы булып тойолмаһын, бик үк ҡыҙыҡлы түгел икән дә. Шулай булғас, ниңә әҫәр йә фильм геройҙары үҙҙәренең бәхете өсөн ҡырылмаһа ҡырҡ ҡаршылыҡтарҙы вата-емерә, үҙен йә яҡындарын ҡорбанға килтереп, эт ҡарағыныҙ хәлгә етеп, ҡаратырышланып көрәшә икән һуң? Ни өсөн бәхетле тормош ҡыҙыҡлы түгел? Минеңсә,"Кешене бәхет айыра" әйтеменең бер аңлатмаһы тап ошонда ятылыр, йәғни, әгәр ҙә бәхет миҙгеле оҙаҡҡа һуҙылһа, был хәл кешене һәлкәүләндерә, ҡанын ойота, аңын йоҡлата һәм кеше башҡалар күҙлегенән бәхетле булып күренгән мәленән ҡәҙерен онотоп, үҙенән-үҙе бәхетһеҙлек көсәй башлай. Һөҙөмтәлә ул үҙен бәхетле иткән мөхиттән, яҡындарынан айырыла. Тағы ла шуныһы: кеше ошо юлға бармайынса торып, бәхетле мәленең ҡәҙерен дә белергә һәләтле түгел. Шул уҡ ваҡытта ул бәхеткә ынтылмайынса ла йәшәй алмай. ***Бында бәхеттең ике сифаты хаҡында һүҙ йөрөтөү урынлы булыр һымаҡ. Тәүгеһе - ҡәҙере белемгән, икенсеһе - бәхетһеҙлеккә килтереүсе, кешене бәхет мөхитенән айырыусы бәхет.***

Бәхет хаҡында шундайын матур һәм оло кинәйәле әкиәт бар. Имеш, бер мәл Бәхет урман буйлап китеп барғанында яңылыш соҡорға ҡолап төшкән. Нисек сығырға белмәй илап ултырғанында соҡор янынан үтеп барған кешегә:

- Игелекле кеше, мине соҡорҙан сығырға ярҙам итһәңсе? - тип ялбарған Бәхет.

- Буштың атаһы үлгән, һин миңә бының өсөн нимә бирерһең һуң? - тип һораған кеше.

- Әйт, һиңә нимә кәрәк һуң? - тип һорауға һорау менән яуап биргән Бәхет.

- Минең дингеҙ янында урынлашҡан матур һәм ҙур йортта йәшәгем килә, - тигән кеше.

Шул саҡ мөғжизәле күренеш асылған: дингеҙ ярында ҙур һәм матур йорт хасил булған. Кеше үҙ күҙенә үҙе ышанмайынса, йортҡа йүгереп инеп киткән. Шунда йәшәй ҙә башлаған һәм Бәхеткә ярҙам итергә кәрәклеген иҫенән сығарған.

Соҡор эсендә ултырып ҡалған Бәхет баяғынан да ҡыҫҡырыбыраҡ иларға, ялбарырға тотонған. Шул саҡ соҡор янынан тағы ла бер кешенең үтеп барғаны күренгән.

- Игелекле кеше, мине соҡорҙан тартып сығарһаңсы? - тип инәлгән уға Бәхет.

- Мин һине тартып сығарырмын да ул, ә быныӊ өсөн һин миңә нимә бирерһең һуң? - тип һорауына һорау менән яуаплаған икенсе кеше.

✓ ***Беҙҙең уҡымышлы һаналған заттарыбыҙ араһында ла "ҡара көнсөллөк" менән йәшәгәндәр юҡ түгел. Ундайҙар ниндәй ҙә булһа уңыш ҡаҙанған милләттәштәре хаҡында тик кире фекерҙә булып, уларҙы яманлай.***



- Ә һиңә нимә кәрәк һуң? - тип йәнә һораған унан Бәхет.

- Миңә төрлө-төрлө маркалы ҡиммәтле матур машиналар кәрәк, - тигән уға икенсе кеше.

Шул саҡ кеше янына күҙҙең яуын алырлыҡ, береһенән-береһе "текәрәк" машиналар теҙелеп киткән. Кеше машиналарға ултырып, ҙур тиҙлектә йөрөргә тотонған һәм соҡорҙа ултырған Бәхетте бөтөнләй иҫенән сығарған.

Инде соҡорҙан сығырына тамам өмөтөн өҙгән Бәхет тағын бер кешенең үтеп барғанын күреп ҡалып:

- Игелекле кеше, зинһар өсөн мине соҡорҙан тартып сығар әле? - тип уға ялбарған.

Был кеше уны соҡорҙан тартып сығарған да, юлын дауам иткән. Бәхет уның артынан ҡыуып еткән.

- Мине ҡотҡарғаның өсөн һиңә нимә бирәйем, игелекле кеше? - тип өндәшкән уға Бәхет.

- Миңә бер нәмә лә кәрәкмәй, - тип яуаплаған да был кеше юлын дауам иткән. Шулай итеп Бәхет шул мәлдән алып ошо кешенең артынан ҡалмай эйәреп йөрөй икән. Бәхет хаҡындағы иң ҡыҫҡа һәм иң фәһемле әкиәт был, шулай бит, дуҫтар?

...Бәләкәй саҡта әсәйҙәр сепарат әйләндергәндә беҙ күбек ялай торғайныҡ. Күбек тәмле генә һымаҡ булып тойолһа ла, төйөрөм ризыҡ булмағас, уны ялағандан һуң күңелдә ымһыныу тойғоһо ғына тороп ҡала торғайны. Ҡыҫҡаһы, күбек ялап, тамаҡ туйҙырып булмай. Үкенескә күрә, күбек ул һөт тә, ҡаймаҡ та түгел, бары тик боролғандан һуң ағып төшкән һөттөң быу тулған тулҡынсыҡтары ғына. Ғәжәп, ә бит ошо күбекте лә бәхеткә ынтылыу хисе менән сағыштырып була. Ни өсөн тигәндә, һөт эскәндән йә ҡаймаҡ ашағандан һуң һауа менән тулған һөт күперектәренә әйләнеп тә ҡарамайһың. Был осраҡта һөткә, ҡаймаҡҡа тейенеүҙе бәхетле булыуға тиңләһәк, күбек ялау бәхеттең һағымы, иллюзияһы ғына. Бәхет тә ана шулай хыял кимәлендәге иллюзия, һағым булған сағында ғына ҡәҙерлелер, тим. Һәр хәлдә, мин Бәхет хаҡындағы әкиәттән шуны аңланым. ***Был донъяла бәхетле булыуың мөһим түгел, үҙеңде бәхетле итеп тойоуың мөһим. Йәғни тулы бәхет шарттарында йәшәүсе түгел, үҙен бәхетле итеп тойоусы ысын мәғәнәһендә бәхетлелер.***

Бәхет хаҡындағы һүҙҙе тамамлап, билдәле кешеләрҙең бәхет хаҡындағы ҡанатлы һүҙҙәрен килтереү урынлы булыр ине, улар юғарыла әйтелгәндәрҙе тәрәнерәк аңларға ярҙам итер, тип ышанам:

***Гераклит Эфесский:*** "Әгәр ҙә бәхетле булыуҙы тән ләззәте тип кенә аңлаһаҡ, беҙ борсаҡ ашаған үгеҙҙәрҙе иң бәхетлеһе тип атар инек".

***Оскар Уайльд:*** "Беҙ бәхетле саҡта мәрхәмәтле, әммә мәрхәмәтле саҡта һәр ваҡыт бәхетле түгелбеҙ".

***Лао-Цзы:*** "О, бәхетһеҙлек ! Ул бәхеттең нигеҙен тәшкил итә. О, бәхет! Уға бәхетһеҙлек йәшеренгән. Уларҙы кем айырғаны бар икән? Улар икеһе лә даими түгел".

***Хелен Келлер:*** "Бәхеттең бер ишеге ябылғанда, икенсеһе асыла. Әммә беҙ ябылған ишеккә оҙаҡ ҡарап тороп, асылғанын күрмәйбеҙ".

***Джордж Бернард Шоу:*** "Мин бәхетле, сөнки минең бәхетһеҙлек хаҡында уйланырға ваҡытым юҡ".

***Джордж Гордон Байрон:*** "Бәхеткә өлгәшеүсе икенсе берәү менән бәхетен бүлешергә тейеш. Ул сағында бәхеттең игеҙәге барлыҡҡа килә".

***Силован Рамишвили:*** "Әгәр ҙә даға бәхет килтерһә, аттар барыһынан да бәхетлерәк булыр ине".

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ИШАРАЛАП...*

# ТОРМОШ ЮЛЫНАН...

## үҙ итектәреңдә атла



**Һәр бер кешегә хас булған тиҫтәләрсә сифаттар араһында көнләшеү тип аталғаны ла бар. Башлыса, йәмғиәттә был тойғо шәхестең негатив, кире, хатта иң яман һыҙаты итеп нарыҡлана. Көнләшеү, дини тәғлиматҡа ярашлы, гонаһлы ғәмәлдәр иҫәбенә индерелә. Христиандарҙың Библияһына ярашлы, көнсөллөк - 7 үлемесле гонахтарҙың береһе, сөнки ошондай хәләтте үҙ иткән әҙәм балаһы Хоҙайҙың 10-сы васыятын боҙа: "Үҙеңә яҡын кешенең йортон теләмә; яҡыныңдын ҡатынын да, ир ҡолон да, ҡатын-ҡыҙ ҡолон да, үгеҙен дә, ишәген дә, унда булған бер нәмәне лә теләмә", - тигән тыйыу хаҡында һүҙ бара был осраҡта. Башҡа берәүҙең мөлкәте, байлығы күберәк булыуынан, хатта ки уның ҡатыны көнсөл заттың ҡатынанан сибәрерәк күренеүенән, кәмһенеү тойғоһо менән бер рәттән, ошо кешегә ҡарата негатив ҡараш, уға яманлыҡ теләү хасил була. Халыҡ араһында ошондай тойғо менән йәшәгән кешене "ҡара көнсөл", тип нарыҡлайҙар.**

Изге Ҡөрьән-Кәрим китабында ла көнсөл кешеләрҙең мосолман әҙәбен боҙоуы, ҡара эсле, боҙоҡ заттарҙан һаналыуы хаҡында әйтелгән. Аллаһы Тәғәләбеҙҙең ошо хаҡта киҫәтеүе ошолай тип теркәлгән: "Китап әһелдәренең күбеһе, Хаҡ Тәғәлә үҙҙәренә ысын дөрөҫлөктө бәйән иткәндән һуң, үҙҙәрендәге хөсөтлөк, көнләшеү арҡаһында, һеҙҙе иманығыҙҙан яҙҙырып, яңынан көфөр итмәксе булалар"; "Әллә улар Аллаһ йомартлығы менән кешеләргә бирелгәндән көнләшәләрме? Юҡһа, беҙ бит Ибраһим тоҡомона ла Китап һәм хикмәттәр бирҙек һәм уларға бөйөк хөкөмдарлыҡ тапшырҙыҡ". Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) "Көнләшеүҙән һаҡланығыҙ, көнсөллөктөң яҡшы эштәрҙе лә ут утынды ялмағаны һымаҡ ашауы хаҡтыр", - тигәнен IX быуатта йәшәгән хәҙистәр белгесе, мөхәҙҙис Әбү Дауд ас-Сиджистани теркәп ҡалдырған.

Кемдеңдер һәйбәт йәшәүен, уңыштарға өлгәшеүен, маҡталыуын, бүләктәр алыуын ыңғай ҡабул итә алмайһың икән, тимәк, көнләшәһең.

Әйтергә кәрәк, бер саҡта ла, бер нисек тә, бер кемдән дә көнләшмәй йәшәгән кешенең булыуы мөмкин түгел. Донъялыҡта хайуани заттар ғына бер-береһенән көнләшмәй. Көнләшеү - универсаль эмоция, ул кеше психикаһында социаль мөхит йоғонтоһо һөҙөмтәһендә хасил була. ***Ижтимағи мөхиттә үҙ-үҙеңде башҡа кешеләр менән сағыштырмайынса йәшәп булмай. Карл Маркс яҙғанса, йәмғиәттә бер кеше икенсе кешегә көҙгөгә ҡараған кеүек ҡараһа ла, ул ошо "социаль көҙгө"ләге һындың үҙенән айырылып тороуын, үҙендә булмаған сифаттарын күрмәй ҡалмай. Эш шунда, ошо сифаттарҙың үҙендә булмауы кешелә кәмһенеү тойғоһон уятыуы мөмкин, ә был осраҡта уның күңелендә үҙенән өҫтөнөрәктәргә негатив ҡараш ярала: "Ни эшләп әле ул шундай, ә мин түгел?"***

Әйтергә кәрәк, көнләшеүгә килтереүсе һыҙаттар бала психикаһында бик иртә ярала, бының сәбәбе итеп тирә-яҡтағы әйберҙәрҙе һәм үҙ-үҙен аҙмы-күпме танып белә башлаған сабыйҙа инстинктив рәүештә хасил булған эгоизм тойғоһон атап була, ә һуңғыһының биологик асылын нимәнеләр үҙләштереп, үҙең генә файҙаланырға теләү тәшкил итә. Австрия психологы Зигмунд Фрейд көнләшеү тойғоһон аҫҡы аңдағы эмоциялар комплексы менән бәйләп аңлата, мәҫәлән, бала ғаиләлә ата-әсә иғтибарының башҡа туғандарына йүнәлтелеүен һиҙеп, негатив эмоциялар кисерә, мыжый, илай башлай. Ауылда йәшәгән бер ҡатын бына ни тип һөйләгәйне: "Икенсе балам тыуғас та, барса иғтибарым шул балаға күсте, илағыраҡ та ине. Өс йәшлек ҡыҙым тәүҙәрәк шым ғына йөрөнө, шунан бермә-бер көйһөҙләнде. Бөр көндә урамға сығып кергәнсе карауатта ятҡан бөпесемде мендәр менән ҡаплап ҡуйған бит! Ярай әле ауыҙы ҡапланмаған, тын алып ятҡан. Ҡыҙым менән ипләп кенә һөйләшергә, уны ла яратыуым хаҡында әйтергә тура килде. Магазиндан матур ҡурсаҡ та алып бирҙем уға, бик шатланды бала". Балалар баҡсаһы тәрбиәселәре ҡайһы бер балаларҙың, үҙҙәренең уйынсығын ташлап, башҡа баланыҡын тартып алыуын күрә, ә "узурпатор" уйынсыҡһыҙ ҡалған йәштәшенең аҡырып илағанын бар тип тә белмәй. Улай ғына ла түгел, хатта ғаиләлә бергә үҫкән бер туған балалар йыш ҡына туғанының берәй әйберенә булашып, талашып та китәләр. Әлбиттә, беҙ бында көнләшеү менән йәнәшә килгән ҡыҙығыу йә иһә ҡыҙғаныу тойғолары тәьҫирен иҫәпкә алабыҙ.

"Бер кеселә, бер олола", тигән әйтем бар. Көнләшеү нигеҙендә балаларҙа ла, ололарҙа ла бер үк уй-кисереш формулаһы ята: "Башҡа кешенең шул-был нәмәһе бар - ә минеке юҡ!" Ана шул "юҡ нәмә"ләр иҫәбендә кемдәрҙерҙең ҡиммәтле әйберҙәре, затлы кейемдәре, бай йорто, уңыштары, күркәм холҡо, йәмғиәттәге статусы, хатта буй-һыны һәм тышҡы ҡиәфәте булыуы мөмкин.

***Көнләшеү - еңел-елпе тойғо түгел, ул кеше күңелен бимазалап, хатта ыҙалап тороусан. Психологтар күҙәтеүенсә, көнсөллөк тойғоһо үтә киҫкен булған балалар башҡаларҙың үҙендә булмаған әйберҙәрен ватып-ҡырып ташларға әүәҫ икән.*** Бындай негатив халәт ҡайһы бер оло кешеләргә хас, һәм был уларҙы енәйәти ғәмәлдәр ҡылырға этәрә. Көнсөллөк арҡаһында башҡа кешенең мөлкәтенә зыян килтереүсе бер үк ваҡытта үҙенең эске донъяһын да емерә.

Ҡыҙғаныс, әммә беҙҙең уҡымышлы һаналған заттарыбыҙ араһында ла "ҡара көнсөллөк" менән йәшәп, шунан ҡәнәғәтләнеү тапҡан кешеләр ҙә юҡ түгел. Ундайҙар ниндәй ҙә булһа уңыш ҡаҙанған милләттәштәре хаҡында тик кире, негатив фекерҙә булып, уларҙы яманлай, төрлө ғәйбәт таратыуҙан да баш тартмай. ***Көнсөлдәр башҡа берәүҙе ҡарайтырға, түбәнһетергә тырышһа ла, үҙҙәренең "ҡара йөҙлө" булыуҙарын ғына барса йәмғиәткә күрһәтеп, кешеләр араһында барыбер объектив баһаға лайыҡ була. Шуға күрә милли мөхиттә беҙгә көнсөллөктән арыныу тик файҙаға ғына булыр ине.***

Гуманистик психология яҡлы ғалимдар көнләшеү тойғоһон кисереүселәрҙе ғәйепләп бармай, ә улар менән психотерапевтик әңгәмәләр уҙғарып, нисек итеп уларҙың әлегә үтәлә алмаған ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү, асылып бөтмәгән потенциалдарына юл ярыу мөмкинлектәрен аңлатырға тырыша. Уларса, көнләшеү гонаһ түгел, бары тик үҙенсәлекле сигнал ғына: "Минең дә уңышлы, маҡтаулы кеше булғым килә, тик үҙ-үҙемә ышанмайым". Гуманистар хатта көнләшеү тойғоһон кәрәкле сифат, тип һанай, сөнки ул үҫеш кешене юлына алып сыға ала. Көнсөл кешенең фекерләү йүнәлешен генә үҙгәртә алыу фарыз: үҙенде башҡалар менән генә түгел, ә "кисәнге үҙең" менән сағыштыра башлап, әүәл булмаған ғәмәлдәрҙе, яңы сифаттарҙы үҙләштереүең һөҙөмтәһендә үҫә барыуынды кисереү көнләшеү тойғоһонан азат итә. Көнләшеү хисен дөрөҫ аңлап, уның аша үтеп сыға алырға кәрәк. Бының өсөн тормошонда яңы маҡсаттар ҡуя алыу, ниәттәреңде барлау, бәләкәй булһа ла уңыштарыңа ҡыуаныу, торғонлоҡҡа, апатияға юл ҡуймау мөһим.

Заманында бөйөк Пушкиндың шиғри юлдарға һалған васыятын онотмаһаҡ ине: "Маҡтауға һәм яла яғыуға битараф бул һәм ахмаҡҡа ҡаршы һүҙ әйтмә". Көнсөллөк - ни барыһы ахмаҡлыҡ бит инде. Көнсөлдәр һүҙенә битараф ҡалыу отошлораҡ.

**Шулай итеп, бер әсәнең балаһына әйткәнен Рәхимә Мусина исемле замандашыбыҙ бик матур итеп яҙып алған. Бына нимә теләгән әсә ғәзиз балаһына: "Бәхетле булғың килһә - бер ҡасан да кеше бәхетенә көнләшмә, балам! Көнсөл әҙәм бәхетле була алмай. Эсеңде ҡорт кимереп торғанда нисек бәхетле булаһың инде? Һин уйлама: ул ҡорт миндә генә икән тип, белгең килһә, ул бөтәһендә лә бар: кемдәлер ҙур, кемдәлер бәләкәй... Тик аҡыллы кешеләр генә ул ҡортто еңә белә. Еңмәһәң, көнсөллөк эстән кимерә-кимерә үҙеңде ауырыуға әйләндерә, күңел тыныслығыңды урлай, йәшәү йәмен юҡ итә. Нисек еңергә тиһеңме? Үҙеңде башҡалар менән сағыштырма. Һинән матурыраҡ, һинән аҡыллыраҡ, һинән талантлыраҡ, һинән бәхетлерәк кешеләр менән донъя тулы. Ярыша башлаһаң - хәлең етмәҫ. Кеше тормошон күҙәтеп, кеше бәхетенә эсең янып, ғүмерең мәғәнәһеҙ үтеп киткәнен дә һиҙмәй ҡалырһың. Кеше бәхете - кеше итеге кеүек бит ул: матур, ҡупшы, әммә кейһәң - аяҡты өйкәй. Үҙ итектәреңдә атла тормош юлынан, балам".**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

✓ *Әлфиә апай менән йыш ҡына телефондан аралашып, яҙышып торҙоҡ. Иртәгә Баймаҡ хакимиәтенә йомош менән юлға сығам, тигән хәбәрен ишеткәс тә, мин дә йыйына башланым.*



*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*

# ТҮКТЕРМӘЙЕК ӘСӘЛӘРҘЕҢ КҮҘ ЙӘШЕН

Әсә йәше, Йыһандағы Ер шары кеүек, зәңгәр генә булып керпек остарында әйләнеп-әйләнде лә ҡапыл аҫҡа уҡталды. Герой партаһына төшөп, әллә күпме хәсрәт, ҡара ҡайғы билдәһе булып, тирәяҡҡа сәсрәне. "Тып!" итеп кенә ҡалды ул. Кемдер күрҙе, ишетте. Быш-быш килеп ниҙер шыбырлашыу - әллә, әлеге минуттарҙың ауырлығын үҙ-ара бүлешеп бер аҙ еңеләйтергә тырышыуҙары, әллә төрлө ваҡ-төйәк мәшәҡәттәр тураһында әңгәмә ҡороуҙары... Миңә, бөртөк был күҙ йәшен керпектәрҙә йыйылғандан алып күҙәткән кешегә, уның партаға төшөп сәсрәүе Ҡояш шартлағандай тойолдо. Ҡояш шартланы ла, донъя ҡараңғылыҡҡа сумды. Хәҙер инде шул ҡараңғы донъяла яугир әсәһенә нур эҙләргә, алға атлау өсөн һаран Ай яҡтыһы булһа ла табырға кәрәк. Һәрмәләнеп, "йәшәү" тигән бушаҡ ҡына тотҡаға тотоноп ҡалыр өсөн...

Герой партаһы асылды, ҡуйылды, тип әйтәйекме...







Мәктәптән көс еткеһеҙ ҡапма-ҡаршылыҡлы, буталсыҡлы уйҙар менән сыҡтым да, алыҫтағы йәшәү дәрте аңҡып торған, ҡоштар һайраған, сиңерткәләр сырылдаған, ҡырмыҫҡалар йүгергеләгән яҙғы тау-туғайҙарға текәлеп, ниҙер эҙләгәндәй, тупһала торам. Әллә йөрәктән урғылған "Герой партаһы" исемле өр-яңы шиғырҙы рифмаға һалырға, әллә алҡымға тығылған аңлайышһыҙ ошо бөгөнгө төйөр-көндө йоторға тырышам. Ә ул йотолмай, ярһып-туҙынып, ситлеккә һыймаған, болоттарға ынтылған сая бөркөттәй, ҡан баҫымын күтәреп, йоҙроҡтарҙы төйҙөрөп килә лә сыға, килә лә сыға.

- Апай! - Бар кешелеклелегемде, мөләйемлегемде һалып, ипле генә өндәшергә тырышам. - Хәлдәрегеҙ нисек?

- Аллаһҡа шөкөр әле... Бына, көрәшәбеҙ...

Көрәш тә бит төрлө була. Әле тоҫ ташламаған илле биш менән алтмыш араһындағы борсолоулы ҡатынға, үҙем дә һиҙмәҫтән, һорауҙарыма яуап эҙләпме, һынсыл ҡараш атам. Ҡыйыу ҡатынға оҡшаған. Герой партаһына ҡуйылған фотоһүрәттәге яугир яңы танышымдың, Әлфиә апайҙың, теүәл күсермәһе икән дә. Шул уҡ ҡырлас төҙ танау, зәңгәр күҙҙәр, ҡыйыу ҡараш...

- Батырҙар аллеяһы эшләргә тигән ниәт менән йөрөйөм әле. Кәрәкле ҡағыҙҙарын йүнләйем. Аллеяға урынын билдәләйбеҙ. Хужалар ҙа төрлө. Ыңғайҙары бар, киреләнгәндәре лә етерлек. Ә мин танк һымаҡ алға барам, - әсә, үҙ-үҙе менән ғорурланғандай, йылмайып, осҡон сәскән ҡарашын миңә ташлап ала. Яу яланында Артурҙың ҡулынан төшкән автоматты алып, бирелгән бойороҡто аҙағынаса еткерергә ярһыған һалдат ҡарашы ине был. Һәр хәлдә, миңә шулай тойолдо.

Әлфиә апай менән бер йыл эсендә тағы ла осрашасаҡбыҙ әле. Мин, Сибайға ҡайтҡас, "Артурға" исемле шиғырымды яҙасаҡмын, бер дуҫтан көйгә һалдырып, 23 февраль көнө Аҫҡар мәҙәниәт йортонда башҡарасаҡмын. Бөтә зал аяғүрә бер минут тынлыҡта торасаҡ йыр аҙағынан. Һәләк булған ягирҙарҙың ата-әсәләренә, ҡатындарына, балаларына наградалар тапшырған ауыр минуттарҙы күтәрә алмай, сәхнә артындағы буш бүлмәгә инеп, ғәҙелһеҙ донъянан йәшенергә теләгәндәй, ишеген ябып, мең төрлө уйҙарымды йырып сығыр юл эҙләп ҡаңғырасаҡмын әле...

Герой партаһына төшөп сәсрәгән күҙ йәше лә ҡоростан булғандыр. Юҡҡамы ни, Ер тетрәне, Ҡояш һүнә яҙҙы.

*"Герой партаһы"на тамған йәштән,*
*Ҡолаҡ тондо,*
*донъя сайҡалды!*
*(Беҙҙең халыҡ ныҡ шул,*
*сабыр инде),*
*Әсә - тора!*
*Донъя - саҡ ҡалды...*

...Артурға ун бер йәштәр тирәһе булдымы икән. Ата-әсәһе эштә, өйҙә - береһенән-береһе бәләкәйерәк ике һеңлеһе һәм ул. Хужалыҡ уның яуаплылығында. Көтмәгәндә, соланда электр сымдары тоҡанып китә. Кеҫә телефондары юҡ заман. Икеләнергә, оҙаҡ уйларға ла ваҡыт тар. Шатыр-шотор янған ялҡын сымдар буйлап ҡыйыҡҡа үрмәләй. Һеңлеләрен ҡапҡа тышына алып сыҡҡас, бергәләп ҡасырға ла була ине. Әммә бындай мәлдәрҙә һыу ҡулланырға яраймы-юҡмы икәнлеген дә аңламаған малай, тыуған йорто өсөн көрәшергә ҡарар итә. Солан эсендәге янған, төтәгән урындарға, эләгә-йығыла, көс еткеһеҙ биҙрәләр менән, йүгереп йөрөп һыу һипкеләй ҙә, ағас баҫҡыс табып килтереп, ҡыйыҡ башына менеп китә.

Тыуған йортҡа ут ҡапҡас... Хәҙер инде тыуған йорто - Рәсәй. Малай сағында халҡы ике һеңлеһе булһа, һәр ваҡыт шул ике ҡыҙҙан торған "халҡын" ҡурсаланы, яҡланы, һаҡланы. Шунан - үҙенең ғаиләһен, ике ҡыҙын, улын. Бөгөн инде Рәсәй "солан"ына ут төртөп маташалар. Соланда шатырлаған бәләкәй генә ялҡын да, ваҡытында һүндермәһәң, юлына ҡыйыуҙарса ҡаршы сығып баҫмаһаң, ҙурайып, ҡомһоҙланып, күҙ асып йомған арала ҡыйыҡҡа үрмәләй икәнлеген яҡшы аңлай Артур. Тыуған ил ҡыйығына...

Махсус хәрби операция башланыуға ярты йыл тигәндә, 2022 йылдың сентябрендә, әрме хеҙмәтен дә үтмәгән өс бала атаһы, үҙенең ныҡышмалығы менән контрактҡа ҡул ҡуйған Аҫҡар егете Артур Ғиләжев, Украина еренә аяҡ баҫа. Буй тиһәң, буйы, төҫ тиһәң, төҫө бар. Ҡырҡты үткән ҡарсығалай ҡыйыу ҡарашлы ир-егеткә хәрби кейем дә, ҡорал да килешеп тора. Позывнойы - "Голландец". Был саҡырыу исемен һайлауы сер булып ҡалды. Әлфиә апай ҙа яуап бирә алманы был һорауыма.

Әлфиә апай менән йыш ҡына телефондан аралашып, яҙышып торҙоҡ. Иртәгә Баймаҡ хакимиәтенә йомош менән юлға сығам, тигән хәбәрен ишеткәс тә, мин дә йыйына башланым.

Яҡында ғына теҙелешеп киткән эскәмйәләрҙең берәүһенән урын алабыҙ.

- Күп һөйләмәне шул Артур ундағы хәлдәр тураһында. Бәлки, ярамағандыр ҙа. Мин бит уның хәрби операцияға йыйыныуын да белмәй ҡалдым... - тип һүҙ башланы.

Тәүге осрашҡандағы кеүек, әсә керпектәрендә йәнә лә зәңгәр "Ер шары" әйләнә башланы. Герой партаһына төшөп, шартлаған ҡорос - күҙ йәше. Йыл ярымдан ашыу тыныслана алмай, улым, тиеп ғазапланған әсәне бер һүҙ ҙә йыуата алмаҫтай. Ваҡыт ҡына дауа.

Ауыр тынлыҡтан, ҡайҙандыр пәйҙә булған, тура беҙгә табан осоп килгән аҡ ҡына күгәрсен ҡотҡарҙы. Эскәмйәнең теге башына барып ҡунаҡланы ла, беҙгә алмаш-тилмәш ҡарап, гөрөлдәргә тотондо. Әлфиә апай йылмайғандай итте лә, ашығып, сумкаһынан телефонын сығарҙы. Кәйефе күтәрелгәндәй булып китте.

- Мин һиңә, Фәнис ҡустым, бер фотоһүрәт күрһәтергә тейешмен. Өфөнән скульптор ебәрҙе. Батырҙар аллеяһына ҡуйырға Артурҙың тулы һынын эшләтергә биргәйнем. Игорь былай тип һөйләне. Бер көн мастерскойына килеп инһә, һәйкәлдең башында күгәрсен ултыра икән. Тәҙрә форточкаһы ла турғай һыйырлыҡ ҡына. Ул ғына ла түгел, ҡасырға ла уйламай. Ярай, улайһа, тиеп, тегегә сығыр юлын иркенерәк итеп, тағы ла бер тәҙрәне астым да, эштәрем менән булаша башланым, тей. Бер нисә минуттан ғына ҡош тыныс ҡына осоп сыҡҡан да алыҫ аҡ болоттарға китеп юғалған...

Төрлө уйҙарҙан ҡапыл тәндәр зыбырҙап китә. Әлфиә апай аша ынтылып, эскәмйәләге ҡошто байҡайым, ҡайһы аралалыр шым ғына юҡҡа сыҡҡан...

- Яңыраҡ Белгород өлкәһенең Шебекино ҡалаһына улымдың һуғыш юлы үткән ерҙәрен күрергә барып ҡайттым. Һуңғы кисерештәрен, уйҙарын белергә теләнем... Унан алда Тоцкийҙа хәрби часында ла булдым. Нисектер осраҡлы ғына Артурҙың документтарынан белеп ҡалдым: 2022 йылдың ноябрендә Херсон йүнәлешендә хәрби бәрелештәрҙә ҡатнашалар. Ҡамауға ҡалып, алты кеше генә кире сыға. Яҡын дуҫтарының береһе һәләк була. Тағын бер ҡаты яралы дуҫы менән, урындағы халыҡ ярҙам итеп, нисектер ҡотолалар, әммә улымдың да үпкәһенән ярсыҡ үтә сыҡҡан була. Госпиталгә эләгәләр. Йүнәлеп, бер аҙ аяҡҡа баҫҡас, ҡыҫҡа ғына ялға ла ҡайтҡайны. Часына барыуымдың сәбәбе шул ине: "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән наградланған булған, ә миҙал бер ерҙә лә юҡ. Үҙе менән бергә шартлағандыр, тигән уйҙар ҙа килгеләне...

Мин барып ингәндә батальон командиры урынында ине. Йомошомдо әйттем. Комбат төпкө бүлмәнән һауыты менән тапшырылмаған миҙалды алып сыҡты. Нисек кенә инәлһәм дә, бирмәнеләр, тотоп ҡына ҡараным. Үҙегеҙҙең хәрби комиссариатҡа килер, тинеләр. Миҙал өсөн алты айға һуҙылған көрәш китте. Ниндәйҙер генералдың номерын табып, уға ла барып етештем. Награда урынынан ҡыбырланы, әммә, яңылыш ниндәйҙер танк дивизияһына барып юлыҡҡан. Бик күп борсолоуҙар, төңөлә яҙыуҙар аша үткәс кенә, Сибай хәрби комиссариатына килеп етте. Бер аҙ ваҡыттан үҙебеҙҙең Аҫҡарҙан шылтыраттылар. Шунда уҡ елдереп барып та еттем. "Батырлыҡ өсөн" ми-

*✓ Украина һалдаты, автоматын әҙер генә тотоп, нығытмаға яҡынлай. "Сдавайся!" - тип ҡысҡыра. Артынан камералыһы атлай. Эстән Артурҙың тауышы ишетелә һәм… көслө шартлау!*



ҙалы әле үҙемдә, ҡәҙерләп кенә һаҡлайым...

Был ҡатындың үҙенә, батырҙарса һәләк булған яугирҙың әсәһенә, иң ҙур орденды тапшырырға кәрәктер...

Кискә мине Әлфиә апайҙан бик ауыр смс-хаттар көткән. Килгән видеоларҙың тәүгеһен асам. Камераны Артур үҙенә бора. Бер нәмә лә һөйләмәй. Артта ла, алда ла һалдаттар атлай. Туҙан уйнап тора. Йәнәшәләренән генә бер туҡтауһыҙ геүләп техника үтә. Уларҙы, әлбиттә, төшөрөргә ярамайҙыр. "Голландец" - Артурҙың күҙҙәре генә әсәһенә низер һөйләйҙер һымаҡ.

Дауаханала ятып, ялға ҡайтып килгәс, Артурҙы Белгород өлкәһе Шебекино ҡалаһы янында урынлашҡан частҡа яңы ғына хәрби хеҙмәткә килгән ун һигеҙ йәшлек малайҙарға отделение командиры итеп тәғәйенләйҙәр, уларҙы һуғыш алымдарына өйрәтергә һәм сик һағына баҫырға ҡушалар. Кесе сержант званиеһы бирәләр. Шул малайҙарға ағай ҙа, атай ҙа урынына 2023 йылдың февраленән апрелгә тиклем йөрөй, йоҡоларын да, ашарҙарын да ҡайғыртып. Уңайы сыҡҡан һайын, ныҡышмалы рәүештә үҙен алғы һыҙыҡҡа күсереүҙәрен һорай. Күпмелер ваҡыт снайпер булып хеҙмәт итә. Һәм, ахыр ҙа, һаулығы нығынғас, штурмовиктар рәтенә баҫа. Херсон, Запорожье, Луганск, Сваты йүнәлештәрендә дошманға ҡаршы көрәшә. 2023 йылдың сентябрь аҙаҡтарында әсәһенә, бәлки, оҙаҡ элемтәгә сығып булмаҫ, тип әйтә. 3 октябрҙә, ҡатынына шылтыратып, ғаиләһе менән һөйләшә, һеңлеләренә яҙа.

Бына ул дошмандар төшөргән ҡәһәрле видео - Асҡар егете Артурҙың һуңғы секундтары. Таныйым, ошоғаса бер нисә тапҡыр "Бәйләнештә" селтәрҙәрендә ҡарағайным. Әлегә урап үтәм, асмайым. Аудиоларҙы тыңлап, барыһын да бер епкә теҙеп маташам.

"Красногоровка яғы, Авдеевка йүнәлеше буламылыр, шулайтып минең бала юғалды... Мин түҙмәй башланым, етенсе октябрь булып китте", - Әлфиә апайҙың күҙ йәштәре менән һөйләгәнен тыныс ҡына тыңлап булмай. Эстән генә уйлап ҡуям, яраларҙы ҡуҙғытып, минең нимәлер яҙып маташыуым дөрөҫ эшме икән? Ныҡлы уҡ булмаһа ла, үҙемсә ошондай ҡарарға киләм: ҡабат һорауҙар бирмәҫкә...

"Унда-бында шылтырата башланым, министерствоһы ла ҡалманы, йүнле яуап ала алмайым. Ун дүртенсе октябрь булып китте, хәбәр юҡ минең малайҙан... Ун бише инеме... Төшөмә керҙеме, әллә күҙемә күрендеме... Өр-яңы кейемдә, миңә ҡарап торҙо ла юҡҡа сыҡты... Әлеге шул... Йәне килеп хушлашҡан булғандыр инде үҙенсә... Бер һүҙ ҙә әйтмәне... Шул төндә ошо видео осраны миңә интернетта... Рәсәй һалдаты әсир төшмәҫ өсөн, автомат төбәп торған дошман менән үҙен бергә шартлатҡан... Нисектер... Бәлки, бала менән әсә араһындағы, беҙ аңламаған берәй мәңгелек бәйләнештер... Шуны күреп, ышанманым... Әллә ышанырға теләмәнем. Тауыш Артурҙыҡы ине... Ҡыҙҙарыма ебәрҙем. Юҡ, әсәй, тауыш ағайҙыҡы түгел, тинеләр. Күңелдең иң төбөндә шик булһа ла... Әсә үҙ балаһының тауышын танымай буламы инде... Ә ул оҡшаған... Нисәмә мәртәбә тыңланым... Шулайтып мин уны таптым... Класташы әйтте: ул - Артур. Мең тауыш араһынан да таныр инем, тине... Шулайтып, минең балам һәләк булып ятып ҡалды... Нисек сығарғандарын белмәйем... Беҙҙең бер волонтер бар, Ҡырым яғынан, исемен әйтә алмайым, шул табып бирҙе... Ниндәй юлдар менән мәғлүмәт алғанлығын да һөйләргә ярамайҙыр... Артур ҡамауға ҡалғас, пленға төшмәҫ өсөн үҙе менән бергә сит ил наемнигын шартлатҡан... Ул дошманды ун һигеҙенсе октябрҙә ерләгәндәр. Хәл ун дүртенсе октябрҙә була... Егерме бере ҡағыҙ ҙа килде... Атаһы ныҡ ҡысҡырҙы ҡапҡа эсендә... Мин өйҙә юҡ инем, юлда инем... Ауыр хәл булды... Йөҙ ҙә ун саҡрым Горловкаға тиклем уны алып килгәндәр, ташламағандар... Рәхмәтлемен Хоҙайыма, кәүҙәһе ҡайҙалыр юғалып ятып ҡалманы... Шулайтып, минең балам ҡайтты. Егерме бише ҡайтырға тейеш ине, ямғыр яуҙы... Самолет османы... Егерме алтынсы октябрь ул өйҙә булды... Сәғәт егерме минут алтынсы ине... Уны өйгә индерҙеләр... Мин сәғәт ун икегә тиклем эргәһенән китмәнем... Битен күрҙем... Гроб цинк ине... Бите күренә ине... Сығарыр алдынан... Мулла уҡып бөткәйне... Ике эре күҙ йәшем сыҡты... Шулайтып... Хушлаштым..."

Һәр һүҙе әсәнең әсе күҙ йәше менән мансылған аудионы үҙгәрешһеҙ тулыһынса ҡуйырға тырыштым...

Баяғы дошман камераһы төшөргән видеоға әйләнеп ҡайтам да, йәнә ҡарайым. Украина һалдаты, автоматын әҙер генә тотоп, нығытмаға яҡынлай. "Сдавайся!" - тип ҡысҡыра. Артынан камералыһы атлай. Эстән Артурҙың тауышы ишетелә һәм... көслө шартлау! Яҙма шул урында өҙөлә... Яҙмыштар өҙөлә шул урында. Өс бала атайһыҙ ҡала. Йәштән ҡауышҡан ҡатыны низәр кисергәндер? Ҡурсалап, үҙе балалар баҡсаһына алып барып, ҡаршы алып, һаҡлап ҡына үҫтергән ике һеңлеһе... Хәҙер ике йылға яҡын, көнө-төнө, күңеле менән Украина ерендә йөрөгән әсәһе...

Һис һүҙһеҙ, пленға төшмәҫ өсөн, дошманыңды ла, үҙеңде лә үҙ ҡулдарың менән шартлатыу - ҙур батырлыҡ! Герой! Матросов та бит бер тапҡыр һәләк булған, ә Артурға герой исеме алыу өсөн өс тапҡыр шартларға кәрәк инеме ни... Һуңғы уйҙары ниндәй булғанлығын беҙ белә алмаҫбыҙ инде. Әммә, шуны әйтә алабыҙ: Рәсәй һалдаты, башҡорт егете, тигән исемдәргә ул тап төшөрмәне!..

- Беҙҙе, яуҙа улдарын юғалтҡан әсәләрҙе, һәләк булған яугирҙарҙың ҡатындарын былтыр Өфөлә үткән сарағa саҡырҙылар. Артур һәләк булғанға күп ваҡыт та үтмәгән. Күңелдәге яралар ҙа уңалмаған. Уңалырмы икән ул? Ике йыл үтте бит, әҙ-мәҙ ысҡындырһа ла, еңел түгел шул... Барып еттем. Зал бик ҙур ине. Кешенең күплеге! Һәм... Мине сәхнәгә саҡырып сығарып, МХО-ла батырҙарса һәләк булған Артур Ғиләжевтың әсәһе тип, "Йыл әсәһе" исемле миҙал тапшырҙылар. Бөтә зал аяғүрә баҫып алҡышланы! Ныҡ тулҡынландым! Күҙҙәрҙән йәштәр тубырлап ағып тора. Әллә хәсрәт йәштәре, әллә ғорурлыҡ. Тынғы табалмай йөрөгән әсәгә күп кәрәкме инде, бер йылы һүҙҙән дә тамаҡҡа төйөр тығылып, иларға ғына торһаһың. Бына шулай. Шунда, тоноп барған күҙәрем аша ҡул сабыуҙан туҡтамаған халыҡҡа ҡарап торғанда, улымдың исемен мәңгеләштереү тураһында тәүге уйҙар килде....

Ауылда батырҙар аллеяһы булдырыу өсөн күпме ишектәр ҡаҡҡан ул, күпме тупһалар тапаған, күпме саҡрым юл үткән. Ҡайһы бер хужаларҙан да, башҡаларҙан да былай ҙа туҡтауһыҙ әрнеүҙәр, нәфрәт, хәсрәт менән һыҡҡан йөрәген сатнатырҙай һүҙҙәр ишетеп, әллә күпме йоҡоһоҙ төндәр үткәргән. Ишетеп-белеүемсә, аллея асыу өсөн Өфө генә түгел, Мәскәүгә лә барып еткән, бер генә лә түгел, ике тапҡыр. Көслө ҡатын! Ысын әсә!

Күп ҡаршылыҡтарға осрай ул. Ниәтенә ҡаршы төшөүселәр ҙә табыла. Һуғыш бөтһөн дә, шунан уйларбыҙ, тигән фекерҙәр ҙә яңғырай. Әлегә ундай эшкә аҡса юҡҡа ла һылтаналар. Әлфиә апайҙың әйтеүенсә, һәйкәлдең йөҙө улыныҡы булыу оҡшамай ҡайһыларға. Билдәһеҙ һалдат ҡуйырға кәрәк, тиеп тә ҡарайҙар... Ундай ҙа һәйкәл кәрәк, әлбиттә, тик бында бит эштәр башҡасараҡ тора. Әсә үҙ теләге менән үҙенең һәләк булған улына хөкүмәт бүлгән аҡсаға эшләткән уны! Күңелдәр тар булмаһа, ер етерлек бит! Ошо тыуған ер өсөн ауған түгелме ни Артур?

Өфө сәхнәһендә, әллә күпме халыҡ алҡышлағанда, күҙ йәштәре аша биргән һүҙен, Әлфиә апай яңыраҡ ҡына - 2025 йылдың августында тормошҡа ашыра. Артурҙың һыны ла үҙ ауылына килеп, батырҙар аллеяһында үҙенең лайыҡлы урынын ала...

2025 йылдың сентябрендә тынғыһыҙ әсә күпме ваҡыт уйлап та, һаман килтереп сығара алмаған тағын да бер хыялын тормошҡа ашыра. Улы өс-дүрт ай йәш һалдаттар менән һаҡлаған Шебекино ҡалаһына юллана. Автомобиль яллап, ике көн, ике төн ял итә-итә баралар. Рулдә - үҙе хәрби операцияла ҡатнашҡан, әлеге ваҡытта һалдатлыҡтан бушатылған, ышанысыл ир-егет. Интернет йүнләп эшләмәй, юлда кешеләрҙән һораша-һораша баралар. Яңы Оскол ҡалаһы янында һулаҡайға китер урында, уңға боралар. Ике сәғәт тирәһе йөрөгәс, ҡабат шул тирәгә килеп сығалар. Тағы ла юл белешәләр, хәҙер инде дөрөҫ йүнәлеш алалар, әммә, яңылышып, йәнә лә бер боролошто үтеп китәләр. Тураға ҡыуалай ҙа ҡыуалайҙар. Асфальт яҡшы, тигәндә лә була, урыны менән йүнәтелгән. Ҡарайып, янған һымағыраҡ ерҙәре лә бар. Юлда бер машина ла осрамай. Ике сәғәт тигәндә, ниһайәт, Шебекино районындағы Нежеголь ауылына инәләр...

- Улыма һәм уның егеттәренә һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙып торған, аҙаҡ Артурҙы эҙләшеүҙә, һуңғы минуттарын асыҡлауҙа күп көс һалған, әле лә минең менән яҙышып торған ирекмән Татьянаның йортона килеп туҡтаныҡ. Әсәһе Елена килеп сыҡты ла ҡосаҡлап алды. Тәүге һорауы шул булды: "Ҡайһы юлдан килдегеҙ?" Мин һөйләп биргәс, һеҙ бит "үлем юлы"нан үткәнһегеҙ, тине. Аяҡтарым ҡалтырап китте... Йыш ҡына унда дрондар һөжүм итә икән. Улым үҙе фәрештә булып һаҡлағандыр,- ти ҡыйыу әсә.

...Бына мин дә батырҙар аллеяһында. Автомат тотҡан, хәрби кейемдәге һалдат һәйкәленең уң яғына "Батырҙарыбыҙ - ил терәге!" тиеп яҙылған. Һул яғында - юғарыла осоп барған торналарға ҡулдарын һуҙған әсә һүрәте... Яҡында ғына ятҡан юл ситенә автомобиль килеп туҡтаны. Эсенән эре һары сәскәләр тотҡан апай менән ун бер-ун ике йәштәр тирәһендәге малай төштө. Аллея яғына боролдолар. МХО барышында батырҙарса һәләк булған яугир ҡаршыһында бер аҙ тын ғына торғас, малай ололарса етдилек менән: "Ҡартәсәй, мин дә ҙурайғас атайым һымаҡ герой булам", - тине. Апай, тыныс ҡына йылмайып, хуплағандай, ейәненең арҡаһынан һөйөп алды...

**Фәнис СИРБАЕВ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҠОЯШ ЯРСЫҠТАРЫН БЕРГӘ ЙЫЙҺАҠ...



**Яҙыусы Максим Горькийҙан: "Балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәр ниндәйерәк булырға тейеш?"- тип һорағандар. Ул: "Ололар өсөн яҙылғандары һымаҡ, тик тағы ла яҡшыраҡ булырға тейеш", - тип яуап биргән.**

Совет йылдарында яҙыусыларҙың, ысынлап та, балалар өсөн ололарға тәғәйенләнгәндән дә яҡшыраҡ әҫәрҙәр ижад иткәнен беләбеҙ. Быға, бәлки, көслө цензура аша үткәреү ҙә булышлыҡ иткәндер. Ул йылдарҙа С.Михалков, А.Гайдар һымаҡ классиктар киң билдәлелек яуланы. Әлбиттә, бөгөн дә исемдәре бөтөн илгә билдәле балалар яҙыусылары барҙыр, тик мин уларҙы белмәйем. Әле хатта йәнһүрәттәрҙе лә ҡарарлыҡ түгел. Әкиәттәрҙе лә боҙоп, үҙгәртеп төшөрәләр. Бик һирәктәре генә балаларға ғына түгел, ә ололарға ла фәһем бирерлек.

Шундай бер йәнһүрәтте әле күптән түгел һоҡланып ҡараным. Уның нисек аталғанын уҡып өлгөрмәнем, шуныһы йәл. Ҡурсаҡтар (анимация) ярҙамында төшөрөлгән был йәнһүрәт тураһында һеҙгә лә һөйләп үтәйем әле. Бер кескәй генә ҡуян тау башына менеп ултырып алған да, күбәләк тотҡос менән бәләкәй болоттарҙы эләктерә лә, тәмләп ҡарай. Береһен тәмләп ҡарай ҙа, "еләк тәме килә", ти, икенсеһенән, "алма тәме килә", ти ҙә, осороп ебәрә. Шулай уйнап ултырғанында яңылыш ҡояшты эләктереп ала ла, шатланып, тәгәрәтеп, тауҙан түбән төшөп барһа, төлкө балаһын осратып, уға ҡояш ярсығын бүләк итеп биреп китә. Кемде осрата - шуға ҡояш ярсыҡтарынан өлөшөн сығара был. Балыҡ тотоп ултырған айыу балаһы ҡуян балаһы биргән ҡояш ярсығын тәмләп ҡарай ҙа: "Бер тәме лә юҡ", - тип, ярсыҡты күлгә ырғытыуы була, Ер йөҙөн ҡараңғылыҡ ҡаплай. Өкө генә: "Мәңгелек төн миңә бик ярап ҡалды бит әле", - тип ҡыуана. Ә башҡа йәнлектәр, үҙҙәренең ҡояш ярсығы яҡтыһына, йылыһына ғына һыйынып, өңдәренән ҡараңғылыҡҡа сығырға ҡурҡып тик ултыра, ти. Шул саҡ йомарт ҡуян балаһы: "Бәлки, беҙгә ҡояш ярсыҡтарын яңынан бергә йыйырғалыр?"- тигән һорау ҡуя. Йәнлектәр йүгерешеп йөрөп ҡояш ярсыҡтарын бергә йыя, әммә ул китек булғас, күккә күтәрелә алмай. Шул саҡ айыу балаһы күл төбөндәге ҡояш ярсығын иҫенә төшөрөп, күлгә сума, уны сығарып, беркетеүе була, ҡояш балҡып, нурын сәсеп, күккә күтәрелеп тә китә. Барыһы ла ҡыуаныша...

Ошо йәнһүрәтте ҡарағас, башыма: "Ниндәй оло аҡыл йәшерелгән был йәнһүрәткә..." - тигән уй килде. Шәхсән үҙем был әҫәр беҙҙең башҡорт иленең тарихын, ысынбарлығын һөйләй, тип ҡабул иттем. Ҡәүемебеҙҙең төрлө яҡтарға таратылған "ярсыҡтарын" беҙ ҡасан бергә йыйырбыҙ икән, тигән фекер барлыҡҡа килде. Ысынлап та, һәр беребеҙ кескәй генә ҡояш ярсығы яҡтыһында, йылыһында үҙ өңөбөҙҙә-өйөбөҙҙә ултырабыҙ түгелме?

**Айгөл АХУНОВА.**

✓ *Автомобилдә китеп барғанда хатта пассажир алырға ярамай ине заманында. Ә хәҙер һәр икенсе водитель - таксист. Бигерәк тә вахта ысулы менән эшләгәндәр араһында буш ваҡытта бер аҙ аҡса эшләп "алыусылар" байтаҡ.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТӨҪЛӨ ТӨШТӘР КҮРӘҺЕҢМЕ?

■ Сағыу төштәрҙе йыш күрәһегеҙме? Тимәк, һеҙҙең интеллект кимәлегеҙ бик юғары. Ғалимдар фекеренсә, төҫлө төштәр күрергә һәм уларҙы иҫтә ҡалдырырға интеллектары юғары булған кешеләр генә һәләтле. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә ике меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Уларҙың ҡайһы берҙәре йоҡлаған саҡта төш күрһәләр ҙә, уянғас уны иҫләмәүҙәре тураһында белдерә. Тикшереүҙә ҡатнашыусыларҙың бер өлөшө бөтөнләй төш күрмәүҙәрен әйтә. Тик аҙҙар ғына даими рәүештә төш күргән һәм уларҙы деталләп һөйләй алған. Был һынауҙар үткәс, тикшеренеүселәр уларҙың интеллектуаль һәләттәрен тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән дә инде.

■ Тикшеренеүсе ғалимдар белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күңелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һүрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотонор алдынан экспертлар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

■ Тикшеренеүсе ғалимдар әйтеүенсә, эш ваҡытында килеп тыуған көсөргәнештән эш өҫтәле янынан китмәй генә ҡотолорға була. Быны өсөн улар өс ысул тәҡдим итә. Беренсеһе - өҫтәл тартмаһына фисташка, кешью, миндаль һәм грек сәтләүеге һалып ҡуйығыҙ. Был сәтләүектәр стресты еңеләйтеү көсөнә эйә. Уларҙың составындағы витаминдар, аминокислоталар һәм антиоксиданттар стресс гормоны кортизол тәьҫирен баҫып, бәхет гормоны - серотонин бүленеп сығырға ярҙам итә. Икенсе ысул - акупунктур массаж. Белгестәр нервыларҙы тынысландырыу өсөн ҡолаҡ япраҡтарына массаж яһарға тәҡдим итә. Массаж мәлендә ҡолаҡта урынлашҡан биологик әүҙем нөктәләргә яһалған баҫым организмдағы бөтөн процестарҙы яйға һала, эске ағзалар эшмәкәрлеге яҡшыра, кәйеф күтәрелә. Бер сынаяҡ ҡара сәй ҙә нервыларҙы тәртипкә килтерергә булышлыҡ итер. Был эсемлектә файҙалы матдәләр һәм антиоксиданттар бик күп. Шуға ла сәй эсеүгә өс-дүрт минут ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ.

■ Бөгөн киң танылыу алған 3D-сеанстарға барыһы ла йөрөй алмай, сөнки фильм ҡараған ваҡытта уларҙың башы әйләнә. Белгестәр был сирҙе кибер ауырыу тип атай. Бәҡтинән, кинотеатрҙарҙа бирелгән күҙлектәрҙең линзаһы менән күҙ хәрәкәттәре тура килмәй. Йәғни экрандағы объект кешегә ҡарай хәрәкәт иткән саҡта күҙ алмалары мөйөшө үҙгәрә, ә линзалар - юҡ. Шуға ла кеше экранға ни тиклем яҡыныраҡ ултыра, шул тиклем тиҙерәк ул үҙен насарыраҡ тоя башлауы ихтимал. Япония тикшеренеүселәре әйтеүенсә, ауырлы ҡатындарға, ололарға, йөкһөҙлөк менән яфаланыусыларға бындай сеанстар бөтөнләй тыйыла.

■ Ҡытайҙа етештерелгән уйынсыҡтарҙың 90 проценты - сәләмәтлек өсөн зарарлы. Уларҙың йә хәүефһеҙлеген билдәләүсе документтары юҡ, йә санитар-химик, токсикологик күрһәткестәре тап килмәй, йә маркировкаһы дөрөҫ түгел. Шулай уҡ "дөрөҫ булмаған" уйынсыҡтарҙың тауышы ла ҡолаҡты ярып алып бара, ти белгестәр. Магазин кәштәләрендә составында фенолформальдегид кеүек ағыулы матдә табылған уйынсыҡтар ҙа осрай. Бындай уйынсыҡтар балаларҙың тын юлына насар тәьҫир итә, аллергия тыуҙыра.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**Өләсәй тәрбиәһе - борон-борондан халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәренең төп һаҡлаусыһы һәм яҡлаусыһы. Әлбиттә, олатай-ҡартатайҙарҙың да өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Шулай ҙа һәр саҡ яу сапҡан аҫыл ир азаматтарҙың ғаиләһен бағып ҡына ултырыр ваҡыты булмаған. Шуға күрә лә "ил инәһе", "ағинәй" тигән төшөнсәләр халҡыбыҙ йөрәгендә лә, тарихында ла үҙ урынын алған.**

# ӨЛӘСӘЙ БУЛҺА ӨЙ ТҮРЕНДӘ...





Беҙҙең заманда һәр ғаилә өләсәй-ҡартәсәй тәрбиәһенә, хәстәренә бигерәк тә мохтаж, тиер инем. Сөнки күпселек атай-әсәйҙәр ипотекаһын тиҙерәк түләп бөтөү, уны йыһазландырыу өсөн алған кредиттарын ҡаплау өсөн алһыҙ-ялһыҙ эшләргә мәжбүр. Балалар үҙ ҡарамағына, дөрөҫөрәге, интернет "тәрбиәһе"нә тапшырылған. Бәғзе ата-әсәләр бала ҡараусыларҙы яллай. Тик ят кеше бәпескә тәмле ҡоймаҡтарын ҡойоп, төнгөлөккә башынан һыйпай-һыйпай батырҙар тураһында әкиәттәрен һөйләй һалып барырмы икән?..

Баймаҡ районында эшләп килгән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының эшен күҙәтеп, бындағы апай-инәйҙәрҙең бар бәләкәстәргә өләсәй булып бөтөүен күреп ҡыуанам. Улар йышыраҡ балалар менән эшләй, улар өсөн төрлө саралар үткәрә. Балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә лә иң көтөп алынған ҡунаҡтар ул - ағинәйҙәр. Сөнки улар булған ерҙә йылылыҡ, ҡыҙыҡлы байрамдар, һөйләшеүҙәр һәм, әлбиттә, тәмлекәстәр.

Ҡышҡы каникул осорон ҡыуанып та, бер аҙ хәүефләнеп тә көтәләр. Сөнки, сер түгел, йыл һайын нәҡ ошо мәлдә төрлө хәүеф-хәтәр йышая. Баймаҡ ағинәйҙәре, һәр ваҡыттағыса, балаларҙың ҡышҡы каникулын файҙалы үткәреү, ә атай-әсәйҙәрен ял иттереп алыу өсөн төрлө саралар ойошторҙо. Мерәҫ ауылы ағинәйҙәре, мәҫәлән, "Егет - яуҙа, балалар тауҙа һынала" исемле бик ҡыҙыҡ ярыш үткәрҙе. Был көндө тау шыуырға балалар ҙа, апай-инәйҙәр ҙә йыйылды. Ағинәйҙәр балаларҙың тауҙан нисек шыуыуын да, уларҙың саналарын да баһаланы. "Иң боронғо сана" ярышында - Бәхтигәрәй ауылынан Илназ Ямантаев, "Замана санаһы" номинацияһында Зиннәт Ситдыҡов еңһә, "Иң етеҙ малай" - Илсур Ситдыҡов, "Иң шәп ҡыҙ" Баймаҡ ҡалаһынан Нәйлә Усманова булып сыҡты. Һәр балаға бүләктәр бирелде. Шулай уҡ ярышҡа ғаиләһе менән килгән Ямантаевтар һәм Ситдыҡовтар ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Балалар төрлө уйындарҙа ҡатнашып арығандан һуң, өләсәйҙәре әҙерләгән самауыр сәйе эсеп, тәмлекәстәр менән һыйланды.

Ә Ишей ауылында уйын майҙансығы балаларҙың, әсәйҙәрҙең, ейәнейәнсәрҙәр менән өләсәйҙәрҙең шат тауыштарынан көн дә гөрләп торҙо. Мәктәп, ауыл китапханаһы хеҙмәткәрҙәре, ағинәйҙәр тарафынан балалар өсөн бик күңелле ҡышҡы уйындар үткәрелде. Тауҙан сана менән шыуып төшөү ярышында балалар менән бер рәттән әсәйҙәр ҙә, хатта өләсәйҙәр ҙә үҙ оҫталығын күрһәтте. Балаларҙың барыһына ла бүләктәр тапшырылды.

Ағинәйҙәр әҙерләгән билмән, тәмле-татлы бәлеш, бөһорап ултырған самауыр янында шат тауыштар яңғыраны. Ошондай күңелле ял сәғәттәре ойоштороған ағинәйҙәр, әсәйҙәр, өләсәйҙәргә, Лариса Ҡарасурина, Рәсилә Аҙнағоловаға нисек һоҡланмаҫһың!

Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров 2026 йылды - Ҙур һәм татыу ғаилә йылы тип иғлан итте. Был йәһәттән дә Баймаҡтар беренсе булып йылды асты тиергә була. Йыл һайын оҙайлы ҡышҡы ялда Ишбирҙе ауылынан Ғайсиндар тоҡомона ҡараған ғаиләләр (ҡырҡлаған кеше) үҙҙәренә, балаларына күңелле ял ойоштора. Улар "Зарница" уйыны, саңғы ярышы, ҡышҡы һабантуй үткәрә, күмәкләшеп ҡырға ла сыға. Быйыл да Ғайсиндар, балалары, ейән-ейәнсәрҙәре өсөн сана шыуырға урын әҙерләп, трактор менән юл һалып, ҡышҡы һабантуй ойошторҙо. Көнө буйы рәхәтләнеп сана шыуып, төрлө уйындарҙа ҡатнашып, тәмле сәйҙәр эсеп, ял итеп алдылар.

Ғаилә менән ял итеү, өләсәйҙәрҙән, ағинәйҙәрҙән алған аҡыл, өгөтнәсихәт балаларҙы инсафлы, тәүфиҡлы итеп тәрбиәләүгә булышлыҡ итә. Шуға күрә нәҫел тамыры бер ҡасан өҙөлмәһен. Өләсәйҙәр өй түрендә ултырған ғаиләләр ныҡ, берҙәм һәм ишле була. Ошо хаҡта онотмайыҡ!

Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# АҠСА ЭШЛӘҮ АЛЫМЫН ӘҘЛӘЙЕК!



**Беҙ мәктәптә уҡығанда алтынсы класта яңы йылға тиклем арифметика исемле фән өйрәндек, икенсе ярты йыллыҡта алгебраға күстек, бер нисә йылдан уларҙы берләштереп, математика тип атанылар.**

Яңы уҡыу йылы башланғас, өйгә бер мәсьәлә бирҙеләр, бөтә класс менән сисә алмайбыҙ. Интернатта киске аштан һуң тәрбиәсебеҙ урманға алып китте. Бына малайҙар волейбол уйнай башланы, мин туп тотам тип үрелгәйнем, мәсьәлә сиселеше ҡайҙандыр башҡа төшкән кеүек булды. Тәрбиәсебеҙҙән ҡағыҙ, ҡәләм алып яҙып бирҙем. Икенсе көнөнә уҡытыусыбыҙ был хәлде һорашты ла бер һум аҡса бирҙе. 20 тиненә газлы һыу, 8 тингә коржик алып, урманға киттем, икенсе мәсьәләне лә сисеп ҡайттым. Тотонолмай ҡалған тиндәр мин эшләп алған беренсе интеллектуаль эш хаҡы булараҡ хәтергә ҡалған.

Беҙ, совет замананы кешеләре, "эшләмәй табылған мал" төшөнсәһен яҡшы хәтерләйбеҙ. Автомобилдә китеп барғанда хатта пассажир алырға ярамай ине заманында. Ә хәҙер һәр икенсе водитель - таксист. Бигерәк тә вахта ысулы менән эшләгәндәр араһында буш ваҡытта бер аҙ аҡса эшләп "алыусылар" байтаҡ.

Бөгөн аҡса эшләйем тиһәң, бар юлдар ҙа асыҡ. Һаулығың ғына булһын. Элек һәр ауылда тимерсе була торғайны, ул нағышлап ҡапҡалар ҙа, йорт-ҡура донъя көтөргә төрлө кәрәк-яраҡ та эшләп бирер ине. Бөгөн иретеп йәбештереүселәр был эште, ҡасып-боҫмай, рәсми рәүештә башҡара ала. Улар ҡарамағында төрлө ҙурлыҡтағы торба бөгөү ҡулайламалары, һатыуҙа әҙер биҙәүестәр. Ҡайһы бер оҫталарҙың продукцияһына һоҡланып та, көнләшеп тә ҡарап тораһың.

*✓ Әйтер ине аҡһаҡал: "Әҙәм балаһы барыһын да үҙе теләгәнсә хәл итә ала, яҙмышың - үҙ ҡулыңда. Кеше эшләй алмаған эштәр юҡ. Тик быны өсөн бер мөһим шартты үтәү мотлаҡ - тәнең дә, йәнең дә саф, таҙа булһын".*



ӘЙҘӘГЕҘ...

# СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!



**Кеше - тәбиғәт балаһы. Кешелек борон-борондан тәбиғәткә табынып йәшәгән: һыйындырыусыһы ла, туйындырыусыһы ла ул бит. Яралғы сифатында барлыҡҡа килгәндән алып ғүмеренең һуңғы мәленә тиклем кеше тереклек ҡанундарына буйһоноп йәшәй. Тәбиғәт нисек кенә гүзәл һәм бөйөк булып тойолмаһын, уның ҡанундары әҙәм балаһына һәр саҡта ла мәрхәмәтле була алмай. Ул шул уҡ тәбиғәттән бөткөһөҙ зыян да күргән, уның дәһшәтле көстәренән ҡурҡып, ҡото осоп тигәндәй йәшәгән. Бөгөн кеше үҙен башҡа тәбиғи заттарҙан күпкә өҫтөн ҡуйһа ла, уны тәбиғәт хужаһы, уның менән идара итеүсе, тип атап булмай. Ер, күк, һыу әленән-әле булып торған ҡеүәтле ер тетрәүҙәре, циклон-тайфундары, цунамиҙары аша әҙәм балаһына, үҙ урыныңды белеп йәшә, тип, киҫәтеп торғандай.**

Кешенең әүҙемлеге, йәшәү ритмы ла көн һәм төн сиратлашыуы, миҙгелдәр алмашыныуы, климат үҙгәрештәре менән бермә-бер бәйле булып, уның сәләмәтлеге, ғүмер оҙайлығы ла тәбиғәт тарафынан көйләнә. Хәҙерге заман кешеһенең ғүмере иң күбендә 100 йылға яҡын дауам итеүе беҙгә билдәле, һәм ул әллә ниндәй һорауҙар тыуҙырмай. Әммә ошо айҡанлы мин бик ғәжәп тойолоп, ғалимдарҙы ла ҡыҙыҡһындыра алған бер фактты иҫкә алып үтәйем. Тәүрат, Ҡөрьән кеүек боронғо китаптарҙа Ерҙәге тәүге цивилизация кешеләренең мең йылға тиклем йәшәй алыуы тураһында мәғлүмәт бар. ***Шул уҡ сығанаҡтарҙа бәйән ителеүенсә, кешеләр араһында әхлаҡһыҙлыҡ һәм аҙғынлыҡтың сама-нан тыш артыуы һөҙөмтәһендә улар туфан һыуына батырылып, юҡ ителә, кеше ғүмере иһә 120 йылға тиклем ҡыҫҡартыла... Кешелектең боронғо аңы тыуҙырған тәғлимәтте күптәр әкиәткә тиңләһә лә, әкиәт төбөндә әлегә беҙ төшөнә алмаған хәҡиҡәт тә бар һымаҡ.***

Халҡыбыҙ борон-борондан үҙенең тәбиғи сыҙамлылығы, талымһыҙлығы һәм тән таҙалығы, физик көсөргәнештәрҙе имен-аман кисереп сыға алыуы, сир-сырхауҙарға ҡаршы тора алыуы менән билдәле. Шулай булмаһа, ул меңәр йылдар дауамында бихисап яу-күтәрелештәр аша үтеп, үрсеү-ишәйеү мөмкинлеген һаҡлап ҡала алмаҫ ине. Әммә төрлө милләт халыҡтарын буйһондороп тотоуға йүнәлтелгән батша Рәсәйе сәйәсәтенең ауыр эҙемтәләре башҡорт халҡының да бөлә барыуына сәбәп була. Иң яманы - XIX быуат аҙағына үҙ ерҙәренән ситләтелеп, ҡанына һеңгән йәшәү һәм хужалыҡ итеү рәүешенән биҙҙертелгән башҡорттарға аҡрынлап Рәсәй мөхитенә хас булған кире сифаттар "йоға" башлай. Башҡорттар араһында алкоголь эсемлектәрен ҡулланыу, тәмәке тартыу, зимагорлыҡ (аҙып-туҙып йөрөү) кеүек алама күренештәр бына шулай барлыҡҡа килә. Ә XX быуат халҡыбыҙға тағы ла хәүефлерәк ҡазалар алып килде. Революция, граждандар һуғышы, ҡот осҡос аслыҡ, колхозлаштырыу һәм кулактарҙы юҡ итеү, "халыҡ дошмандарын" эҙәрлекләү, Бөйөк Ватан һуғышы... Былар бөтәһе лә милләтебеҙҙе иҫәпһеҙ юғалтыуҙарға дусар итте. Дәүләттең атеистик сәйәсәтенең халыҡтың әхлаҡи һәм рухи сәләмәтлегенә ни тиклем зыянлы булғанын да яңы ғына аңлай башланыҡ шикелле.

Гиппократ, Әбү Ғәли ибн Сина кеүек шөһрәтле табиптарҙың кеше һаулығын һаҡлауға арналған яҙмалары тарих төпкөлдәренән беҙҙең заманға етеп, тән һәм йән сәләмәтлегенең һәр заманда ла халыҡтар һәм дәүләттәр өсөн үтә мөһим булыуын билдәләп тора. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн Рәсәйҙә халыҡ һаулығы иң ҡырҡыу проблемаларҙың береһенә әйләнде. Хәҙер күптәр 60 йәшкә лә етмәй, донъянан китә. 90-сы йылдарҙағы сәйәси-иҡтисади түңкәрелештән һуң илебеҙ демографик көрсөктән әле булһа ла сыға алмай. Яҡын киләсәктә хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрмәһә, демографик "соҡор"ҙа тиҙ генә хәл итеп булмай торған тиҫтәләгән иҡтисади һәм ижтимағи проблемалар хасил буласаҡ. Уларҙың иң аяуһыҙы - эшкә һәләтлеләрҙең аҙайғандан-аҙая барыуылыр. Киләсәк ҡарттары кем ҡулында, кем ҡарауында ҡалыр һуң?

Әйтергә кәрәк, һуңғы йылдарҙа Рәсәй етәкселеге ошо проблемаларҙы хәл итеү юлдарын әүҙемерәк эҙләй башланы. "Сәләмәтлек" милли проектына ярашлы дәүләт программалары әҙерләнеүе тураһындағы хәбәр ҙә ошо хаҡта һөйләй. Был йәһәттән Башҡортостан етәкселеге, һаулыҡ һаҡлау органдары заманса ҡарарҙар ҡабул итеп, уны ғәмәлгә ашырыу буйынса башҡа төбәктәргә өлгө булып тора. Бөгөн дәүләт һәм һаулыҡ һаҡлау органдары халыҡ сәләмәтлегенә ҙур иғтибар бүлә, финанс сығымдарын арттыра. ***Әммә һәр кемдең тән һәм йән һаулығы иң элек уның йәшәү рәүешенән, сәләмәт тормош ҡағиҙәләрен мотлаҡ үтәүенән тора. Бер юғалтҡан һаулыҡты кире ҡайтарыуы еңел түгел. Иң мөһиме - әйбереңде яңы саҡта һаҡлап кейгәндәй, сәләмәтлегеңде лә йәштән ҡайғыртыу фарыз.***

Борон аҡһаҡалдарыбыҙ, фани донъянан китер ваҡыттары етһә, йәш елкенсәккә теләк-васыяттарын еткерер булған. Бөгөн ошондай заттарыбыҙ йәштәргә иң әүәл нәҫел-нәсәб ебенең имен-аман ҡалыуын теләр ине. Әйтер ине аҡһаҡал: "Әҙәм балаһы барыһын да үҙе теләгәнсә хәл итә ала, яҙмышың - үҙ ҡулыңда. Кеше эшләй алмаған эштәр юҡ. Тик быны өсөн бер мөһим шартты үтәү мотлаҡ - һаулығыңды ҡайғырт, тәнең дә, йәнең дә саф, таҙа булһын. Никотин менән мейеңде томалама, ташла ошо әшәке тәмәке төпсөгөн, әгәр үҙеңде кеше итеп һанаһаң. Үрелмә һыра шешәһенә, араҡыға алданма - алҡымыңдан алыр, кешелек сифатын юйыр. Берүк наркомандар тоҙағына эләгә күрмә - тәнең дә, йәнең дә ғәрипләнер, ҡәберҙән башҡа барыр юлың ҡалмаҫ. Һүгенмә, әшәке һүҙҙәр әйтеүҙән телеңде тый. Тел сафлығы йән тыныслығын бирер, рухың таҙарып, ҡылған изгелектәрең артыр. Күңеленә ятҡан шөғөл тап, һәр саҡ эштә бул, хәрәкәттә тормош бәрәкәтен табырһың. Ғәҙел бул, яҡын күргән дуҫ-иштәрең, туғандарың күп булһа, ғүмер юлың нурлы булыр".

Беҙгә лә, боронғоларҙан ҡалған аманатҡа тоғро булып, үҙебеҙҙең һәм халҡыбыҙҙың сәләмәт киләсәген ҡайғыртып йәшәргә яҙһын ине, тим.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

---

Бер осор баҡсаһында хәләл көс түгеп үҫтергән йәшелсәһе менән әбейҙәр ҡаса-боҫа сауҙа итә ине, әле килеп власть уларға кеше күпләп йөрөгән ерҙә яуым-төшөмдән һаҡланырлыҡ махсус урындар төҙөп бирә.

Ҡасандыр республика етәкселәренең береһе, ауылда йәшәп, эшһеҙмен тип әйтеү оят, ти торғайны. Заман менән бергә ауыл да үҙгәрҙе, мал тотҡандар өсөн көтөүсе проблемаһы көнүҙәк булып ҡала. Бесәнгә, ҡатнаш аҙыҡҡа хаҡ арта барыу ошо өлкәлә эш иткән эшҡыуарҙарға аҡса табыу юлдарын икенсерәккә үҙгәртергә тура киләсәк.

Ә бына йыр-моңға, һүҙгә оҫталыҡтары булғандар өсөн 15-20 йылдан ашыу инде үҙ таланттарын туйҙарҙа, юбилейҙарҙа һәм башҡа төрлө байрамдарҙа ҡулланып, өҫтәмә аҡса эшләү мөмкинлеге асылды, улар үҙҙәрен тамада тип атай. Тимәк, бик күп йылдар дауамында ҡаршылыҡтар ҡуйылһа ла, һәләтле ғаилә парҙарына, теркәү үткәндән һуң, бергә саралар уҙғарырға, табыш алырға мөмкинлек булдырылды. Ҡулдары оҫталар эштән һуң, ял көндәрендә фатирҙар ремонтлап, мебель йыйып аҡса эшләй ала. Был юлы ла ғаилә парҙары бергә эшләп, ғаилә бюджетын тулыландыра, ә теләгәндәр үҙҙәре менән балаларын йөрөтөп, ҡулдарын эшкә өйрәтә. Һәр хәлдә был көнө буйы телефонда ултырыуҙан күпкә отошлораҡтыр, тип уйлайым.

Һәр йорт хужабикәһе лә тәм-том бешерергә оҫта түгелдер. Шуға күрә йәшерәк сағында ашнаҡсы, кондитер булып эшләгәндәр өйҙә тик ултырғансы заказ буйынса бешереп һатһа, ике яҡ өсөн дә отошло булыр ине. Хәҙер дини йолаларҙы үтәү маҡсатында Ҡөрьән аштарына саҡырыу йышайҙы, бына шунда кәрәк тә инде оҫта итеп бешерелгән төрлө бәлеш, һалма, туҡмас һәм башҡа милли ризыҡ.

Мине күптән бер һорау борсой. Ауылдарҙа газ үткәреү менән мейестәрҙе боҙоп ташланылар, хәҙер күпереп бешкән икмәк бешереүселәр юҡ. Туғайҙарға сыҡһаң ҡомалаҡ етемһерәп ултыра, ә бит беҙ бәләкәй саҡта ҡышҡылыҡҡа әсәйҙәр уны тоҡлап-тоҡлап әҙерләтә торғайны. Ҡала янындағы ауылдарҙа мейес сығарып, икмәк бешереп һатһаң, алыусылар табылыр ине, моғайын. Ҡыҫҡаһы, бөгөн аҡса эшләү, мул тормошта йәшәү мөмкинлектәре бик күп. Теләгең генә булһын.

**Әмир ХӘЛИТОВ,**
**Күмертау ҡалаһы.**

---

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ала ҡарға

**(Серая ворона)**



Ҡарға-ҡоҙғондар төркөмөнә ҡараған ҡоштарҙың иң билдәлеһе. Һуңғы йылдарҙа ала ҡарғаның һаны ныҡ үҫте, уларҙы хатта ҡала һәм халыҡ күпләп йәшәгән ауылдарҙа, юлдарҙа, сәнәғәт предприятиелары территорияларында күрергә мөмкин.

Ала ҡарғаны барыһы ла таный: көл төҫөндә, башы, ҡанаттары, ҡойроғо - ҡара. Тауышын да барыһы ла ишеткәне бар: "ҡарр".

Урман ситендә үҫкән ағастарҙа, баҫыу буйына сәселгән ағастарҙа, баҡсаларҙа, һаҙлыҡтарҙа оя ҡора. Ала ҡарғаларҙың күпселеге ҡышлау өсөн сентябрь башында уҡ йылы яҡҡа оса башлай. Шулай уҡ йылыраҡ төбәктәргә лә күсәләр, мәҫәлән, беҙҙең республикала себер популяцияһы ҡарғалары ҡышлай. Улар октябрҙә осоп килә лә, март аҙағы-апрель башында кире тыуған төйәктәренә оса.

Ала ҡарғаның ояһы 1-1,5 метр бейеклектә лә, 16-18 бейеклектә лә булыуы ихтимал. Әйтәйек, Учалы күлдәренең уртаһындағы утрауҙағы талда оя түбән урынлашһа, Өфөнөң тирәктәрендә ул бейектә буласаҡ. Ала ҡарғалар ҡышын уҡ парлаша, ояны яҙға хәстәрләй башлай. Ояны икәүләп ҡоралар, ул башлыса ваҡ сыбыҡтарҙан тора. Һуңынан уға үлән, йөн, ҡағыҙ, сепрәк һ.б. түшәйҙәр. Йыл һайын ояны яңынан, әммә былтырғыһының эргәһенә ҡора. Шуға ла иғтибарлап ҡараһағыҙ, бер ағаста бер нисә оя була. 3-5 йомортҡа һала, 18-21 көн баҫа. 4-5 аҙналыҡ бәпкәләр ояны ташлап оса, был июнь башына тура килә.

Бөтөн нәмәне лә ашай, шулай ҙа бөжәк-кимереүселәр менән туҡланыуға өҫтөнлөк бирә. Ҡоштоң файҙалы булыуы йә булмауы уның нимә ашауына ҡарап билдәләнә. Республиканың ала ҡарғаларын өйрәнеп, ғалимдар уның бөжәктәрҙе ашауын асыҡлаған, шул ризығының 67 процентын зарарлы бөжәктәр алып тора. Йәй башында ул сысҡандар, турғай кеүек ҡоштар менән туҡлана. Тимәк, улар ауыл хужалығы культураларын һаҡлауҙа ҙур роль уйнай. Ҡышын ала ҡарға сүплектәрҙә тамағын туйҙыра.

Ала ҡарғаларҙың өйрәк, аҡсарлаҡ кеүек ҡоштарҙың йомортҡаларын һытып эсеүе, бәпкәләрен ашауы тураһында ла мәғлүмәт бар. Шулай ҙа быны менән бәхәсләшергә лә була, сөнки ала ҡарға кешенән ҡурҡып ояһын ташлап киткән өйрәктәрҙең генә йомортҡаһына тейә. 19 йыл тирәһе йәшәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Билдәһеҙ кешеләр, үҙҙәрен элемтә операторҙары тип таныштырып, 79 йәшлек ҡатынға шылтырата һәм килешеүҙе оҙайтыу һылтауы менән уның паспорт мәғлүмәттәрен ала.***



ФИНАНС МӘКТӘБЕ

# ХЫЯЛЫҢ...
## аҡса менән бәйлеме?

**Яңы йыл - яңы маҡсаттар. Күптәр был көндәрҙә хыялдар исемлеген һәм алдағы 365 көнгә пландар төҙөй. Әгәр теләкте тормошҡа ашырыу өсөн аҡса ғына кәрәк икән, тимәк, был хыял түгел, ә маҡсат, уға аҡса туплаrға ғына кәрәк. Нисек? Финанс эксперты Булат НАҒАЕВ, килем кимәленә ҡарамайынса, тормошта еңел генә ҡулланырға мөмкин булған кәңәштәр бирҙе.**



### Хыял күпме тора?

Иң башта бының өсөн талап ителгән сумманы билдәләргә кәрәк. Аныҡ маҡсат булһа, уға өлгәшеү юлдарын табыуы күпкә еңелерәк. Шуға күрә теләкте аныҡ билдәләү мөһим. Мәҫәлән, "Мальдив утрауҙарында ял итеү өсөн аҡса йыйырға теләйем" йәки "Яңы телефон алыу өсөн аҡса туплаrға теләйем". Теләктәрҙән сығып, был хыялдың күпме тороуы һәм уны күпме ваҡыт эсендә бойомға ашырырға мөмкин икәне билдәле була.

Маҡсаттарҙы уларға ирешеү ваҡыты буйынса бүлеү ҙә мөһим: ҡыҫҡа йылға тиклемге пландар - ҡыҫҡа ваҡытлы, өс йылдан ете йылға тиклемгеләре - урта сроклы, ете йылдан ашыуыраҡтары оҙайлы тип иҫәпләнә. Әгәр ҙә өс йылда маҡсатҡа ирешеү мөмкинлеге бар икән, инвестиция алымдарын ҡарарға ярамай, йыйған аҡсаны йәки депозитты ҡулланыу ҙа етә.

Теләктәрҙе яҙғас, мөһимдәрен асыҡлау зарур. Бер йылдан күберәк ваҡыт талап ителгән маҡсат өсөн инфляцияны иҫәпкә алырға кәрәк: һеҙ аҡса йыйғанса, хыял ҡиммәтләнә. Тимәк, күберәк сумма һалырға кәрәк. Бөгөнгәсә хыялығыҙҙың хаҡы нисек үҙгәргәнен ҡарағыҙ. Хаҡтың йылына уртаса 10 процентҡа артыуын иҫәпкә алығыҙ.

### Аҡса иҫәп ярата

Хәҙер, сумманы һәм ваҡытты билдәләгәс, ай һайын күпме аҡса һалып барырға кәрәклеген аңлау өсөн килемде һәм мотлаҡ сығымды анализлау мөһим.

Сығымдарға ентеклерәк ҡарарға кәңәш ителә. Мотлаҡ һәм даими булмаған түләүҙәрҙе (мәҫәлән, ял итеү өсөн сығымдар, өйҙән ситтә туҡланыу, эмоцияларға бирелеп һатып алыу) билдәләргә. Артабан артыҡ сығымдарҙы табыу. Төрлө онлайн-сервистарға яҙылып, элемтә һәм интернет тарифтарын яңынан ҡарағыҙ. Бер һүҙ менән әйткәндә, бюджеттың бер өлөшөн һеҙҙермәй генә "ашаған", әммә шул уҡ ваҡытта файҙа килтермәгән сығымдарҙан баш тартырға кәрәк. Әгәр уларҙы ҡыҫҡартһаҡ, йәшәү сифаты бик үҙгәрмәй. Бынан тыш, бюджетты алдан планлаштырырға, үҙенә ниндәйҙер мотлаҡ булмаған сығымдар лимитын билдәләргә мөмкин.

### Копилкамы, әллә онлайн?

Аҡсаны төрлө ысул менән тупларға була. Бала саҡтағы кеүек копилкаға йәки ай һайын күпмелер сумманы конвертҡа һалып ҡуйырға мөмкин.

Эксперт кәңәштәре: хыял өсөн тип йыйылған аҡсаның яҡында ғына булыуы үҙенә ымһындырып тора. Уны тиҙ генә алып тотоноуы ла еңел. Шуға күрә уны үҙеңдән һаҡларға кәрәк. Мәҫәлән, аҡсаны ватып ҡына алырға мөмкин булған копилка һайлау. Ә иң яҡшыһы - даими күсереү мөмкинлеге һәм аҡсаны алыу өсөн циклау булған банк иҫәбен асыу.

### Үҙҙәре аҡса эшләһендәр!

Аҡса тик ятмаһын, ә аҙ булһа ла килем килтерһен өсөн тупланма иҫәп асыу һәм аҡсаны шунда һаҡлау яҡшыраҡ. Был - маҡсатҡа табан тағы бер аҙым.

Әгәр тупланма суммаһы ҙур булһа, уларҙы бер нисә вкладҡа урынлаштырыу яҡшыраҡ, шул рәүешле вкладтың суммаһы процент менән бергә 1,4 миллион һумдан артмаҫҡа тейеш. Был банктың лицензияһы тартып алынған осраҡта аҡсаны юғалтмаҫҡа мөмкинлек бирә: әлеге сумма Вкладтарҙы страховкалау агентлығы тарафынан һаҡлана. Әгәр маҡсатҡа өлгәшеү өсөн өс йылдан ашыу ваҡыт кәрәк икән, акциялар йәки облигациялар һатып алырға мөмкин. Төп ҡағиҙә - тикшерелгән финанс инструменттарын ғына һайлау. Шуны иҫтә тотоу мөһим: потенциаль килем ни тиклем юғары булһа, аҡсаны юғалтыу хәүефе лә шул тиклем юғары. Инвестиция һалыр алдынан был мәсьәләне ныҡлап өйрәнегеҙ, мәҫәлән, Рәсәй банкы сайтында бушлай курстар үтегеҙ. Шулай уҡ финанс мутлашыусыларына эләгеү хәүефе тураһында ла онотоrға ярамай.

### Планлаштырылмаған килемде лә хыял өсөн һалып ҡуйырға

Әгәр аҡса бүләк итһәләр йәки эштә премия бирһәләр, сумманы хыялға тип һалып ҡуйыу яҡшыраҡ. Йыш ҡына кешелә көтмәгәндә килеп ингән аҡсаны тотоноу теләге тыуа. "Бер минутлыҡ эмоциялар менән" һатып алынған әйбер күп шатлыҡ килтермәй. Шуға уны хыял өсөн ҡалдырыу яҡшыраҡ.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

*ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!*

# ҺАМАН АЛДАЙҘАР, АЛДАНАЛАР!




**Өфөлә аферистарға пенсионерҙарҙы алдарға ярҙам иткән ике егет ҡулға алынды.**

Мутлашыу схемаһы түбәндәгесә була: билдәһеҙ кешеләр, үҙҙәрен элемтә операторҙары тип таныштырып, 79 йәшлек ҡатынға шылтырата һәм килешеүҙе оҙайтыу һылтауы менән уның паспорт мәғлүмәттәрен ала. Тиҙҙән ҡатынға "банк вәкилдәре" шылтыратып, уның аҡсаһына хәүеф янауы тураһында хәбәр итә. Уларҙың етәкселегендә пенсионер ҡатын банкка бара һәм үҙенең иҫәбенән 340 мең һум аҡса ала, аҡсаны мутлашыусыларҙың күрһәтмәһе буйынса эш иткән курьерҙарға тапшыра. Һуңыраҡ ҡына ул алданғанын аңлай һәм полицияға мөрәжәғәт итә.

Ошондай уҡ хәл 86 йәшлек ҡатын менән дә булған. Ул курьерҙарға миллион һумдан ашыу аҡса тапшырған.

Өфө Эске эштәр идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, гәйепләнеүсе 17 һәм 19 йәшлек егеттәр ҡулға алынған. Урланған аҡсаны улар кураторҙарына күсерә, ә бер өлөшөн үҙҙәренә ҡалдыра. Ике факт буйынса ла енәйәт эштәре ҡуҙғатыла.

Әйткәндәй, Рәсәй Эске эштәр министрлығында ошондай алдашыу юлындағы курьер булып эшләүселәр араһында иң йыш осраған өс төркөмдә асыҡланы.

*16-24 йәш.* Тотороҡло ғына эше булмаған һәм финанс ауырлығы кисергән Рәсәй йәки БДБ илдәрендә йәшәгән ир-егет. Улар Telegram аша операция өсөн бер нисә меңдән алып тиҫтәләрсә мең һумға тиклем түләүгә ризалаша. Кураторҙар йәштәрҙе минималь хәүеф йәки эш хаҡының законлылығына ышандыра.

*30-39 йәш.* Йыш ҡына улар элек хөкөм ителгән, ҡайһы саҡта ниндәй ҙә булһа бәйлелеге булған кеше. Улар маҡсатлы рәүештә легаль булмаған эш хаҡы эҙләй һәм хәүеф-хәтәрҙе аңлай. Улар өсөн был хата йәки осраҡлылыҡ түгел, ә килем сығанағы.

*50 йәштән өлкәндәр.* Йыш ҡына был ҡатын-ҡыҙҙар. Башта уларҙы алдап, аҡсаларынан мәхрүм итәләр, һуңынан ҡурҡытыу менән янап, законһыҙ ғәмәлдәргә мәжбүр итәләр. Улар ҡурҡыуҙан һәм аптырауҙан курьер булып китә, йыш ҡына банкка йәки тикшереүгә ярҙам итәләр тип уйлай.

Һәр хәлдә, закон курьерҙарҙы енәйәттең тулы хоҡуҡлы ҡатнашыусылары тип ҡарай. Тап уларға енәйәт яуаплылығы һәм урланған аҡсаны түләтеү ҡаралған.

Былтыр полиция бөтәһе 432 курьерҙы ҡулға алған.

**Элина ӘХМӘТОВА.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 ғинуар "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим, А. Абушахманов), драма. 12+

**17 ғинуар "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов, Ф.Ғарипов), музыкаль комедия. 16+

**18 ғинуар "Килен"** (З. Мусина, Ф. Ғарипов, инсц. З. Бураҡаева), драма. 16+



### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 ғинуар "Волшебник Изумрудного города"** (А. Богачева, М. Ҡулбаев), әкиәт. 11:00. 6+

**21 ғинуар "Зимняя небылица"**, музыкаль әкиәт. 12:00. 6+

**21 ғинуар "Всё могло бы быть иначе..."** (М. Ҡулбаев), лирик комедия. 19:00. 16+

**22 ғинуар "Дни Савелия"** (Г. Служитель, М. Ҡулбаев). 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**17 ғинуар "История одной снежинки"** (В. Аношкин). 12:00 һәм 15:00. 0+

**18 ғинуар "Морозко"** (М. Шуринова). 12:00 һәм 15:00. 0+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**20 ғинуар "Йыл миҙгелдәре. Вивальди и Пьяццолла"** БДФ-ның камера оркестры концерты. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**17 ғинуар "Бременские музыканты"** балалар өсөн концерт. 0+

**18 ғинуар "Здоровая еда - счастливая семья"** музыкаль-әҙәби лекторий. 0+

**22 ғинуар "Һин онотма ерҙә мин барын!"** "Ашҡаҙар" эстрада-фольклор төркөмө концерты. 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**20 - 22 ғинуар "Как лиса счастье под елкой нашла"** Яңы йыл әкиәте. 10:00. 0+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**19 ғинуар "Бременские музыканты"** мюзикл. 6+

### БР Милли музейы

**16 ғинуар "Жизнь как археологическая симфония"** археолог А.Х. Пшеничнюк иҫтәлегенә бағышланған күргәҙмәне асыу. 11:00. 6+

**16 ғинуар "Сокровищница мудрости: поэтическое наследие Гали Сокороя"** шағир-мәғрифәтсенең тыуыуына 200 йыл тулыу айҡанлы музей ҡунаҡханаһы. 15:00. 12+

**20 ғинуар "Личный враг Гитлера"** Даян Мурзиндың тыуыуына 120 йыл айҡанлы мәҙәниағартыу сараһы. 12+

*Үҙҙәре теләп, аңлы рәүештә туған телен өйрәнгән, һөйләшергә тырышҡан кешеләр менән һоҡланам. Ә бына телдәре башҡортса асылып, урынһыҙ рус һүҙҙәре ҡушып, телде боҙоп һөйләшкән кешеләр аптырашҡа ҡалдыра.*



МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# АЛҺЫУ МЕНӘН БЕРГӘ...



**Интернет-платформаларҙа "Ай, былбылым" клибының премьераһы булды. Йырҙы популяр AY YOLA төркөмө йырсы Алһыу менән бергә башҡара.**

Халыҡ йыры Рәсәйҙә трендҡа әйләнде һәм юғары баҫҡыстарға күтәрелде.

Стилләштерелгән башҡорт милли костюмдары кейгән Алһыу һәм AY YOLA солистары йылға буйында, ҡышҡы урманда һәм тауҙарҙа йырлай. Клипты бүрәт режиссеры Баяр Барадиев етәкселегендәге ижади төркөм 14-16 декабрҙә Башҡортостанда, шул иҫәптән Өфө муйынсағы биләмәһендә, "Аҫылмалы таш"та төшөргән.

"Ай, былбылым" башҡорт халыҡ йыры Башҡортостанда һәм Татарстанда киң билдәле. Ҡазан университетының этнографик экспедицияһы был йырҙы 1913 йылда Өфө губернаһының Стәрлетамаҡ өйәҙендә тыуып үҫкән башҡорт Солтангәлиевтан фонографҡа яҙып алған, һуңынан ул М.И. Бергтың "Һигеҙ татар-башҡорт йыры" йыйынтығында баҫылып сыҡҡан.

Яҡташыбыҙ, Рәсәйҙең халыҡ артисы Илдар Абдразаҡов был йырҙы Өфөлә үҙенең I Халыҡ-ара музыка фестивален асыу тантанаһында башҡарҙы. Башҡорт эстрадаһында уны Башҡортостандың халыҡ артисы Рәсүл Ҡарабулатов, шулай уҡ Рәсәйҙең халыҡ артистары Ренат Ибраһимов, Илһам Шакиров, йәш йырсылар Динә Ғарипова, Сәйҙә Мөхәмәтйәнова һәм башҡалар йырлай.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАШҠОРТСА МАТУР ИТЕП ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!

**Бер заман яйлап баҫып эштән ҡайтып килəм, ҡаршыма танышым осраны. Ул студент ҡыҙ булғас, әлбиттә, имтихандар, уҡыу тураһында һораштырам. "Мин так ауылға хочу! Все еще ҡайта алмайым", - тип үҙ зары менән бүлешә ул. Оҙаҡ ҡына хәбәр һатып торҙоҡ та, үҙ юлыбыҙ менән киттек. Ә минең башҡа бер уй кереп ояланы ла, сыҡмаҫ булды: шулай рус һүҙҙәре ҡуша-ҡуша, вата-емерә "башҡортса" һөйләшеү ғәҙәткә инеп, күнегеп бөтөлгән түгелме һуң?**

Шунан бирле һәр ваҡыт үҙемдең дә, башҡаларҙың да туған телебеҙҙә нисек һөйләшкәненә иғтибар итә башланым. Бер өйрәнгәндән арыныуы еңел булмаһа ла, саф башҡортса ғына, телемде төрлөсә байытып аралашырға тырышам. Шулай ҙа тиҫтерҙәрем һәм үҙемдән кесерәк дуҫтарым араһында: "Һин әбейҙәр кеүек һөйләшәһең", - тейеүселәр ҙә табыла...

Интернет селтәрҙәрендәге күп яҙмаларҙың, хатта радио, телевизорҙан яңғыраған йырҙарҙың да рус теленән туранан-тура башҡортсаға ауҙарылған булыуы, ҡыҙғанысҡа, бик йыш күҙәтелә шул хәҙер. Эйе, икеһе лә дәүләт теле, һәр ваҡыт ҡолаҡта яңғырап тора, әммә рус теле менән башҡорт телендә һөйләм төҙөлөшө айырылыуын иҫтә тотоу кәрәк. Ындай осраҡтар йәштәрҙең хәҙер йышыраҡ русса фекер йөрөтөүенән барлыҡҡа килә, тип уйлайым. Әгәр яҙған-һөйләгәндәре саҡ ҡына ла икеләнһәң, белгәнерәк кешенән кәңәш һорау зыянға булмаҫ. Һәм телмәрҙе байытыуҙың иң шәп һәм һыналған ысулы - ул күп итеп, иң мөһиме, аңлап, анализлап башҡортса китаптар уҡыу.

"Мин - башҡорт!" тип, кәрәккәндә лә, кәрәкмәгәндә лә мәҡәл-әйтем ҡыҫтырып, "самауыр"ҙы "һамауыр"ҙан һалдырыу ҙа килешкән эш түгел, әлбиттә. Ҡайһы ваҡытта урынлы ғына рус һүҙе ҡушып ебәреү күпкә отошло булған саҡтар бар. Әммә Зәйнәб апай Биишева:

"Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,
Серле ҡамыш ҡурайындай ҡарт, олпат һин..." - тип һоҡланған ғәзиздәрҙән-ғәзиз телебеҙҙең бәҫен төшөрмәһәк ине. Башҡа тел кешеһенә беҙҙең башҡорттарҙа нисек һөйләшкәнебеҙ мөһим түгел, ул беҙҙең үҙебеҙ өсөн, милләтебеҙҙең киләсәге өсөн кәрәк.

Үҙҙәре теләп, аңлы рәүештә туған телен өйрәнгән, нисек тә булһа һөйләшергә тырышҡан кешеләр менән һоҡланам мин. Ҡулымдан килгәнсә ярҙам да итергә тырышам уларға. Ә бына телдәре башҡортса асылып, мәктәптә беренсе кластан башҡорт телен уҡып, башҡорт мөхитендә йәшәп тә урынһыҙ рус һүҙҙәре ҡушып, телде боҙоп һөйләшкән кешеләр аптырашҡа ҡалдыра.

Ҡыҫҡаһы, йәштәр, әйҙәгеҙ, башҡортса матур итеп һөйләшәйек. Беҙ онотһаҡ, киләсәк быуынға башҡорт теленең гүзәллеген, байлығын кем тапшырыр?

**Айһылыу ДАУЫТОВА.**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# БЕР ТАБАН БӨРЛӨГӘН

**Таба йәйләүендәге табаҡлы балды инҡеш һырып алған. Бал яратҡан балалар безелдәктәрҙе миләш табаны менән ҡыуып маташҡан була. Их, баллы табаҡ тиһән, оло һауытта хуш еҫ аңҡытҡан затлы ризыҡ тәме ауыҙҙа уйнағандай. Табаҡлы бал да шундай уҡ рәхәт тойғо тыуҙыра, тик мәғәнәһе тулыһынса асылып бөтмәй. Етмәһә, үҙе ниндәй таба йәйләүендәләр?**

**Табаҡлы бал.** Табаҡлы бал - кәрәҙле балдың ҡайһы бер урындарҙа осраған атамаһы. *Балалар табаҡлы балды ҡул менән тотоп ашарға ярата. Табаҡлы бал тәмлерәк бит ул.*

**Таба йәйләүе.** Икмәк һалып бешерә торған йоҡа тимер (противень) икәне иҫтә ҡалһын таба йәйләүенән. *Таба йәйләүе еләк-емеш киптереүгә лә йәтеш. Таба йәйләүендә бәлештәр уңып бешә.*

**Табан. 1.** Башҡорт телендә киң билдәле "табан" һүҙенең тағы бер үҙенсәлекле мәғәнәһе "тәлгәш" тигәнгә тура килә. *Еләк табаны. Бер табан бөрлөгән йыйҙым.* **2.** "Быуын" һүҙен дә алмаштыра ала икән ул "табан". *Ете табанды белеү. Яңы табан йәштәре ил гиҙергә әүәҫ.*

**Табанлы.** Табанлы - алдына алғанын ҙур тырышлыҡ менән атҡара торған кешене ҡылыҡһырлаған сифат. *Бигерәк табанлы икәнһең. Табанлы кеше ниәтенә ирешер.*

**Тағым.** Тағымдың бәүелсәк икәнен белә инегеҙме? Һирәк осраған был һүҙҙе лә телгә эйәләштерәйек. *Ике ағас араһына олаталары тағым ҡуйған. Ейәндәре рәхәтләнеп шул тағымда атына.*

**Шулай итеп, туған телебеҙ, бер һүҙен дә юғалтмай, табандан -табанға тапшырылһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәтҡә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҘМЫШ ҺАЙЛАП, әсе тәҡдиргә юлыҡма

Ҡыҙ ҡыҙлы булмаҫ, әсә ҡәҙерен белмәһә; ул уллы булмаҫ, атай ҡәҙерен белмәһә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ерҙе яралтҡас, Хоҙай уның өҫтөн йәшеллек менән ҡаплай. Йәшеллек донъяһында камиллыҡ булдырғансы, байтаҡ көс һалырға тура килә Аллаһыға. Ләкин үҫемлектәр донъяһында ла барыһы ла бер көйлө генә бармай. Бына бер заман унда башҡаларҙан айырылып торорға теләгән, үҙен башҡаларҙан өҫтөн тотҡан бер үлән баш ҡалҡыта. Тәүҙә ул бик ныҡ итеп буйға үҫә. Һуңынан нәҙек һабаҡтары ер өҫтөндә терәүһеҙ тора алһын өсөн ҡалыная һәм тупаҫлана башлай. Нескә генә япраҡтары ындай тупаҫ һабаҡта йәмһеҙ күренгәс, үлән уларҙы ла ҙурайта һәм ҡалынайта. Оҙон, итле япраҡтар үләнде уратып урынлаша һәм уның аҫтында күләгә барлыҡҡа килтерә. Үләндең яңы сығып килгән шытымдары был күләгә аҫтында үҫеп китә алмай, һәләк була. Үлән үҙ шытымдарын үлтереү менән генә туҡтамай, йәнәшендәге башҡа төр үләндәргә һөжүм итә башлай. Уларға нисектер зыян килтереү өсөн үҙ тәнендә энәләр барлыҡҡа килтерә. Үләндең башҡаларға һөжүме артҡан һайын, энәләре лә оҙоная һәм ҡатылана. Үҙ-үҙен яратыу, башҡаларға нәфрәт менән тулышҡан һайын үлән ағыулыға әйләнә.**

**Һәр яҙ һайын башҡалар менән бергә был үлән дә сәскә ата. Уның сағыу һәм матур сәскәләре алыҫтан күренеп тора. Ләкин был матурлыҡ менән берәү ҙә һоҡланмай, хатта уға бөжәктәр ҙә яҡынламай. Әлеге матур сәскәләре лә башҡа үләндәргә ҡарағанда тиҙерәк һарғая. Берҙән-бер көндө үлән шулай берәүгә лә кәрәкмәйенсә йәшәгәнен аңлап ҡала һәм Хоҙайға: "Мине тәүге хәлемә ҡайтар, зинһар. Мин башҡаларға кәрәк булырға теләйем", - тип үтенә. Хоҙай уға шулай ти: "Йән эйәһенең үҙлеге теләгәндә хатта Хоҙай ҙа үҙгәртергә теләмәй. Һинең үҙлегең башҡаларҙан өҫтөн булыуҙы, айырылып тороуҙы теләгәйне, һин айырылып тораһың да. Хәҙер инде һин ғүмереңдең ахырына тиклем ошондай рәүештә йәшәп, башҡаларҙы үҙеңдән ытырғандырып торасаҡһын. Үҙең теләп алған үҙлегең менән ҡәнәғәт бул, сөнки был - һинең асылың. Башҡаларға зыян итмәҫкә һәм үҙ йөҙөң менән йәшеллектең йәмен ебәрмәҫкә теләһәң, берҙән-бер ысулың - һинең Ер йөҙөнән бөтөнләй юҡҡа сығыуың..."**

**"Үҙең юҡҡа сыҡ! - тип ҡотороноп киткән ағыулы үлән. - Мин әле йәшәйәсәкмен! Башҡаларға файҙалы була алмаһам, зыянлы булып йәшәйәсәкмен! Мин барыһын да үҙемде танырға мәжбүр итәсәкмен!" Шунан үлән ҡотороп үҫә башлай, бар яланды баҫып ала. Уның тирәһендәге файҙалы үләндәр юҡҡа сыға. Йәшеллектең уның алдында көсһөҙ икәнен күреп, мин бар тәбиғәт менән идара итә алам, тигән уй нығынғандан-нығына. Әммә шул ваҡытта... Кеше барлыҡҡа килә. Салғыһын алып, бер нимәгә лә яраҡһыҙ үләнде сабып, уны аяҡтары аҫтына түшәп, тапап уҙа. Кеше көсөнә ҡаршы тора алмаҫын аңлаған үлән яр буйҙарына, урмандарға ҡаса һәм үҙенең өҫтөнлөгөн иҫбат итергә теләп, хәүефһеҙ урындарҙа тағы ла ҡотороп үҫеүҙе дауам итә. Ләкин барыбер берәүгә лә кәрәкмәгән сүп булып ҡала...**

**Кеше лә шулай. Тәүҙә ул барыһынан да өҫтөн булырға ынтыла, шунан мөртәткә әйләнә. Яҙмыш һайлап, әсе тәҡдиргә юлығыуың да бар шул..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 15.01.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 15.01.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 16.01.2026 й.

«Киске Өфө»нөң индексы — **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 81

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.